Мостай Кәрим

# Әҫәрҙәр

2

ТОМ

Мустай Карим

# Сочинения

ТОМ

2

Издательство
"КИТАП"
имени
Зайнаб
Биишевой

УФА · 2011

Мостай Кәрим

# Әҫәрҙәр

## 2
## ТОМ

Зәйнәб Биишева исемендәге "КИТАП" нәшриәте

ӨФӨ · 2011

УДК 821.512.141-1
ББК 84(2Рос=Баш)-5
К 97

Мөхәрририәт:
*И. М. Кәримов, Ғ. Б. Хөсәйенов,*
*М. Х. Нәзерғолов, Ф. Ғ. Хисамитдинова,*
*З. Ш. Ҡарабаева*

Төҙөүселәре:
*И. М. Кәримов, Ф. С. Фазылова*

**Мостай Кәрим**
К 97 Әҫәрҙәр. II том: шиғырҙар, шиғри тәржемәләр. — Өфө: Китап, 2011. — 416 бит.

ISBN 978-5-295-05408-2 (т. 2)
ISBN 978-5-295-04902-6

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим «Әҫәрҙәр»енең II томына авторҙың 1970—2005 йылдарҙа ижад ителгән шиғырҙары һәм төрлө йылдарҙағы шиғри тәржемәләре тупланды.

**УДК 821.512.141-1**
**ТП — 154/11** **ББК 84(2Рос=Баш)-5**

© И. М. Кәримов, Ә. М. Кәримова, 2011
© И. М. Кәримов, Ф. С. Фазылова, төҙөү, 2011
© Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы, 2011

**ISBN 978-5-295-05408-2 (т. 2)**
**ISBN 978-5-295-04902-6**



# *Шигърият*

*1970–2005*

## СИГЕҮ СИГӘ ҠЫҘҘАР

Кис ултырып ҡыҙҙар сигеү сигә,
Сиккәндәре, беләм, бирнәлек —
Апайымды былтыр һораттылар,
«Әле йәшерәк» тип бирмәнек.

Сана юлы төшкәс (вәт күр ҙә тор),
Йәнә килер әрһеҙ яусылар.
Телдәренән балдар тамыр, —
Имеш:
«Һеҙҙә аҡҡош, беҙҙә аусы бар...»

Кис ултырып ҡыҙҙар сигеү сигә,
Биҙәктәргә ялғап биҙәкте,
Биҙәктәре ебәк йырҙай ағыла,
Тик йырҙары өҙә үҙәкте:

«Күпер аҫты күк томан,
Күпһенмәгеҙ, күп тормам,
Айҙар торһам, йылдар тормам,
Һағынырһығыҙ, мин булмам...»

Мин бәләкәс, бик бәләкәс әле,
Тар һәндерә — барлыҡ йыһаным.
Шул йыһанда был кис япа-яңғыҙ
Йомма йәшем түгеп иланым.

Мин иланым:
Бына килерҙәр ҙә

Ҡыңғырауҙар таҡҡан аттарҙа
Берәм-берәм алып елдерерҙәр
Ете ҡыҙҙы ете яҡтарға.

Мин иланым:
Был кис ҡабатланмаҫ,
Кире ҡайтмаҫ инде был моңдар...

Ҡыҙҙар йырлай.
Күбәләктең ниңә
Йәш түккәнен белмәй былбылдар.

Кистәр ҡабатланмай. Моңдар ҡайта,
Урап ҡайта икән бер талай.
Күпме үрҙәр үткәс, шул йыр тағы
Йөрәгемдә телде урталай:

«Күпер аҫты күк томан,
Күпһенмәгеҙ, күп тормам,
Күп торһам да, мәңге тормам,
Һағынырһығыҙ, мин булмам...»

Мин хәҙер ҙур. Хәҙер бик ҙур инде.
Бөтә донъя – минең биләмем.
Бер кисәнең түгел, бар ғүмерҙең
Ике килмәүҙәрен беләмен.

Шуға күрә үкһеп кенә түгел,
Үкереп илаһаң да ерлек бар.
Иламайым. Сөнки сабырлыҡ бар,
Сабырлыҡҡа тиңдәш ирлек бар.

Иламайым. Фани донъя аяҙ,
Ыҫыҡ яна йәшел үләндә.
Таң нурына ҡуныпп, яҙ турғайы
Тәүге йырын йырлай түбәмдә.

*1970*

* * *

Еңеүҙәрем, уңыштарым булды,
Бүләк алдым, хөрмәт татыным;
Менмәһәм дә, һыйпағаным булды
Алтын ялын шөһрәт атының.

Тик тырыштым ireп төшмәҫкә мин
Килеп китер шатлыҡ ҡаршында.
Сөнки бәхет була тик иртәгә,
Тылсымлы ил — диңгеҙ артында.

Ләкин булды бер саҡ бәхетемдән
Түбәләрем күккә тейгәне.
Ул көн миңә: «Иң бәхетле кеше
Ерҙә мин ул!» — тине һөйгәнем.

*1970*

* * *

Ейән — йәш арыҫлан. Бар ҡеүәте
Тимер тырнағында.
Атаһы — йөк аты. Бар мөлкәте
Алтын тояғында.

Олатаһы — терпе. Уның инде
Хәле аяныслы:
Тырпайырға торған энәләре —
Барлыҡ таянысы.

*1970*

* * *

Аҡыллыға серем систем:
Үҙе теләп
Улы итте;
Бер ахмаҡҡа серем систем —
Теләмәҫтән
Ҡоло итте.

*1970*

* * *

— Талпынаһың, ашҡынаһың,
Күҙҙәреңдә нур ғына,
Әй, йәш егет, йөрәгеңдән
Ниндәй шатлыҡ урғыла?

— Яныпшашып, яныпшашып
Булдым ғашиҡ!..

— Сал сикәле уҙаман ир,
Ниңә ауыр ҡанатың,
Ниндәй хәсрәт төштө һиңә,
Ниңә моңһоу ҡарашың?

— Яныпшашып, яныпшашып
Булдым ғашиҡ!..

*1970*

## БҮЛӘКТӘР

Ун дүрт йәштә башҡорт ҡыҙы
Ҡасып ҡына яулыҡ сигә —
Тәү бүләк был һәр кис һайын
Бик зарығып көтөүсегә.

Ун һигеҙҙә, әсирләнеп
Мөхәббәттең ғәмәленә,
Бар булмышын рәхәтләнеп
Бүләк итә хәләленә.

Шунан алып күкрәгендә
Йөрөтә ул илдең ҡотон,
Бүләк итә тупрағына
Яңы кеше, яңы тоҡом...

Ә алтмышҡа еткәс инде,
Йыя башлай үлемтеген,
Ләкин уны борсолдорған
Һис кенә лә үлем түгел.

(Ни юҡ унның һандығында?! —
Яулыҡтары, һөлгөләре,
Хушбуйҙары, һабындары,
Хатта ваҡ-ваҡ көҙгөләре...)

«Өлөшһөҙҙәр ҡалмаһын», — ти,
Ошо унның бар хәстәре.
Төн йоҡламай барлап сыға
Ҡорҙаштарын, ҡәрҙәштәрен.

Ул һуң изге бурыстарын
Бөтмәгәнме инде түләп?
Юҡ, барыбер ҡалғандарға
Биреп китә һуңғы бүләк.
Ҡалғандарға һуңғы бүләк...

*1970*

## ҺАҒЫНЫУ

Аҡ томанлы Аҡманайҙы,
Аҡ ҡайынлы Сағылымды
Был юлыһы бигерәк тә,
Бигерәк тә һағыныллы.

...Елдәр бында ят көйҙәрҙе
Уйнаһа ла төн ҡылында,
Туған өндәр етә миңә
Барыбер үҙ тулҡынында.

Мин уларҙы сүпләп алам
Меңәр ауаз араһынан,
Бер ҡарашты айырамын
Йөҙәр мең күҙ ҡарашынан.

Аҡманайым, һине онотһам,
Килер тамуҡ язалары —
Минең өсөн ҡороп ҡалыр
Донъяның бар даръялары.

Сағыл тауы, әгәр һине
Төшөрмәһәм иҫтәремә,
Ер шарының бар тауҙары
Ишелерҙәр өҫтәремә.

Инәм теле — иман телем,
Әгәр һине һағынмаһам,
Көн дә һиңә табынмаһам,
Телдәремдән яҙыр инем.

*1970*

* * *

Тәбиғәттә шундай миҙгел бар:
Ел тынғас та, япраҡ тирбәлә,
Ҡояш бата тауҙар артына,
Нуры бүленеп ҡала түбәлә.

Тәбиғәттең шундай миҙгелен
Күрһә ине минең йылдарым:
Мин киткәндә, берәй быуатҡа
Бүленеп ҡалһа ине йырҙарым.

*1970*

## КОШТАР ОСОРАМ

Ваҡ мәшәҡәт, ығы-зығы тамам,
Бар эшемдең сыҡтым осона.
Шуға күрә бөгөн таңдан алып
Күкрәгемдән ҡоштар осорам.

Аҡлыҡ, хаҡлыҡ өсөн көрәшселәр!
Тәү бүләгем һеҙгә, ҡарағыҙ:
Ҡанаттарын ғорур ҡаға-ҡаға
Күтәрелде күккә ҡарағош.

Юлдағылар! Һеҙгә ебәрәмен
Ел-дауылдар үтер торнаны.
Сирлеләрем, кәкүк осорам һеҙгә —
Оҙаҡ-оҙаҡ саҡыра торғанын.

Сығып осто ярһыу бер һандуғас,
Ғашиҡтарым, һеҙҙең өлөшкә.
Көткәндәргә аҡ күгәрсен килер
Яңы өмөт өҫтәп өмөткә.

Хыялыйҙар, сая һәм йыуаштар!
Һәммәгеҙгә тейер ҡошом бар.
Ғәмһеҙҙәргә генә һис нәмә юҡ —
Әйҙә улар ҡошһоҙ торһондар.

Ығы-зығы, ваҡ мәшәҡәттәр тамам,
Бар эшемдең сыҡтым осона.
Шуға күрә һәр көн таңдан алып
Күкрәгемдән ҡоштар осорам.

*1970*

* * *

Мин киткәндә: «Етем ҡалдырма!» — тип
Шиғырҙарым арттан эйәрер.
Балаларым! Һеҙҙең тоғролоҡҡа
Хәҙерҙән үк башым эйәмен.

...Сабый сағым. Атын егеп, атай
Сыйыр ғына хәл юҡ ҡуранан,
Йөк артынан тыр-тыр эйәрәм дә:
«Мине ал!» — тип донъя ҡубарам.

Бер аҙ барғас, атын туҡтата ла
Мине ултырта атай алдына,
Әммә баҫыу ҡапҡаһына еткәс,
Арбаһынан төшөрөп ҡалдыра.

Шиғырҙарым,
Һеҙҙе алырмын «имән кәмәмә» мин,
Һуңғы елдәр өргәс елкәнгә.
Тик барыбер төшөрөп ҡалдырырмын
Зыярат ҡапҡаһына еткәндә.

Һеҙ гонаһһыҙ. Мин бит беләм һеҙҙе.
Һеҙ төштөгөҙ миңә күктәрҙән,
Бар яҙыҡты үҙ өҫтөмә алам,
Бар яҙаһын үҙем күтәрәм.

*1970*

## ЭКСПРОМТТАР

* * *

Ғүмер буйы ҡотола алманым мин
Икеләнеүҙәрҙән, шиктәрҙән.
Ҡаты баҫып атлап уҙа алманым
«Изге» тип һаналған сиктәрҙән.

* * *

Хушлаштым томандар менән,
Томандар таралдылар.
Хушлаштым шиктәрем менән,
Өмөттәр яралдылар.

*1970*

* * *

Был юлы һин диңгеҙ буйлап килдең,
Ҡомло буш яр ине алдында.
Шул ярға һин аяҡ баҫҡан һайын,
Ҡом әйләнә барҙы алтынға.

Аҡсарлаҡтар күкһел ҡанаттарын
Алтын томандарға мандылар.
Һин усыңа ҡабырсаҡтар алдың,
Улар ынйы булып яндылар.

Һин эйелеп һөйҙөң бик һаҡ ҡына
Тулҡындарҙың туҙғаҡ ялдарын.
Ҡағылыуың булды, бар дарьяны
Офоҡҡаса алтын ялманы.

Хатта ҡояш ул көн күктә түгел,
Алтын биҙәк ине – түшеңдә.
Донъяны мин шундай күрҙем бер ҡат
Әллә өндә, әллә төшөмдә.

Киткәндә һин урман аша киттең,
Алтын һуҡмаҡ – һинең эҙ ине.
Ағастарҙа алтын моңһоулығы –
Эйе, быныһы инде көҙ ине.

*1971*

* * *

Яҙғы гөрләүектәр гөрләп аҡкан
Иләҫ бер саҡ ине.
Йыһан аяҙ, йәш ғүмерем минең
Әле бик саф ине.
Һиңә килдем әйтермен тип ҙур һүҙ —
Сихри һөйөү һүҙен.
Ауыҙ асҡас өндәшәлмәй ҡалдым, —
Нисек кенә түҙҙем?
«Гөрләүектәр гөрләй», — тигән булдым,
Имеш, һалдым хәбәр.
Ҡысҡырып бер сәйер көлдөң дә һин
Ҡапыл тындың мәгәр...
Емеш бешкән ине, ботаҡтарын
Ергә эйеп-эйеп.
Донъя күргән, йөй-яралар йөрөткән
Инде мин ир-егет.
Һиңә килдем әйтермен тип ҙур һүҙ —
Яңы яҙмыш һүҙен.
Әйтмәй ҡалдым шул саҡ. Йәнә түҙҙем.
Ниңә генә түҙҙем?..
«Ҡыҙарып емеш беште, — тинем бары, —
Япраҡ араһында».
Өмөт ҡатыш еңел һағыш ине
Һинең ҡарашыңда...
Көҙгө ҡырау йәйҙе өтөп алды.
Япраҡ яуа бурап.
Ошо миҙгел минең ғүмерҙе лә
Үтмәгәндер урап.
Һиңә килдем әйтермен тип бер һүҙ —
Үкенесем һүҙен.
Ярай уны тешем менән ҡыҫтым,
Ярай әле түҙҙем.
Бышылданым бары: «Ағастарҙа
Ап-аҡ бәҫтәр, ана».
Баҡһам, һинең ике битең буйлап
Ап-аҡ йәштәр аға...

*1971*

* * *

Осраштыҡ беҙ ниңә һинең менән,
Ниңә үтә һуң?
Эй һин, ғүмер, ниңә бергә түгел,
Арабыҙҙан ғына үтәһең?

Айырылыштанбыҙҙыр, бәлки, иртә,
Бәлки, үтә иртә...
Орлоҡ ҡойған мәлдә ҡай саҡ гөлгә
Ел ҡағылып үтә.

Парлап төшкән ике орлоҡтоң береһен
Алып китә алыҫ.
Ел — уҙғынсы. Нимә уға һөйөү,
Нимә уға һағыш.

Ярай әле һине ташламаған
Үтә йыраҡҡа.
Сал башымды эйеп, рәхмәт әйтәм
Елгә, тупраҡҡа.

*1971*

* * *

*Сыңғыҙ Айытматовҡа*

Ғүмерем минең сәйер уйын булды,
Серле бер йәрәбә – тотоштан.
Алмаш-тилмәш килде таҡ менән йоп,
Отолоуҙар менән отоштар.

Юғалтыуҙар аңдып торҙо һәр саҡ
Урау юлдарҙағы табышты.
Мөхәббәт тә яңғыҙ йөрөмәне,
Гел эйәртеп алды һағышты.

Инсафланып бөттөм, тигәс кенә,
Йәнә килеп шайтан ҡоторттo.
Маҡтау күргән һайын, ғәмем артып,
Оторо мине хурлыҡ ҡурҡытты.

Минең йөрәк аша үтә, ахыры,
Көндәр менән төндәр ыҙаны.
Шатлығым йыш бәхет сигенә етте,
Тик ул сикте әле уҙманы.

Ғүмерем минең хәтәр уйын булды,
Серле бер йәрәбә – тотоштан.
Алмаш-тилмәш килде таҡ менән йоп,
Отолоуҙар менән отоштар.

...Уңыштарым егет итте мине,
Баҫынҡы ир итте табыштар.
Әммә мине шағир яһанылар
Юғалтыуҙар менән һағыштар.

*1971*

* * *

Ялтырап тормайым. Донъя
Таушалтты, шымартманы,
Шәүләм оҙоная. Әммә
Рухымда шом артманы.

Элеккесә балҡый, гүйә,
Хыялымдың таңдары.
(Тик йышыраҡ ҡабатлана
Хәтерләү аҡшамдары...)

— Хәйерле юл! — тимен елгә,
Һаман да бер ҡатлымын.
Тауға менһәм — ҡанатлымын,
Һыбай күрһәм — атлымын.

Күктә бер ҡошсоҡ һайраһа,
Бар йыһан хайран, тимен,
Ерҙә бер кеше йылмайһа,
Ер йөҙө байрам, тимен.

...Хәүеф юҡта хәүефләнәм,
Сик юҡ ерҙә — сикләнәм.
Күҙ йәштәренә ышанам,
Ә анттарҙан шикләнәм.

— Ҡорҙаш! — тимен ҡояшҡа мин,
Бигерәк бер ҡатлымын.
Һаман һаҡаллы сабыймын,
Һаман шул бер затлымын.

Бынан һуң да, иҫән булһам,
Ултырмаҫ инде аҡыл.
Һис ваҡытта белә алмам
Нәмәләрҙең «үҙ хаҡын».

*1971*

* * *

Кистән дауыл ҡупты. Ярға һуғылып,
Төнө буйы диңгеҙ үкһене.
Бөйөк даръя! Әллә һинең дә, тим,
Ғәмһеҙ, шат көндәрең үттеме?
Өҙгөләнмә, диңгеҙ, ғүмерең сикһеҙ,
Һин бит, йүләр, шундай йәш әле.
Ә мин иһә мәңгелектең бары
Бер тулҡыны булып йәшәйем.
Шулай ҙа мин тыныс. Борсолорға,
Бәлки, юҡтыр инде сәбәп тә...
Ни ғәжәп был? Ҡапыл, йән тетрәтеп,
Ғәрәсәтле, шомло сәғәттә
Илаһи моң килде... Ҡурай моңо
Дауыл түбәләрен артылды.
Нур һеңгеһе булып төндө тиште,
Ебәк таҫма булып тартылды.
Ҡурай иңрәй, ҡурай маҡтау йырлай:
«О Уралым минең, Уралым!..»
Ошо минутта мин ярһыу атта
Ун быуатҡа ҡайтып ураным.
Тамырҙарым буйлап моңдар аҡты,
Моңдар ташты, моңдар яндылар.
...Ергә һеңеп, бер саҡ мин тынырмын,
Диңгеҙ шаулар. Моңдар яңғырар.
Эй, һөйөклөм!
Шул саҡ баш осома
Ҡара мәрмәр ҡуйма. Һорайым:
Яҙ еткәс тә, йәп-йәш ҡурай ултырт,
Көмөш суҡлы Урал ҡурайын.
Көҙгә тиклем үҫер, моңдар йыйыр.
Бер таң уны шундай уйнатыр:
Ҡәберемдән һикереп сығырмын да
Мин китермен ғаләм буйлатып.
Миллиард йондоҙҙарҙың араһынан
Һин ҡабыҙған утты танырмын,
Ишегеңде килеп ҡағырмын...
...Диңгеҙ үкһей. Өҙгөләнмә, даръя!
Һинең менән беҙ бит йәш әле.
Тулҡынланып ғүмер раҫлайһың һин,
Ә мин иһә монда йәшәйем.

*1971*

* * *

Һин йоҡлайһың. Йоҡоң шундай тыныс
Иртә таңда.
Һулышыңдан дәрт орлоғо шыта
Минең ҡанда.

Нисәнсе ҡат һоҡланамын һиңә
Иртә таңда.
Нисәнсе ҡат йыр яҙамын һиңә
Иртә таңда.

Ҡайҙа ғына китеп, ни күрһәм дә
Инде алда.
Табынырмын бары һиңә генә
Иртә таңда,
Иртә таңда,
Иртә таңда...

*1972*

* * *

Ашҡынамын, һәр саҡ ашығамын,
Хәйерлегә түгел ашығыу.
Әллә саҡырамы икән Ҡара йылғам?
Әллә көтәме икән Машуғым?

*1972*

* * *

Ҡартая йөҙөм, ҡулдарым,
Ҡартая тауыш.
Ҡартаймай тик мөхәббәтем,
Ҡартаймай һағыш.
Һаман йәш һағыш.

*1972*

## ҮТКӘНДӘРГӘ САЛАУАТ!

Үткәндәремә үпкә юҡ.
Михнәттән күп рәхәте.
Дуҫтарым күп дошманымдан,
Ҡарғыштарҙан – рәхмәте.
Нужа килһә, уҙа торҙо,
Ултырманы һағалап, –
Бар нужамды ғәфү итәм.
Үткәндәргә салауат!
Әгәр секунд яра һалһа,
Йылдар китте дауалап.
Яраларҙы мин оноттом, –
Үткәндәргә салауат!
Бер яҙыҡҡа дусар булһам,
Йәнә ҡылдым йөҙ сауап.
Яҙыҡтарҙы ярлыҡағыҙ!
Үткәндәргә салауат...
...Телдән яҙғас, ҡул болғармын:
– «Үткәндәргә» ҡитәбеҙ беҙ.
Аңларһығыҙ самалап:
Ҡалғандарға салауат!
Киләсәккә сәләм әйт!

*1973*

## ДИҢГЕҘ ЗАРЫ

Ярһыу-яныуҙарҙы баҫмаммы тип,
Килеп баҫтым диңгеҙ ярына.
Даръя дулай. Ап-аҡ тулҡындары
Ҡара ташҡа бәрелеп ярыла.
Ярыла ла, етем көсөк һымаҡ,
Аяғыма килеп һарыла.

Диңгеҙ әйтә: «Донъя яралғас та
Дауыл миндә шашыу уятты.
Шунан бирле тулҡынланам, янам,
Арыным мин, йонсоном мин тамам.
Ә һин, кеше, шундай сабыр, тыныс.
Тыныс кеше! Мине йыуатсы...»

— Ни тип йыуатайым һуң, диңгеҙ, һине? —
(Һин дә, күрәм, зарһыҙ түгелһең.)
Сараһыҙҙан килеп һуғылырға
Һин, исмаһам, ярһыҙ түгелһең.
Миңә нисегерәк! —
Төбө лә юҡ,
Яры ла юҡ минең күңелдең...

*1973*

## ХӘБӘРҘӘР ЯҘ

Хәбәр көтәм илдән. Хәбәрҙәр яҙ.
Миҙгелендә ямғыр яуамы?
Һинең менән беҙ яндырған йәйғор,
Тауҙы ҡосоп, һаман янамы?
Сыйырсыҡтар ҡайтып йәм таптымы
Беҙҙең имәндәге оянан?
Юҡһа унда турғай көн итә, тип
Ҡай саҡ төнөн тертләп уянам.
Хәбәрҙәр яҙ. Ниндәй сая егет,
Көҙҙө көтмәй, туйҙа типтерҙе?
Кемдең уңған, йомарт килендәре
Халҡыбыҙға үрсем килтерҙе?
Барын да яҙ. Бәлә-ҡазаһын да,
Сырхау-сирҙәрен дә йәшермә.
Сир, бәләләр мәңгелеккә килмәй –
Мин бит шуны белер йәшемдә.
Барын да яҙ. Яҙған хәбәрҙәрең
Уттан алып, һыуға һалһындар...
Үлем-етемде тик яҙа күрмә,
Мин ҡайтҡансы тере ҡалһындар.

*1973*

## КӨҘГӨ ДИМ ЯРЫНДА

Көҙгө Дим өҫтөнә ҡарап торам.
Тымыҡ йылға аға, аға, аға...
Ваҡ тулҡындар, тере секундтарҙай,
Уҙа, ярҙы ҡаға, ҡаға, ҡаға.
Һыу йөҙөндә ҡояш. Һыу йөҙөндә
Йәм-йылмайыу —
шундай хозур, күркәм.
Гүйә, ғүмер баҡый шулай аҡҡан,
Үтер юлын гел йылмайып үткән.
Ҡар һыуҙары ярһығанда ла, ул
Хәтәр юлдар, гүйә, һайламаған,
Бер тауҙарға, бер ҡырҙарға ашып,
Ергә һыймаҫ булып ҡайнамаған.
Гүйә, әле лә өйрөлмәк тә юҡ,
Упҡын да юҡ уның төптәрендә...
Тик бәүелеп уҙа һары япраҡ
Сәпелдәшкән тулҡын өҫтәрендә.
Эскән һыуым, кискән һыуым — Димем!
Мин беләмен ҡатлы айышыңды —
Тышҡы ҡылығыңды әҙәм күрһә,
Тик ер тоя эске ағышыңды.
...Ғүмерем йылғаһына ҡарап торам —
Талғын ғына аға, аға, аға.
Тере секундтарҙы һанай-һанай,
Тере йөрәк ҡаға, ҡаға, ҡаға...
Һыу өҫтөндә йым-йым иткән бөҙөр —
Яра эҙе түгел, тулҡын бары.
Аға... Гүйә, уның донъя тигеҙ,
Әҙәп менән тулы ике яры...
Яҙмыш даръям! Һинең соңғолдарҙа
(Үҙем генә беләм) аҙмы хата,
Аҙмы шик-шомдарым,
Әрнеүҙәрем,
Аҙмы ғәйеп, үкенеүҙәр ята?!
Өй(ө)рөлә выждан ғазаптарым
Өйрөлмәктә, аҫта, төпкөлдәрҙә...
...Ирмен тиһәң, шунда тура ҡара,
Ҡара төндә,
ҡара аҡ көндәрҙә!

Өмөт, шатлыктарым төптә ятмай,
Сыға күҙгә, сыға төҫтәремә.
...Кояш та бит батмай,
йөҙөп бара
Көҙгө тымык Димдең өҫтәрендә.

*1973*

* * *

Шуны беләм: донъяға мин
Яратылдым ике тапҡыр.
Беренсе ҡат күтмәгәндә
Күҙгә таңда әсәм тапты.

«Үҙеңә баш хәҙер һин», — тип
Мине бер аҙ алданылар.
Кендегемде киҫтеләр ҙә
Ер шарына ялғанылар.

Икенсе ҡат оҙаҡ тыуҙым, —
Елдәр иҫте, һыуҙар аҡты —
Ир ҡорона кергән саҡта,
Мөхәббәтем мине тапты.

Гүйә, шул көн һауаларҙы
Өр-яңынан буянылар.
Донъялағы бөтә ҡылдар
Өр-яңы моң уйнанылар.

Әсәйемдең өгөттәре
Аҡылымды иҫән итте,
Мөхәббәттең фатихаһы
Йөрәгемде иҫәр итте.

Ғүмер буйы усаҡтағы
Ҡыҙған тимер ише булдым.
Тимер түгел. Яна-яна
Кеше һөйөп кеше булдым.

Иҫән аҡыл, иҫәр йөрәк.
(Башҡа миңә нимә кәрәк?)
Тура ҡатһам, бөгөлдөрҙө,
Бөгөлгәндә булды терәк.

Ике тыуҙым. Мең йәшәйем.
Рәхәт өсөн түләү хаҡтыр. —
Инде әҙермен тупраҡҡа ла
Әйләнергә ике тапҡыр —
Һеҙҙең өсөн,
Иҫәр йөрәк, иҫән аҡыл...

*1973*

## ҠАЙҺЫБЫҘ ИЛАҒЫРАҠ?

Һөйгәнемдән айырылдым,
Аралар хәҙер йыраҡ.
Юлға ҡарап илар инде,
Былай ҙа илағыраҡ.

Һөйгәнем янымда саҡта
Йәш инем, иләҫ инем,
Ел-ямғырына донъяның
Һис тә сер бирмәҫ инем.

Мөхәббәттән иҫерек инем.
Ҡайҙа вайым? Ҡайҙа ғәм?
Һиҙмәҫ инем,
ярты төндә
ҡап уртаға
Ярылһа ла бар ғаләм.

...Яңғыҙым хәҙер мин хатта
Ярты түгел,
түтәрәм,
Теҙҙән ергә бата-бата,
Һағыш йөгөн күтәрәм.

Уйҙар нескәртә күңелде,
Башҡа хәл — башҡа сама:
Күктә болот бүленһә лә,
Күҙемдән йәштәр тама.

Һөйгәнемдән айырылдым,
Аралар шундай йыраҡ...
Былай булғас, әйтегеҙсе,
Ҡайһыбыҙ илағыраҡ?

*1973*

* * *

О мөхәббәт! Күпме йыуаштарҙы
Батыр яһап солтан ир иттең.
Саҡматаштай ҡаты ҡатындарҙы
Балауыҙҙан былай иреттең.

О мөхәббәт! Күпме сәсән ирҙе
Мәжнүн яһап телһеҙ тилмерттең.
Телдән яҙған өнһөҙ ҡатындарға
Һандуғастай һайрар тел бирҙең.

О мөхәббәт! Аҙмы яҙмыштарҙы
Донъя тамуғында яндырҙың.
Аҙмы исемдәрҙе, күккә яҙып,
Мәңгелек йыр итеп ҡалдырҙың.

*1973*

* * *

Төнгө Рига. Төнгө тын баҡса.
Төнгө тымыҡ күлдең буйында
Пар-пар булып йоҡлай аҡҡоштар,
Муйындарын һалып муйынға.

Улар йоҡлай. Ҡоштар бәхетен
Өркөтмәҫме өндәр ҡағылып?
Ҡоштар бәхет сиккән сәғәттә
Уттар йотам һине һағынып...

*1973*

* * *

Тәбиғәттең байтаҡ серен беләм —
Ниҙән күктә болот ярала.
Ергә сумып, нисек шыта орлоҡ,
Ник ҡороҫҡа ҡорос ялғана,
Ниңә йырсы ҡоштар, илдән киткәс,
Моңдан яҙып ғүмер һөрәләр,
Һәм ни өсөн тик ғашиҡтар ғына
Күпә-көндөҙ йондоҙ күрәләр.
Шул арҡала мин тәбиғәт менән
Бергә илап, бергә көләшәм.
Бөтә белгән һөнәр, серҙәремде
Мин кешеләр менән бүлешәм.
Йәнә бер сер беләм. Бик оло сер:
Кешелектең ниҙә хикмәте —
Һис ҡасан да ниңә ҡоромаясаҡ
Әҙәм тоҡомоноң шишмәһе...
Серҙәр уртаҡлашам был хаҡта
Берәү менән генә.
Аулаҡта...

*1973*

* * *

Ас кешегә аҫыл таш һонғандай,
Матурлығың һинең, хөр һының.
Уға бары ябай шатлыҡ кәрәк, —
Уға икмәк кәрәк бер һыныҡ.

*1974*

## ИКЕ БӨРКӨТ

Әсә: Һауаларға ике бөркөт сөйҙөм —
Бер йәнемдең ике киҫәген.
Ҡайтырҙар тип көтә, көтә, көтә,
Оноттом мин йылдар иҫәбен.
Александр менән Миңлеғәли —
Бер йәнемдең ике киҫәге...

Хор: Кем һуң улар?
Изге исемдәре
Телдән төшмәй, китмәй күңелдән?
Кем һуң улар?
Дандарының таты
Халыҡ рәхмәтенән үрелгән!

Үлемдәре менән йәшәү раҫлай
Ике батыр үткән был ерҙән —
Дошман утын улар йөрәк ҡаны,
Йөрәк ҡаны менән һүндергән!

Батырҙарын Ватан үҙе менән
Мәңгелеккә алып барасаҡ.
Ике йондоҙ булып ил күгендә
Янасаҡ та улар янасаҡ.

*1975*

* * *

Һин тотаһың беләгемдән,
Инде тайҙым тигәндә;
Һин тыяһың күҙ йәшемде,
Инде тамды тигәндә.

Яндыраһың танһығымды,
Инде ҡанды тигәндә;
Терелтәһең йөрәгемде,
Көлгә ҡалды тигәндә.

*1975*

* * *

Эшләнмәгән эштәр ҡала,
Ҡалған эшкә ҡарҙар яуа.
Үтелмәгән юлдар ята,
Ул юлдарға тауҙар ауа.
Үткәндәргә ҡарҙар яуа,
Тыңланмаған йырҙар ҡала,
Йөрәктәргә ҡандар һауа.

*1975*

* * *

Беҙ өсәү был таңда —
Һин, йыһан, мин.
Юҡ нәмә юҡ бында: зыр әйләнә
Планеталар. Бал ҡорттары оса,
Тауҙар күкрәй, күктәр семәрләнә.

Юҡ нәмә юҡ бында: баш ҡалҡыта
Алсаҡ, сабый үлән ҡыяҡтары,
Ҡош Юлынан сапҡан боландарҙың
Осҡон сәсә көмөш тояҡтары.

Беҙ өсәүбеҙ был мәл —
Һин, йыһан, мин.
Ваҡыт тынһын, ҡаҡма күҙ керпегең.
Ҡаға күрмә. Әле таммай торһон
Керпек осондағы йәш бөртөгөм —
Минең йәш бөртөгөм...

Һин хайранһың —
Йыһан һыйған һинең ҡарашыңа.
Ә мин һоҡланамын бары һиңә —
Замананың бер ҡыҙ балаһына.

*1977*

## АШЫҠМА КИЛЕРГӘ, ҠАРТЛЫҒЫМ

Уртлам һыуым әле йотолмаған,
Атҡан уғым сәпкә етмәгән дә,
Сәтләүегем әле сәскә атмаған,
Кәкүк оя ҡороп бөтмәгән дә...

Ашыҡмай тор, ҡартлыҡ. Ҡабаланма.
Бер мөхәббәт йыры йырлайһым бар,
Һағыш рәхәтенә сыҙай алмай,
Ерҙә аунап әле илайһым бар.

Ашыҡмай тор, ҡартлыҡ. Ҡабаланма.
Түр башымда йомшаҡ түшәгем юҡ,
Алдарыңа ҡуйыр өсөн әле
Шәрбәт тулы алтын көршәгем юҡ.

Әгәр килә ҡалһаң, үкенерһең.
Минең әле малай булаһым бар,
Аҡылыма йөрәк баш бирмәйсә,
Тәүбә итерлек эштәр ҡылаһым бар.
Ашыҡмауың хәйерлерәк, ҡартлыҡ...

*1977*

## КИС КИЛӘ

Юлға иртә сыҡтым. Эңерҙән үк
Сулпан нуры төштө һуҡмағыма.
Юлым уңды. «Иртә юл уңыр», тип
Әйтмәгәндәр икән юҡҡа ғына.

Юл башымда дүрт яҡ ҡибла ине.
Ҡояш сыҡты ерҙең дүрт яғынан.
Күҙ теймәһен! Алдан йүгереп китте
Шау ялтырап торған өр-яңы дан.

Бара торғас, белдем: донъя үҙәге
Түгел икән ҡибла тарафында.
Көнсығыш бар, йәнә көнбайыш бар —
Ҡалған яҡтар шулар араһында.

Барған һайын, дандың бәҫе китте,
Уҡалары ҡойолоп, тоноҡланды.
Мин атлайым бер көй. Ул, өшәнеп,
Саҡ эйәрер хәлгә тороп ҡалды.

Урау юлдар аҙаштырмай икән
Иртә таңдан сыҡҡан ғәмле ирҙе.
Юлым уңды. Мин үҙемде таптым.
Һөйгән йәрем, яҙмыш һине бирҙе.

Хәҙер бына тыныс ҡарап торам
Көн ғүмере кискә ауышҡанын.
Яҡты менән йылы айырылышып,
Шәүлә менән шәүлә ҡауышҡанын.

Ҡояш бата. Тупраҡ ҡуйынына
Йым-йым итеп көн йылыһы һеңә,
Әйтерһең дә, төнгө бер миҙгелдә,
Һил сәғәттә мин һыйынам һиңә.

Бер пар аҡ күбәләк (беҙ түгелме?)
Туй сәйәхәтенән ҡайтып килә.
Бөтә ғүмерҙәре, шул туй булып,
Көн эсендә уҙҙы илай-көлә.

Иртән осор бүтән күбәләктәр...
Мин баҫырмын тағы һуҡмағыма.
Ә шулай ҙа, бынау кискә ҡарап,
Уйланыуым түгел юҡҡа ғына...

*1977*

* * *

Бөгөн төн мин һинең янда ҡалам,
Өҙөп сәфәремде.
Ҡулым менән һыпырам йөрәгемдән
Бөтә хәстәремде.

Артыҡ йылдарымды ҡапҡа артында
Ҡалдырып уҡ индем.
Мин ғәмһеҙмен, йәшмен, йүгәнһеҙмен,
Мин әле лә – минмен!

Һиндә ҡалам. Ял итһендәр юлдар
Минең табандарҙан,
Йондоҙҙар ял итһен ҡарашымдан.
Күпме замандарҙан
Тынғылыҡ юҡ дала тынлығына
Минең тауышымдан.
Тынлыҡ та ял итһен. Шул мәл беҙҙең
Йәндәр ҡауышырҙар...

Йоҡлаһын ел, аҡыл, диңгеҙ, ҡурҡыу –
Шымһын бар донъяһы.
Тик мөхәббәт кенә, бер ул ғына
Бөгөн күҙ йоммаһын.

*1977*

* * *

Мөхәббәтем һәләк булыр тип гел ҡурҡам.
Һәр ваҡыт ул һуғыш ҡырында.
Мәкер, хыянаттың күпме тубы
Уға атыр өсөн ҡоролған.

Яла мылтыҡтары тәте тартҡан,
Ғәйбәт обрездары тоҫҡалған.
Көнсөлләктөң утлы һөңгөләре
Уны сәнсеү өсөн осланған.

Баш өҫтөндә киҙәнеүле тора
Ғәйепләүҙең «ғәҙел» суҡмары.
Йөрәгенә килеп бәреләгел
Шик-шомдарҙың тупаҡ уҡтары.

Йәрәхәттәр ала. Ҡандар тама.
Йәрәхәте йөйһөҙ уңала.
...Сая мөхәббәтем яу ҡырында.
Бәлки, иҫәндер ул шуға ла...

*1977*

* * *

Быйылғы көҙ шундай сыуаҡ килде.
Ерҙең өҫтө – йәшел бер тамаша.
Гөлйемештәр ҡабат сәскә атты.
Сәскәһенә ҡарап, күҙ ҡамаша.

Эй һоҡландыҡ, шашып, хайран ҡалдыҡ
Тәбиғәттең сикһеҙ ҡөҙрәтенә.
Мин, дәртләнеп, хатта бер йыр яҙҙым
Көҙөн атҡан сәскә хөрмәтенә.

...Ошо көҙҙә сал ир ғашиҡ булды.
Үҙе бойоҡ, үҙе ҡыуана.
Беҙ ғәйепләп көлдөк – аҡыллылар.
Йәлләп иланы тик диуана.

*1977*

* * *

Эй, мөхәббәт! Тилерткес бер яҙҙа,
Һандуғаслы яҙҙа
Сағылда
Исемеңде аҡ ҡайынға сыйҙым
Әле малай ғына сағымда.

Зәһәр ҡышта, ҡулыма ҡуҙ алып,
Боҙға яҙҙым — түгел заяға.
Елдәр менән яҙҙым диңгеҙҙәргә,
Йәшен менән яҙҙым һауаға.

Ғүмер буйы аҡ ҡағыҙға яҙам
Йә әрнеүле, йә шат мәлдәрҙә.
Яҙырҙарға миңә яҙмаһын тик
Исемеңде ҡара мәрмәргә...

*1977*

## 9 МАЙ

Боронғо Персияла үтескә
алыу хурлыҡ иҫәпләнгән.

*Геродот буйынса*

Тыуған илем! Һауаларға ашҡан
Шөһрәтеңдең хаҡлы байраҡтары.
Ер шарының ике яртыһында
Салютыңдың балҡый шаңдаҡтары.
Шундай саҡта мин йә сүгеп төшәм,
Йә күктәргә тейә түбәләрем.
Бер ҡараһаң, үҙем балҡыш, имеш,
Бер ҡараһаң, бары күләгәмен.
Ни булһам да, рәхимеңә рәхмәт,
Миңә ышандың ҡара көндәреңдә.
Башҡайыңа төшкән бәләләрҙән
Өлөш һалдың минең иңдәремә.
Мин яраҡлы булдым сыҙамыңа,
Ҡатҡан һыныҡ, татыр һыуҙарыңа.
Һәм яраҡлы булды минең ҡаным
Һинең тупрағыңды һуғарырға.
Еңеүеңә мин яраҡлы булдым.
Хайран шәмдәр һиндә ҡабынғанда,
Байрамыңа мин яраҡлы булдым —
Ситкә тибәрмәнең табындарҙа.
Рәхмәт, илем! Бирһәң, үлсәп бирҙең,
Ҡылғаныма хаҡты таманланың.
Маҡтар булһаң, хаттин ашырманың,
Сама менән генә яманланың.
Кәмһетмәнең һин, үтескә биреп
Икмәк, тоҙ, һыу, бүләк, дәрәжәләр.
Бик бәхетһеҙ иткән булыр инең,
Һин бурысҡа бәхет бирһәң әгәр...

*1977*

* * *

Күгем тәпәш, офоҡ яҡын,
Йыһан сигем тар ине.
Ямғыры тик ямғыр ғына,
Ҡары иһә — ҡар ине.

Ҡараһы гел ҡара ғына,
Ағы бары аҡ ине.
Ялғанлыҡ гел ялған ине,
Хәҡиҡәт гел хаҡ ине.

Алтыны — саф алтын ғына,
Балсыҡ — тик балсыҡ ине.
Күҙ күргәнде күңел таный —
Бар нәмә асыҡ ине.

Киңәйгән һайын алдымда
Йыһанымдың сиктәре,
Ниңәлер арта шомдарым,
Ишәйәләр шиктәрем.

Ҡарына ямғыр ҡушыла,
Ағы түгел аҡ ҡына.
Хәҡиҡәттең алтынында
Балсыҡ та бар саҡ ҡына.

Инде уйсанырак бағам
Дарьялар ағышына.
...Бәлки, төшөнә киләмдер
Донъялар айышына.

*1977*

* * *

Бүлеүсе йәннәткә инмәç.
Яҙыҡлы, хәтәр был эш.
Ни тырышмаһын, һәр кемгә
Тип-тигеҙ теймәй өлөш.
Берәүҙең нәфсе ҙурыраҡ,
Берәүҙең эше оло.
Берәү ҡомһоҙлоҡ хакимы,
Берәүһе намыç ҡоло.
Бынауһының күҙе туймай,
Тегеһе үҙе туймай.
Ә бисара һәр саҡ көтөр,
Ни бирһәң, шуға шөкөр.
Бүлеүсе ожмахҡа инмәй.
Яҙыҡлы, хәтәр был эш.
Һәр кем уйлай: «Миңә генә
Ғәҙел сыҡманы өлөш...»
Өлөшсө булдым ғүмере.
Көс килтерҙем һиммәткә.
...Бер йәнемде меңгә бүлдем —
Индермәçтәр йәннәткә.
Инмәһәм тағы...

*1977*

* * *

Ғашиҡтар, һеҙгә өндәшәм –
Юҡ-барға йән ҡыйнашмағыҙ.
Боҙолошоу – сирек әжәл,
Әжәл менән һынашмағыҙ.

Араларға ышанмағыҙ,
Ваҡыттарға таянмағыҙ.
Айырылышыу – ярты әжәл,
Әжәл менән шаярмағыҙ.

Ә шулай ҙа, һөйөү барҙа,
Төҙәлмәҫтәй яралар юҡ,
Һөйөү һүнһә, кеше үлә.
Әжәлдәрҙән саралар юҡ.

*1977*

## МИҘГЕЛДӘР

Һөйөү йыры яҙҙан башланһа ла,
Йыл ғүмере ҡыштан ярала бит.
Йыл бишектә йоҡлай. Шул миҙгелдә
Иң матур өн төштән ярала бит.
Ер йөҙөнөң аҡлығына ҡарап
Ултыр ҙа бер ила сараһыҙҙан.
Бында гонаһ та саф. Шул сафлыҡтың
Бөтәһе лә, тимен, ҡатын-ҡыҙҙан.
Ҡатын-ҡыҙҙан...

Ағып үтте иҫәр ҡар һыуҙары.
Ағастарҙың иләҫ һуты тиртә.
(Тәбиғәттең иң һиммәтле сағы!) —
Тупраҡ ҡарынында орлоҡ бүртә.
Офоҡтарҙан офоҡтарға тиклем
Моңдан юлдар һыҙып, ҡоштар уҙған.
Был йыһандан ярһып яңырыуы,
Моғайын да, тимен, ҡатын-ҡыҙҙан.
Ҡатын-ҡыҙҙан...

Ил өҫтөнән уҙҙы туҡ болоттар,
Сабыр өмөт тулыша башаҡтарҙа.
Алма алһыулана. Гүйә, ерҙе
Татлы тулғаҡ тота шул саҡтарҙа.
Сик-сама юҡ икән игелеккә —
Балдар тама төнөн ай-йондоҙҙан.
Был донъяла күпме бәрәкәт бар —
Бөтәһе лә, тимен, ҡатын-ҡыҙҙан.
Ҡатын-ҡыҙҙан...

Үтә күренә һыуҙар, елдәр, йылдар.
Мең төрлө төҫ балҡый һары төҫтән.
Зиһен етмәҫ ниндәй мөғжизә был? —
Күк төбөнә ана ысыҡ төшкән.
Әүәлгесә инде ҡыҫыр көйөк
Ыҙаламай йәнде — дауаһыҙҙан.
Күңел күҙе көҙ асыла икән,
Быныһы ла, тимен, ҡатын-ҡыҙҙан.
Ҡатын-ҡыҙҙан...

*1977*

* * *

Намыҫ менән беҙҙең ара сәйер.
Миңә рәхәт, ә ул хафалы.
Мин яфалар сигәм, ғазапланам,
Ә ул тыныс. Хаҡты-хатаны
Һәр беребеҙ үҙенсәрәк һанай,
Мин йоп тиһәм, унда таҡ сыға,
Минең бизмән артығыраҡ тартһа,
Уның үлсәү теүәл, хаҡ сыға.
Мин инсафлы, кеселекле булһам,
Намыҫымдың башы юғары.
Мин маһайып, һауаланып китһәм,
Ул бөтөнләй ҡала юғалып.
Ара боҙолғанда мин шараптан
Үтес шатлыҡ алып, ҡыуанам,
Йә башымды танһыҡ һөйгән йәрҙең
Беләгенә һалып йыуанам.
Ә, ихтимал, килер шундай бер көн:
Йәрем ташлар, бокал ватылыр.
Намыҫ менән күҙгә-күҙ ҡалырбыҙ.
Бына ул саҡ ниҙәр татылыр?!

*1977*

* * *

Истамбулда киске аҙан
Шундай моңһоу саҡыра:
— Мосолмандар, ғибәҙәткә —
Бер Тәңребеҙ хаҡына!..

Мин — уҙғынсы. Мин сит бында.
Миңә түгел был аҙан.
Мөхәббәтем илһам бирһә,
Үҙем доғалар яҙам.

Асылы ят күңелемә
Күктән килгән әмерҙең.
Мин әйтәм үҙ аҙанымды:
— Хәйерле төн, ҡәҙерлем!..

*1977*

* * *

Яҙылмаған, һыҙылмаған
Мөхәббәт ҡануңдары.
Шатлыҡ килтерә әрнеүҙәр,
Туңдыра яныуҙары.

Ҡараңғы яһай көндәрҙе,
Төндәрҙе яҡты итә.
Яртыларҙы бергә ҡуша,
Бөтөндө ярты итә.

Ваҡытҡа ҡояш баш түгел,
Уға мөхәббәт хужа.
Айы йылдарға тартыла,
Көнө сәғәттә уҙа.

Шағир әйткән: «Уның өсөн
Оло ла, кесе лә юҡ...»
Ә ғәмәлдә ни етте лә
Бик улай эше лә юҡ.

*1977*

* * *

Имеш, һине Хоҙай яратҡан, ти,
Салыш ҡабырғанан.
(Әйтерһең дә, уға шунан ҡулай
Нәмә табылмаған...)

Дөрөҫ түгел! Һине мин яраттым
Уттан, һыуҙан, нурҙан,
Бөтмәҫ хыял, һүнмәҫ өмөттәрҙән
Һәм бер моңло йырҙан.

Ғазап ҡуштым, йәнә шик өҫтәнем —
Әскелтем тәм һалдым,
Шатлыҡтарҙың ҡәҙерен белеү өсөн
Аҙ ғына ғәм һалдым.

Айҙар... Йылдар... Ғүмер буйы шулай
Һине бар ҡыламын.
Һының, рухың камиллашҡан һайын,
Һинән тартынамын.

Күҙҙәреңдең тылсымынан ҡаушап,
Хатта зар буламын.
Ә шулай ҙа, һине ижад итеп,
Үҙем бар буламын.

*1977*

* * *

Донъяның йөҙө күренмәй —
Донъяға томан төштө.
Иртә томан, кис тә томан —
Мәңге таралмаҫ төҫлө...
Төшкән томан күтәрелде.
Булған да кеүек түгел.
Аяҙыуыңды сабыр көт,
Эй, күңел!
Күңел...

*1977*

* * *

Кешеләр төнгә уҙалар
Парлап йә берәм-берәм.
Кемдер сыға яңғыҙлыҡтан,
Мин яңғыҙлыҡҡа керәм.

Меңдән берәү инем көндөҙ,
Хәҙер инде башҡамын:
Яңғыҙлыҡ тигән буш илдә —
Мин бер бойоҡ батшамын.
Минең сикһеҙ биләмәмдә
Дауыл да юҡ, һил дә юҡ.
Унда бушлыҡ. Унда һин юҡ.
Һин булмағас, мин дә юҡ.

Төн үҙәге һынды. Ваҡыт
Таңға ауышыр бына.
Был мәл уяу бик бәхетле,
Бик һағышлылар ғына.
Бәхетлеләр — хәтерһеҙҙәр —
Иҫкә алмаҫтар беҙҙе.
Һағышлылар! Бер мин генә
Аңлайым хәлегеҙҙе...

*1977*

## ҺОРО ТУРҒАЙ

Быйылғы ҡыш үтә зәһәр булды,
Зәңгәрләнеп туңды күктәре.
Ҡыш яфаһын анау һоро турғай
Беҙҙең менән бергә күтәрҙе.
Нисә тапҡыр, туңып, ергә ауҙы,
Хәл эсендә булды хәлдәре.
Нисә сығып, нисә керҙе йәне...
Һоро турғай! Ҡоштоң хәтәре...
Беҙҙән былай зарығып яҙҙы көттө,
Көтә белгәс, бына килтерҙе.
Ун дүртенсе мартта төш еткәндә,
Тәү тамсыны татып, иҫерҙе.
Иҫерҙе лә йырлап ебәрҙе был,
Осоп ҡунғас тәҙрә һырына.
Эй йырлай ҙа! Ләкин бисараның
Ҡолаҡ һалыусы юҡ йырына.
Ә бер аҙҙан йылы елдәр иҫте,
Яландарҙы ҡарҙан ҡотҡарып.
...Әҙер яҙға килгән сыйырсыҡты,
Кәпәс сөйөп, шул саҡ ҡотланыҡ.

*1977*

* * *

Өс мөғжизә мине әсир алды —
Ер,
  йәнә күк,
          йәнә ҡатын кеше.

Өс сер мине уйға, шомға һалды —
Ер,
  йәнә күк,
          йәнә ҡатын кеше.

Ерҙең сере бөтә. Күк һайыға.
Төбө күренер бына асылыр ҙа.
Ҡатын кеше генә
Асылмаç сер,
Тылсым булып ҡалыр асылында.

*1977*

* * *

Бурай ҙа ғына бурай ҡарҙар яуа,
Бойоҡмаймы болан балаһы?

*Халыҡ йыры*

Өй(ө)рөлә ап-аҡ өйөрмәләр...
Хушлашабыҙ. Тағы ҡалаһың.
Күҙ алдыма килде шул күшеккән
Япа-яңғыҙ болан балаһы.
Аҡ буранға инеп юғалырмын.
Ҡул болғама, барыбер күренмәҫ.
Дауыл барҙа әле сыҙарһың да,
Ни ҡылырһың, ул да һүрелгәс?!
Гел аҡ ҡына төҫ тә хафа һалыр.
(Аҡ урмандар, ҡырҙар, түбәләр.)
Туй күлдәген генә түгел, бында
Кәфенде лә аҡтан тегәләр.
Ғүмер уҙған һайын, китә бара,
Бөтә бара күңел тынғыһы.
Һәр күрешеү, — гүйә, тәү күрешеү,
Һәр айырылышыу, — гүйә, һуңғыһы.

Өй(ө)рөлә ап-аҡ өйөрмәләр...
Хушлашабыҙ. Тағы ҡалаһың.
Һаҡла, яҙмыш,
Аҙаштыра күрмә
Шул күшеккән болан балаһын...

*1977*

* * *

— Һөйөү нимә? — тинем ир кешегә.
— Ҡатын өсөн тамуҡтарҙы үтеү.
— Һөйөү нимә? — тинем мин ҡатынға.
— Ғаләмдәрҙә янып көлгә ҡалған ирҙе күтәрү.

*1977*

* * *

Һин киттең. Мин янып ҡалдым.
Күләгәңә бер ҡара.
Мин янамын. Шуға һинең
Күләгәң алдан бара.

*1978*

* * *

Проклятый корабль пассажирский...

*Р. Киплинг*

Киске ҡыҙғылт ағын һыу өҫтөндә
Йөҙөп барам күндәм кәмәлә.
Бәхет хаҡында юҡ ҙур хыялым,
Ваҡ ғәмем юҡ фани нәмәлә.

Тәбиғәттәй, мин нәфсеһеҙ, азат,
Һыуҙай ағам теләһәм ни яҡҡа,
Әйтерһең дә, киске тынлыҡ менән
Йәнем керҙе бөгөн никахҡа...

Ҡапыл боролоштан аҡ пароход,
Ярһып-ярһып, күкрәк ки(е)реп,
Хатта тауыш бирмәй килеп сыҡты,
Бар донъяла бер ул, тиерһең.

Ажғыр тулҡын ҡороғона урап,
Кәмәм-нием менән ҡапланы,
Аҡ пароход китте. Күңел өсөн
Әйләнеп тә миңә баҡманы.

Тәкәбберлек! Һинән башҡа ла бар
Был донъяла байтаҡ нәмәләр —
Ерҙә йөрөй әле йәйәүлеләр,
Һыуҙа йөҙә әле кәмәләр.

*1978*

## МОҢҺОУ ЙЫР

Янып һүндең. Шунан белдем:
Көлдәр яуҙы сәсемә.
Сәстәремә көлдәр яуҙы,
Тоҙ өҫтәлде йәшемә.

Йәштәремә тоҙ өҫтәлде,
Күңелдәрем тулы моң.
Моңдарымды, зарҙарымды
Кемдәргә һөйләрмен һуң?

Кемгә һөйләрмен? Серҙәрем
Һаман бата эскәрәк.
Хатта яңғыҙлығыңды ла
Һөйләргә кеше кәрәк...

*1978*

* * *

Зәңгәр күктә ап-аҡ бураҙналар
Күкте һөрөп, ағыу сәсәләр...
Былай барһа, ниндәй яҙмыш өсөн
Бала табырһығыҙ, әсәләр?

*1978*

## ЯЛБАРЫУ ЙЫРЫ

Мөхәббәтем! Мине ташлама.
Көн бит әле яңы башлана.

Таң ҡуйынынан сыҡҡан алсаҡ иртә
Ысыҡ менән әле бит йыуа.
Күл өҫтөндә уйһыҙ тулҡындарҙы
Бишегенән төшкән ел ҡыуа.

Тәү өндәште кәкүк. Ергә яуған
Сәскә микән, әллә ҡар микән?
Ҡарт таш ҡына тыныс. Эскәйендә
Дәрттәр микән, әллә зар микән?
Ошо хозур сәғәттәрҙә уның
Хәлдәренә кергән бар микән?

Ташлап китмә мине. Ташлама.
Ғүмер әле яңы башлана.

Өмөттөң тик тәү саҡрымын үттек.
Күрәһе лә әле күрәһе —
Михнәт ҡара урманы әле алда,
Әле алыҫ бәхет түбәһе.

Мин бит астым яңы бер планета,
Яңы океан астым — хайранға!
Йәғни һине мин үҙемдә таптым
Был донъянан уҙып барғанда...

Үкенескә булыр, ташлама.
Һин ташлаһаң, ҡартлыҡ эләктерер,
Эләктерһә, бирмәҫ башҡаға.
Мөхәббәтем! Мине ташлама.
Донъя әле яңы башлана.

*1978*

## РӘХМӘТ ЙЫРЫ

Был айлы төн аҡыл ярһытырлыҡ,
Сихырының юҡ сиге, иҫәбе.
Нур төштө лә ысын алмас итте
Юлда ятҡан быяла киҫәген.

Юлда инем. Гүйә, елдәр алды
Бөтә шомдо, бөтә яфаны —
Нурың төштө, йәрем, яҙмышыма.
Баҡыр инем. Көмөш яһаның.

*1978*

## УСАҠ ЙЫРЫ

Зая үткәндә, түлһеҙ хыялдарҙы
«Төтөн» тибеҙ, тимәк, буш, тибеҙ.
Көҙгө урманда бына усаҡ яҡтым,
Усағыма рәхим итегеҙ.

Тартынмағыҙ. Йылыһын да бирәм,
Яҡтыһын да бирәм ҡуш ҡуллап.
Тик тыңлағыҙ — ҡалай йырлай ялҡын,
Ҡалай илай төтөн, һулҡылдап.

Ғүмер баҡый ут эсендә булдым —
(Бүләкме был әллә язамы?)
...Күрҙем, ялҡын — яныу ҡыуанысы.
Белдем, төтөн — яныу ғазабы.

*1978*

## «Яҙмыштарҙан уҙмыш бар» спектакленә яҙылған йырҙар

### ҠУЛҺЫҘ НАСИП ЙЫРЫ

Мандолина алыр инем ҡулдарыма,
Ярһып-ярһып сиртер инем ҡылдарына.
Ҡылдары бар — сиртер инем, ҡулдарым юҡ,
Йырлар инем — һағышым бар, моңдарым юҡ.

Мандолина, мандолинам!
Йәшлекте саҡыр.
Беҙ үткән юлдарҙан урап
Бәлки, ул ҡайтыр.
Һиҙә күңел:
Мөмкин түгел
Аҙашыуы беҙҙең йәшлектең.

Ҡулдарым юҡ. Күңелемдә ҡанатым бар.
Ярһый-ярһый шул ҡанатты ҡағаһым бар.
Ҡауырһыны сиртер көмөш ҡылдарына,
Мандолина юлдаш булыр йылдарыма.

Мандолина, мандолинам!
Йәшлекте саҡыр.
Беҙ үткән юлдарҙан урап
Бәлки, ул ҡайтыр.
Һиҙә күңел:
Мөмкин түгел
Аҙашыуы беҙҙең йәшлектең.

### ҺЫУ ЮЛЫ

Борма-борма һыу юлдары
Боролоп бара инешкә.
Быйыл беҙгә килен түгел,
Күктән төштө фәрештә.

Һыу юлынан килен ҡайта,
Көйәнтәһе алмалы.
Алмалы көйәнтәһенә
Ҡунмаған ҡош ҡалманы.

Күлдә йөҙгән аҡкошмо ни —
Килене лә килене! —
Аҡыллыны иҫәр итер,
Иҫән итер тилене.

Борма-борма һыу юлдары
Боролоп бара инешкә.
Быйыл беҙгә килен түгел,
Күктән төштө фәрештә.

## МӘРӘҺИМ ЙЫРЫ

Йөрәктәр ҡушылды,
Ә юлдар айырылды.
Уртаға ярылды тормоштар.
Яртышар-яртышар
Ҡалдыҡ беҙ. Нишләрбеҙ,
Яҙмыштан булмаһа уҙмыштар?

Һөйгәнем яттарҙа.
Моңһоу таң атҡанда,
Өҙөлә йәндәрем, өҙөлә.
Хәсрәтем юғала,
Шатлығым юл ала,
Бер генә ҡараһам йөҙөнә.

Дөм-ҡара төндәрҙә
Йондоҙҙар һүнгәндә,
Йөрәкте сaҡмалай сағырмын.
Менермен үрҙәргә,
Төшөрмөн гүрҙәргә,
Яҙмыштан уҙмыштар табырмын.

## СӘҢГЕЛДӘК ЙЫРЫ

Әлли-бәлли-бәлли-бәү...
Көллө донъя тирбәлә.
Һөрән һалып ир тыуҙы
Донъя тигән тирмәлә.

Әлли-бәлли-бәлли-бәү...
Ебәк бәллеү тирбәлә.
Ҡояш балҡый түбәлә,
Ай әйләнә тирәлә.

Әлли-бәлли-бәлли-бәү...
Унда бала тирбәлә.
Кил, именлек, кил, бәхет!
Кит, яуызлыҡ, кит, бәлә!

Әлли-бәлли бәүелеп
Үтһен, китһен һантый саҡ.
Ғүмер баҡый һүнмәһен
Күңел нуры – сабый саҡ.
Әлли-бәлли-бәлли-бәү...

Әлли-бәлли-бәлли-бәү...
Көллө донъя тирбәлә.
Һөрән һалып ир тыуҙы
Донъя тигән тирмәлә.
Әлли-бәлли-бәлли-бәү...

*1978*

* * *

Һуғыш яраларым сир килтерҙе...
Сирем, ахыры, түгел китәсәк.
Күңел һиҙә, алдағы йыл миңә
Инде әжәл вәғәҙә итәсәк.

Алдағы йыл килде. Тыумыштан уҡ
Үҙе, бахыр, сирҙән сыҡманы.
Башта уны, бөртөк ҡар күрһәтмәй,
Ҡара биҙгәк өс ай туҡманы.

Ә унан һуң, тамсы татытмайса,
Быуып алды ҡара ҡоролоҡ.
Ағас япраҡ ярҙы һары көйөп,
Үлән сыҡты ҡара ҡурылып.

«Яҙ» тип кеше ергә орлоҡ сәсте,
Ҡош йомортҡа һалды. Ни сыҡты?
Орлоҡтар таш булды. Ҡош тоҡомо
Йомортҡала көйө тонсоҡто.

Өмөт бөткәс, инде юҡҡа сыҡҡас
Тәбиғәттә бөтә ҡанундар,
Ҡара болот килеп аҫылынды,
Өҫкә яуҙы ҡара яуындар.

Эй яуҙы ла! Өс ай буйы яуҙы.
Ҡуйыраҡ һыуға батты ғаләме.
Йыл тиклем йыл хәҙер хәл эсендә...
(Минең бәләм инде бәләме?)

Яуын уҙҙы. Бер көн талғын ғына
Ергә төштө ап-аҡ тамаша.
Һуңғы юлға йылды оҙаттым мин
Ап-аҡ ялан аша... Тау аша...

...Мәңгелекте ваҡлап ултырыусы
Утыҙынсы ҡышты алмаша
Утыҙынсы яҙға. Тамсы тама.
Мин һаман да тере.
Тамаша...

*1979*

* * *

Был донъяның һәр төбәге
Хәтирәле,
Исән сакта хәтирәләр
Хәтәр әле.

*1979*

* * *

Һауаларҙа, бейектәрҙә
Кейек ҡаҙ тауыштары.
Шатлыҡ менән тулды бөгөн
Күңелем һауыттары.

Көтмәгәнде килтерер тип,
Яҙҙы көтмәгән инем.
Былай уҡ ҡабынырмын тип,
Өмөт итмәгән инем.

Нимә булды? Сайпылам бит
Яҙа баҫһам аҙ ғына.
Яңы бәхет килдеме? Юҡ,
Бары килде яҙ ғына...

*1979*

* * *

Ап-аҡ урман аша килдең миңә —
Ағастарҙа яҙғы бәҫ ине,
Елдәр әле тыумаған да ине,
Ҡояш әле шундай йәш ине.
Ҡыуаныстан һауаларға баҡтым,
Ҡатып ҡалдым ҡапыл аптырап:
Күк йөҙөндә, тоноҡ ҡына тоноп,
Төн онотоп киткән ай тора.
Һорау бирәм:
Мин кем — бөгөнгөмө
Әллә кисәгеме,
Ҡайһыһы?
Көн башлаусы ҡояшмы һин? Әллә
Төндән тороп ҡалған аймы һин?

*1979*

* * *

Таң һарғайыу түгел, ҡояш сыҡһын,
Танһыҡтарым ҡанмай ҡайтмайым...

*Егеттең ҡыҙға әйткән йырынан*

Янамағыҙ миңә һеҙ, бәләләр,
Өркөтмәгеҙ мине, нужалар,
Аңдымағыҙ, сирҙәр. Минең өсөн
Көндәр түгел, шомдар уҙалар.

Ялаларҙан ҡур(ы)ҡмайым хәҙер,
Һелтәмә лә, мәкер, ҡамсыңды.
Файҙа сыҡмаç, тамыҙма ла, шөһрәт,
Аҡылыма татлы тамсыңды.

Яҙмыш ҡушһа, яланғас ҡул менән
Янған усаҡтарҙан ҡуҙ алам.
Көтмә, әжәл! Танһыҡтарым ҡанмай
Был донъянан барыбер ҡуҙғалмам.

*1979*

## ПРОМЕТЕЙ МОНОЛОГТАРЫ

### Оран

Хыял булып тыуҙым. Заман үткәс,
Әйләнермен бары хәтергә.
Тик өлгөрһәм ине шул арала
«Айны!» тигән бер һүҙ әйтергә.
Айны, кеше, ғәмһеҙ был йоҡонан!
(Көн яҡтырыр һин күҙ асыуҙан.)
Һәм өнөңдә һаташыуҙан айны,
Аҙашыуҙан айны, шашыуҙан.
Мин үтермен. Исемем телдән төшөр.
Бәлки, ҡалыр ошо ораным.
Үҙ-үҙемдән һораманым: «Һин кем?»
«Һин ни өсөнһөң?» — тип һораным.

### Мөхәббәт сәғәте

Оялыуҙан ғаләм шыр яланғас:
Сере лә юҡ уның, шомо ла.
Ҡосағымда минең — Агазия,
Ике күҙе иҙрәп йомола.
Быуат уҙа, тағы мең йыл уҙа,
Беҙ бер һулыш алған арала.
Нәҡ ошондай мәлдә ерҙә — кеше,
Күктә планеталар ярала.

### Бошонғанда

Туҡталайыҡ әле, Агазия,
Яр башында усаҡ яғайыҡ.
Хәҙер саҡма сағам.
Саткы исән!
Ниңә ҡалдың шулай һағайып?

Һин борсолма... Арыманым әле.
Аяҡтарым ғына талдылар.
Аяҡтарым да ныҡ. Ваҡ ғәм баҫты,
Интригалар ҡамап алдылар.

Афродита көнсөл булып китте,
Торған һайын Зевсы ваҡлана.
Мин үҙем дә мыжыкландым. Гефест
Бер ғәйептән йөҙ ҡат аҡлана.

Кешеләргә ҡарап ҡайғым арта,
Онотолдо әҙәп, самалар —
Олимп тауына күтөү ебәргәндәр,
Ҡәберлектә бесән сабалар.

Ултырайыҡ әле, Агазия,
Яр башында усаҡ яғайыҡ.
Ағын һыуҙан кәңәш һорайыҡ та
Янған уттан аҡыл алайыҡ.

**Агазия янғас**

Һинән башҡа донъя япа-яңғыҙ,
Донъя етем, үкһеҙ,
Әйтерһең, күк ерһеҙ тороп ҡалды,
Ә ер ҡалды күкһеҙ.

Көндәремдең ҡанаттары һынды,
Һүнде беҙҙең оя.
Йондоҙҙар ҙа йым-йым нурҙар түгеп
Йомма йәштәр ҡоя.

Сабырлыктың алтын сылбырҙарын
Бына-бына өҙәм...
Эй, йондоҙҙар!
Зинһар, иламағыҙ,
Үҙем дә саҡ түҙәм.

## Үткәндәр көтөп тора

Мин түңәрәк буйлап киттем, буғай...
Осо юҡ был юлдың.
«Үткәндәр артта ҡалды», — тип
Ихлас
Мин уйлаған булдым.

Баҡһаң, йәнә көтөп тора мине
Бер үтәлгән бурыс...
Ерҙе монар
Әллә төтөн баҫҡан —
Ер яңынан ҡырыҫ.

Көтә мине тәүге хәтәр аҙым —
Күктәр менән алыш.
(Агазия ғына янды. Йәндә
Ҡалды көл һәм һағыш.)

Көтә мине шул уҡ еңеү, ләғнәт,
Алған язаларым,
Һул(ы)ҡ-һул(ы)ҡ ҡан ағыҙып көтә
Иҫке яраларым.

Мин түңәрәк буйлап киттем, буғай...
Осо юҡ был юлдың.
«Үткәндәр артта ҡалды», — тип
Юҡҡа мин уйлаған булдым.

Баҡһаң, әҙәм затын аңдып тора
Шул уҡ михнәт, мәкер,
Аңдып тора ҡара томаналыҡ,
Үс алыусы хәтер.

...О Прометей, инде икенсе ҡат
Үҙ-үҙеңде өләш!
Көтә һине кеше менән бәхәс
Һәм күк менән көрәш.

## Ваҡыт туҡталмаһын!

Остановись, мгновенье! Ты прекрасно.

*Гете*

Имеш, барын алдан күрәм — алламын.
Алла түгел, мин бер ҡатлы баламын.
...Таң атҡанда иң илаһи бер саҡты,
Шағир һорай тип, ваҡытты туҡтаттым.
Мин туҡтаттым бер секундҡа ни бары.
Баҡтым аҫҡа, баҡтым йәнә юғары:
Көҙән йыйырып, йыһан ҡапыл ҡалтайҙы,
Һә тигәнсе мең быуатҡа ҡартайҙы.
Әгәр ғаләм үҙ көйөнә бармаһа,
Ҡот осорлоҡ ғәрип икән дә баһа...
Хәтәр сайҡалды Мәңгелек бизмәне.
Әҙәми зат йоҡлай ине. Һиҙмәне.

*1980—1981*

## ЛЕГЕНДА

Һуңғы йырын яҙған сәғәтендә
Ҡарт шағирға һылыу бер ҡыҙ килгән.
Башын эйгән:
— Мин һинеке, — тигән,
Муйынына ебәк таҫма элгән.

— Даръяларым тынғас, шәфәҡ һүнгәс,
Миңә килгән күркәм йән эйәһе,
Һин кем?
— Йән эйәһе түгел — әжәл.
Ҡайтмаҫ юлға ҡалды кейенәһең.

— Әжәл сибәр булмаҫ! — тигән шағир. —
Мин бит күпте күргән әҙәмеңмен.
Ә ҡыҙ әйткән:
— Мин берҙән-бер шундай:
Мин бит, шағир, һинең әжәлеңмен.

*1980*

## ЙЫРЛАНАСАҠ ЙЫРЫМ – ҠАҘАҒСТАН

Ҡаҙағстан – йырланасаҡ йырым...
Тик башларға ғына тартынам.
Миңә ҡеүәт биргән һымаҡ, ана
Ай ҡал(ы)ҡты Урал артынан.

Ай – сихырсы. Замандарҙы байҡап,
Араларҙы ҡушып бер итте,
Мең йыл әүәл тыуған, унан тынған
Уртаҡ моңдо миндә терелтте.

Ай аңлатты: «Мин шаһитлыҡ итәм –
Мин бит үҙем йыһан тиңдәше –
Ҡаҙаҡ менән башҡорт Тарих атлы
Бер әсәнең ике күҙ йәше».

Ҡаҙағстан! Уйым гиҙеп сыҡты,
Күңелем ҡылды һине тамаша:
Күктәреңдә ҡоштар юлдар һала,
Ерҙәреңдә елдәр аҙаша.

Күк нурына ҡойоноп, был сәғәттә
Наҙға сумғанһыңдыр, Алматам.
Көндәремдең биҙәктәре кәмер,
Әгәр һине иҫкә алмаһам.

Һиндә дуҫтарымдың усағы бар.
Шул усаҡтың ҡыҙыу ҡуҙына
Боҙоҡ көндә йәнем өшөгәндә
Ике ҡулым бергә һуҙыла.

Һиндә пәйғәмбәрҙең кәшәнәһе –
Әүәзовты алған кәшәнә.
Әгәр уға табынмаһаң, шағир,
Иманлымын мин, тип йәшәмә.

Дөп-дөп баҫып урамыңдан уҙа
Кескәй Мостай – минең аҙашым.
(Эй, сабыйым, барыр юлдарыңа
Аҡ яҙмышың маяҡ ҡаҙаһын!)

Ҡаҙағстан, йөрәгем һиндә әсир.
Инде мин бер ғашиҡ кешемен. —
Күҙ алдымдан китмәй һинең һының,
Телдән төшмәй һинең исемең...

*1980*

* * *

Бер башымда мең ғәмем бар,
Бер тәнемдә мең яра.
Пәйғәмбәрмен тип алдандым,
Баҡһаң, мин бер бисара.

*1981*

* * *

Иҫке һүҙҙәр иҫкермәһен өсөн
Ҡабатларға кәрәк:
Йырҙан йырға күсһен өс бөйөк зат —
«Ватан», «Һөйөү», «Икмәк».

Ҡорал алһам йәки йыр сығарһам,
Йәки иген икһәм,
Ғүмер баҡый хеҙмәтсегеҙ булдым,
Ватан, Һөйөү, Икмәк!

Бер валсығын, хәләл бер осҡонон
Әгәр харап итһәк,
Мең ҡәһәрләр беҙҙе, мең ҡәһәрләр
Ватан, Һөйөү, Икмәк.

*1981*

* * *

Томан төйөп тултырылған
Ер менән күк араһына.
Бишенсе көн тилмерәбеҙ
Ҡояштың бер ҡарашына.

Иртәнге ел, төнгө дауыл!
Ҡайҙа китеп олаҡтығыҙ?
Ниңә беҙҙе ташланығыҙ?
Сит яҡтарҙа ни таптығыҙ?

Һауаларҙа юлдар асып,
Ҡайтығыҙсы, өрөгөҙсө!
Күктән көтәм һөйгәнемде...
Хәлдәремә керегеҙсе!
Хәлдәремә керегеҙсе!

*1981*

**ЮКҺЫНЫУ**

Ямғыр ҙа ямғыр...
Һары көҙ. Һағыш...
Ҡайҙа һеҙ, Бикбай,
Ниғмәти, Агиш?

Ташлап киттегеҙ
Донъяның йәмен.
Бер етем, гүйә,
Бөгөн был йәнем.

Булманыҡ һәр саҡ
Ал да гөл генә,
Булманы телдә
Бал-май гел генә.

Дау-бәхәс беҙгә
Ят түгел ине.
Әммә ыҙғыш та
Ваҡ түгел ине.

Аҡты, ҡараны
Төбәп атаныҡ.
Ихластан ине
Хаҡлыҡ, хаталыҡ.

Һеҙ киткәндән һуң,
Ваҡлана төштөк,
Тынғыһыҙ инек,
Тынысҡа күстек.

Талап — талымһыҙ,
Талант — вайымһыҙ:
Юҡ-барға көймә,
Миңә лә теймә.

Ямғыр ҙа ямғыр...
Һары көҙ. Һағыш...
Ҡайҙа һеҙ, Бикбай,
Ниғмәти, Агиш?

Һеҙ инде алыҫ,
Юлыҡмаҫ тауыш.
Арала – йылдар,
Йылдарҙа – һағыш.

*1982*

* * *

Был ғүмерем йондоҙ микән?
Төтәп кенә янған шәм микән?
Күңелемдә гелән бер моң биләй —
Өмөт микән, әллә ғәм микән?

*1982*

## ИЛЕШКӘ ЙЫР

Йыр әйтәм һинең хаҡында,
Ипле илештәр иле.
Сылтыр-сылтыр көй көйләгән
Көмөш инештәр иле.

Мин хайран ерең йәменә,
Күгеңдең төҫтәренә,
Һине өндә бер ҡат күргәс,
Мең керҙең төштәремә.

Һиндә ергә табыналар,
Табынмайҙар Мәккәгә.
Һиндә икмәк иманға тиң,
Һиндә намыҫ — мәртәбә.

Егет-елән сая һиндә,
Ҡыҙҙар сибәр, әҙәпле;
(Был хаҡта һүҙ ҡуйыртмайым
Йәшем үтеү сәбәпле.)

Әгәр ҙә, тим, был донъяла
Йәннәт булһа, имештер,
Ул, моғайын, Базы буйы,
Ул, моғайын, Илештер.

Гел имен бул, игелектә бул,
Ипле илештәр иле,
Сылтыр-сылтыр көй көйләгән
Көмөш инештәр иле.

*1983*

## УН ӨС БЫУАТ ҮТЕП...

Мәңгелектән алып мәңгелеккә
Донъя буйлап атлай кеше.
Ун өс быуат үтеп, һиңә килдем,
Ҡан-ҡәрҙәшем, алтай кеше.

Ҡаҙанында һыуың ҡайнап тора,
Утың дөрләй усағында,
Һин тауҙарға боҫмағанһың,
Хәҙер
Тауҙар һинең ҡосағында.

Ҡомдан түгел, таштан түгел,
Әммә
Ғашиҡ күҙҙәр ҡарашынан
Емерелмәҫ юл һалынған икән
Урал – Алтай араһына.

Яҙмышыбыҙ уртаҡ, уртаҡ беҙгә
Замананың бөйөк эше.
Ырыҫ ҡошоң оя ташламаһын,
Йән-ҡәрҙәшем, алтай кеше!

*1983*

## ТӘГӘРӘП КИТТЕ ЙӨРӘГЕМ

Йомро-йомро йомғағымды
Күрмәнеңме, ағайым?

*Әкиәттән*

Эҙҙәренә төшмәк булып
Илдәге бер сибәрҙең,
Йомғаҡ түгел, йөрәгемде
Тәгәрәтеп ебәрҙем.

Тәгәрәп китте йөрәгем,
Китте лә олаҡты бит,
Эҙен таптым, үҙен тапмай
Инде зар илатты бит.

Ҡайҙа барып һуғылайым,
Кем ҡапҡаһын ҡағайым:
— Йомро ғына йөрәгемде
Күрмәнеңме, ағайым?

Юл сатында мосафир ҡарт
Шундай аҡыл өйрәтте:
— Йүләрлек ул — юллап йөрөү
Бер ысҡынған йөрәкте.

Әй, әкиәт, мин һаман да
Бер ҡатлы иҫәр балаң.
Тәгәрәгән йөрәгемдең
Артынан ҡыуып барам.

*1983*

* * *

Быуат ярым инде хөкөм бара,
Анна Керн хөкөм аҫтында,
Һин бит «мимолетное видение» —
Шайтан заты, тимәк, асылда.

Быуат ярым шул ҡатынға төбәп
Таш аталар, сәскә өҙәләр,
Яуабын да көтөп тормайынса,
Һорау артлы һорау теҙәләр:

— Ә ниңә һин, ир ҡатыны булып,
Яҙыҡ күңел һалдың бүтәнгә?
Донъя нишләр, һәр сәселгән шалҡан
Ҡасһа шулай бүтән түтәлгә?

Ярай, сибәрһең, ти, дәртлеһең, ти,
(Даны сыҡҡан ҡатын аҙғыны!)
Даһи башын әйләндермәһәң,
һуң
Һиңә быңдай ир-ат аҙмы ни?

Имеш, «гений чистой красоты» һин,
Ҡайҙан килһен һиңә ул сафлыҡ?
Йөҙ саҡрымға ҡасҡан һинән әҙәп,
Мең саҡрымға ҡасҡан инсафлыҡ.

Йәнәһе, һин «чудное мгновенье»,
Ә һуң йырсы ниңә интегә?
«Мгновенье», имеш, һағышынан
Быуат ярым йәне моң түгә?

Хәсрәттәрҙә көйгән йөрәгем, һин
Шағир менән бергә өҙгөлән!
О, һин, мимолетное видение!
Алдарыңа килеп теҙләнәм...

*1984*

## БЕРЕНСЕ КӨН

Йыл башланыу – йыр башланыу кеүек,
Моң ғынаһы сыҡһа ярай ҙа,
Ҡай саҡ ун ике ай көйһөҙ үтә,
Беренсе көн ҡырын ҡарай ҙа...

Беренсе көн. Ергә түгел, йылға
Нисек баҫырға тип торамын.
Тәҙрә астым. Беснәк осоп инде.
Именлеккә быны юраным.

Бәүелә-бәүелә генә ҡарҙар яуа
(Ҡыштың яҙға бирер мәһәре).
Көпшәк ҡарҙан икмәк еҫе килә
(Быныһы илгә муллыҡ хәбәре).

Төтәмәй ҙә, артыҡ дөрләмәй ҙә
Тыуған яҡта яна бер усаҡ.
Утлы усаҡ – минең төйәгем ул.
Усаҡ янһа, тормош барасаҡ.

Кесе ейәнемә алты тула,
Йөҙ ҙә бергә китте әсәйем.
Мин – уртала. Үҙем таянып та,
Таяныс та булып йәшәйем.

Йыл башланыу – йыр башланыу кеүек,
Көй генәһе килһен көйөнә.
Беренсе көн татыулыҡтар илтһен,
И кешелек, һинең өйөңә.

*1985*

* * *

Диңгеҙ сигенә...

*Бер хаттан*

Кышын диңгеҙ ярҙан айырылды,
Боҙ ҡалдырып артта.
Боҙ ирер ҙә, диңгеҙ кире ҡайтыр
Февралдә йә мартта.

Айырҙы ваҡ асыу ике дусты.
Асыу һуҡыр, яман.
Аралары – ер ҙә, һыу ҙа түгел –
Боҙ ҡаплаған ялан.

Кеше кире. Имеш, ирей алмай,
Күңеле бер ҡатһа,
Баш өҫтөндә май ҡояшы янып,
Яндырһа ла хатта.

...Диңгеҙ иһә әйләнә лә ҡайта
Февралдә йә мартта.

*1985*

* * *

Мөхәббәт йырын һипләмә,
Яңынан һүтеп һалма.
Шулай йәшәһен, бер заман
Нисек яратһа «Алла».

Юғиһә аҡыл тығылыр,
Килеп ҡыҫылыр тәүбә.
Аҡыл, тәүбәгә көн ҡалғас...
Шашмаҫҡа ине тәүҙә.

*1985*

* * *

Тағы ла яҙ. Тағы эсмәй иҫерҙем.
Аты – Дөлдөл* минең ише иҫәрҙең.

Минең өсөн күктә гөлдәр тирбәлә.
Ҡояш түбән. Тәгәрәп бара эргәлә.

Раҫлайым мин – эштән сыҡҡан тиҫкәре:
Йондоҙҙарҙан аңҡый үлән еҫтәре!

Бөтә донъя аллы-гөллө, нағышлы...
Ә шулай ҙа хөр күңелем һағышлы.

Йәнем китек. Бында һин юҡ. Шул бәлә.
Ғаләм сәңгелдәгендә Ер тирбәлә.

Юғал, һағыш! Беҙ бит әле Ерҙәбеҙ.
Тирбәләбеҙ бер бишектә бергә беҙ.

*1985*

---

* Дөлдөл – әкиәттәге ҡанатлы ат.

* * *

Аяғыма кейеп ҡара
Күн итек,
Был ерҙә йәйәү йөрөнөм
Күп итеп.

Һуңғы окопты ҡаҙығас
Тар итеп,
Аяҡ осона ҡуйығыҙ
Пар итек.

Әжәл тигәне, ихтимал,
Мәрт булыр,
Бәлки, сығып йөрөргә лә
Дәрт булыр.

*1985*

## ҠОЯШЛЫ ЯМҒЫР

Ямғыр яуа ҡояштан —
Тамашаһын күр генә!
Там, тамсыҡай, ҡулыма
Тағы, тағы бер генә!

Майлы бутҡа ҡаҙанда,
Тәтәй ҡашыҡ баҙарҙа.
Вәт!

Йылыҡайым, шаяным,
Бейе, бейе усымда.
«Ямғыр яуғас, үҫәм!..» — тип
Мин бейейем ошонда.

Һин тамаһың туп та туп,
Мин баҫамын туҡ та туҡ.
Вәт!

*1985*

* * *

Был донъяны күреп ҡыуандым.
Был донъяла күргән бимазам
Үтеп китер инде бер заман.
Төштәремә керә әжәлдәрем,
Күҙ алдыма килә йыназам.

*1987*

* * *

Төнгә кергәс, төштәремдә күргән
Яуҙар кисеп ҡайтҡан ат булды.
Көнгә сыҡҡас, алдарыма килгән
Һинең ҡулың яҙған хат булды.
Төш юрауым шулай хаҡ булды.

*1987*

* * *

Йырҙарымды һауаларға ашырҙым,
Йылдарымды кәкүктәргә тапшырҙым.

Йәшәгәнем көн артынан көн бары.
Ерҙә моң юҡ. Ерҙә шау-шыу ни бары.

Һандуғасты ала ҡарға таланы.
Бал ҡорттары һағыҙаҡты ҡаманы.

Билсән басты ҡыҙыл гөлдәр түтәлен,
Мин шуларға «тыныс» ҡарап үтәмен.

Сибәрлектән өҫтөн сыҡты йәмһеҙлек,
Хөр йәнемде иҙә басты ғәмһеҙлек.

*1987*

## ЯУАП ЗАМАНЫ

1

Ил өҫтөндә, тибеҙ, елдәр иҫә,
Үтәме ул йөрәк елкетеп?
Ил өҫтөндә елдәр иҫә, тибеҙ,
Үтмәйме тик япраҡ һелкетеп?

Заманында елһеҙ, дауылһыҙ ҙа,
Ай-һай, күп шауланы уҫаҡтар.
Әммә ләғнәттәрҙән ҡурсаланһын
Үткән яҙмышыбыҙ — ул саҡтар.

Ялғандарҙы хәҡиҡәткә ҡушмай,
Гонаһтарҙан әрсеп сауабын,
Кисәгеләр өсөн таң ҡаршында
Беҙ бирергә тейеш яуабын.

Онотмайыҡ! Һәр бер ус тупраҡта
Илдең ҡаны, илдең тире бар.
Ошо илдең быуат түбәһендә
Ғорур баҫып торор һыны бар.

Ғорур илебеҙҙең башҡайына
Низәр төшөп, низәр уҙманы.
Йөҙҙәрендә — киләсәктең нуры,
Иңдәрендә — данлы туҙаны.

Барын күрҙек:
Батыр яуҙан биҙҙе,
Ҡурҡаҡ иһә яуға уҡталды.
Аҡыл менән намыҫ арзанайҙы,
Аҫыл таштар көлгә буталды.

2

Беҙ, шағирҙар, ҡай саҡ кәрләләрҙе
Бәһлеүәндәр итеп ҙурланыҡ,
Әҙәм ҡайғыларын һанға һуҡмай,
Ағастарҙың бәхетен йырланыҡ.

Кемдер хаталанған. Ә үҙебеҙ
Хилаф ҡылмағанбыҙ һис ҡасан...
Ваҡыт! Тейер ғәйептәрҙе танып,
Тәүбә килтерәйек, исмаһам!

Тәүбәнән һуң яҡты был йыһанға
Күҙ тултырып тура ҡарайыҡ.
Үҙ-үҙебеҙгә күп яраныҡ, хәҙер
Кешеләргә нығыраҡ ярайыҡ.

Ил өҫтөндә, эйе, елдәр иҫә,
Үтмәһен тик япраҡ һелкетеп.
Ил өҫтөндә елдәр иҫә, эйе,
Иҫһә ине йөрәк елкетеп.

*1987*

* * *

Һорайҙар: «Бәхетлеһеңме?»
Бәхетем үҙем менән.
Серһеҙ түгел, сере лә бар, —
Уныһын үҙем беләм.

Үтә ғүмер. Әллә ниндәй
Үрҙәргә өлгәшмәнем.
Һоҡландым кеше эшенә,
Кешенән көнләшмәнем.

Һандуғас һайрар баҡсала
Тын торҙом, өндәшмәнем.
Һоҡландым мин ғашиҡтарға,
Һоҡландым, көнләшмәнем.

Нәфсе һонмай, сабыр көттөм
Яҙмыштың өләшкәнен.
Һоҡландым мин даһиҙарға,
Даһиҙан көнләшмәнем.

Көндө күреп ҡыуаныуҙан
Эркелде күҙ йәштәрем.
Һоҡландым мин был донъяға,
Донъянан көнләшмәнем.

Булған бәхет үҙем менән,
Ризаларға — әшнәмен.
Һоҡландым бәхетлеләргә,
Һоҡландым, көнләшмәнем.

*1987*

**КЕШЕ**

Ваҡыттарҙы, араларҙы
Еңмәк булып ҡабаландым.
Еңмәҫ борон, саңдар ҡағып,
Оран һалып, һауаландым.

Йәнәһе лә, мин әжәлһеҙ,
Ҡояшҡаса һалам күпер,
Мин башлаған утлы юлдар
Йыһандарҙы ярып үтер.

Иркем булғас, тарихтарҙы
Меңәр йылға йәшәрттем мин.
Хыялымда кешеләрҙе
Киләсәктә йәшәттем мин.

Күп алыштым, күп бирештем
Был тормоштоң ағымында.
Баҡһаң икән, сәбәләнәм
Заманымдың ҡарынында.

*1988*

* * *

Был мәңгелек түңәрәк ер –
Ҡунып сыҡҡан өйөм булды.
Яҙмышҡа тиң мөхәббәтем
Һағышлы бер көйөм булды.

*1988*

## ҠАРТЛЫҠҠА ИНЕҮ

Ҡышҡа ингән кеүек, толоп кейеп,
Быйма һөйрәп инмәм ҡартлығыма.
Яуға ингән кеүек, инеп барам
Бына ниҙәр һалып ҡапсығыма:

Запас патрон, бер пар таҙа кейем,
Кәләшемдең өйҙән яҙған хаты,
Ҡайышымда — көрәк, бер фляга,
Флягаһы — окопташтар хаҡы.
(Артығы юҡ. Хәҙер закон ҡаты...)

Рухымда сәм, сабырлыҡ һәм хафа —
Килеп еттем «мина ҡырына» бит.
Ерҙә яу тынғас та ошо ҡырҙа
Көнө-төнө әҙәм ҡырыла бит.

Ташлама, батырлығым!
Эйәрмә, бахырлығым...

*1988*

* * *

А из земли выходит Джон —
Ячменное зерно.

*Р. Бернс*

Уҙған төн төшөмдә һалдылар мине
Аҡ табут эсенә.
Сәтләүек төшө мин. Сумғанмын, имеш,
Ҡаҡ ҡабыҡ эсенә.

Тупраҡҡа күмделәр, сиҙәм аҡтарып,
Иртән ҡойҙо ямғыр.
Ҡояш, мине ҙурлап, башым осома
Һуҙҙы ҡыҙыл йәйғор.

Дымлы ерҙе тишеп, бер саҡ баш төрттөм,
Гүйә, ҡыяҡ үлән.
Былай булғас, әле бәргеләнмәйек,
Бик тиҙ генә үлмәм...

*1988*

* * *

О, йәшлек, зарланма,
Күрергә күҙең бар,
Ҡолаҡта өнөң бар,
Телеңдә һүҙең бар,
Наҙларға ҡулың бар,
Тешләргә тешең бар.
Яңғыҙ ҙа түгелһең,
Дуҫ-дошман кешең бар.
Барынан ҡәҙерле —
Эшләргә эшең бар.

*1988*

## ӨФӨ ИҪТӘЛЕГЕ

*Ғүмәр Усмановҡа*

Илдәремә килеп, Ғүмәр,
Илдәремде йәмләттең.
Йөҙгә ҡарап бер йылмайһаң,
Ары торһон йәннәтең.

Мәшәҡәттәрең күптер шул,
Бик тиҙ китәһең инде.
Китәһең дә күңелдәрҙе
Етем итәһең инде.

*1988*

* * *

Мейес башында ултырған
Олатайым зарлана:
— И, замана, замана.

Төп башына ултырып
Хәҙер үҙем зарланам:
— И, заманам, заманам...

Шиктәремдең сиге юҡ,
Уйҙарымдың яры юҡ.

Шашып бейей ейәндәр,
Ейәндәрҙең зары юҡ.

*1988*

* * *

Уйҙарымдың йомғағы һин,
Көндәремдең йомаһы һин,
Сауабым һин, гонаһым һин,
Яҙмышымдың йомағы һин.

*1988*

## ЯПРАҠ ЯУҒАНДА

Көҙгө урман. Шундай сыуаҡ миҙгел.
Япраҡ яуа. Яуа талғын ғына.
Йәмен ҡойған ғәмһеҙ ағастарға
Ҡараным да уйға талдым бына.

Әлегесә шикһеҙ асыҡ ине
Көндөң, айҙың, йылдың һәр бер мәле,
Мин күргәнсә, мин тигәнсә ине
Барлыҡ заттың хәле, хәл-әхүәле.

Тәбиғәткә үҙем йән өрәм тип,
Баҙнат иттем ниҙәр эшләмәгә:
Ҡайындарға мин ҡайғымды таҡтым,
Шатлығымды һиптем шишмәләргә.

Елдең юлын бүлеп, юл өйрәттем,
Зәңгәр сер өҫтәнем һауаларға,
«Ныҡ тороғоҙ! Сабыр булығыҙ», — тип
Аҡыл бирҙем хатта ҡаяларға.

...Кескәй генә бер һары түш турғай
Пыр-пыр осоп ҡунды йәнәшемә.
Мохтаж микән ошо ҡош балаһы
Минең кәйеф, минең кәңәшемә?

Шишмәләргә ниңә минең шатлыҡ?
Ҡайындарға ниңә минең ғәмем?
Бынан ары был донъяның йәмен
Булғанынса ҡабул ит һин, йәнем.

Көҙгө урман. Шундай сыуаҡ миҙгел.
Япраҡ яуа. Яуа талғын ғына.
Миңә баҡҡан һары түш турғайға
Ҡарап тороп фәһем алдым бына...

*1988*

* * *

Урмандарға сыҡһам, урмандар тын.
Ниҙәр булды икән ҡоштарға?
Сит яҡтарҙан хәбәр, сәләмдәр юҡ,
Ниҙәр булды икән дуҫтарға?

Ҡоштар, әллә моңдан яҙҙығыҙмы?
Һеҙҙең моң бит урман ҡәҙере.
Дуҫтар, әллә уйҙан яҙҙығыҙмы?
Уй-һағыш бит дуҫлыҡ хәтере.

*1988*

* * *

Көнгә сыҡһам, өрә-өрә
Эттәр ҡамай,
Төнгә инһәм, берәм-берәм
Шиктәр талай.

Йылдар түгел, көндәремде
Кәкүк һанай,
Баш осомда, ҡоҙғон булып,
Әжәл янай.

Эткә тиһәң, етә күсәк
Йәки кисәк.
Шиккә ҡаршы
Тора өмөт,
Айыҡ исәп.

Аҙған-туҙған исәр кәкүк
Ни юрамаҫ.
Ҡоҙғон ғына «көш!» тигәнгә
Ҡалтырамаҫ.

*1989*

* * *

Баткан ҡояшҡа ҡыҙынып ултырам,
Күмер генә быҙлай рухым утынан...

Яңыса китте имандар, ғәмәлдәр.
Хөкөм итә көн һөсләткән әҙәмдәр:

Йәнәһе, беҙ йәшәгәнбеҙ кирегә,
Һис бер эшебеҙ етмәгән еренә.

Беҙ ярһыған яҙҙар, имеш, — яҙ түгел,
Беҙ назланған һөйөү назы — наҙ түгел.

Хатта яуҙа ҡан ҡойғанбыҙ самаһыҙ,
Хас дошманды еңгәнбеҙ тик сараһыҙ.

Донъя буйлап нишләп иҫән үткәнбеҙ,
Шатланырға хатта баҙнат иткәнбеҙ?

Һауҙар булһаҡ, киләсәктәр алдалыр.
Алда күңел нимә менән алданыр?

...Баткан ҡояшҡа ҡыҙынып ултырам,
Күмер генә быҙлай рухым утынан.

*1989*

## ТИМЕРБУЛАТКА ӨГӨТ

Яҡты донъя бер ҡарайһа,
Бер ағарыр.
Бөтөн күңел бер кителһә,
Бер ямалыр.

Тик ҡараны ағартам тип
Яфа сикмә.
Туң күңелде иретәм тип
Өмөт итмә.

Форсатың бар, балам, аҡҡа
Ҡара яҡма.
Нескә күңел йыуаш була, —
Шуны яҡла.
Шуны ҡаҡма.
Шуны яҡла.

*1989*

## ИМӘН

Өй алдымда минең имәнем бар —
Йөҙ йәшәгән имән.
Сирек быуат бергә көн итәбеҙ,
Имән, һинең менән.
Тәү күрешкән саҡта икебеҙ ҙә
Ир-егеттәр инек.
Ҡартлыҡ йәки әжәл уйыбыҙға
Сыҡманы ла инеп.
Мин шатландым: һәр яҙ сыйырсыҡтар
Һиндә оя ҡорҙо.
Һин ҡыуандың: күләгәңдә татыу
Табын гөрләп торҙо.
Һинең менән мине замананалар
Әммә аяманы.
Беҙ нимә ул?! Ишелеп төштө күпме
Донъя ҡаялары.
Ағас башына төшкән бәләләрҙе
Аҙмы һин үткәрҙең,
Әҙәм башына төшкән ҡазаларҙы
Күпме мин үткәрҙем.
Мин әрнеһәм, һинең япраҡтарға
Ҡара ҡайғы ҡунды,
Күңелемде минең һындырһалар,
Ботаҡтарың һынды.
Бер саҡ һиңә йәшен һуғылып китте,
Мин төбөңдә инем.
Беҙ янманыҡ. «Былай булғас, әле
Беҙ йәшәйбеҙ...» — тинем.
Ә шулай ҙа беҙҙең заттарыбыҙ
Бик сабырҙан, буғай,
Һинең менән, имән, икәүебеҙ
Бер тамырҙан, буғай.
Бына икәү ҡалдыҡ. Табын тынды,
Китте сыйырсыҡтар,
Икебеҙҙең йөҙҙә күпме бирсә,
Күпме йыйырсыҡтар.
Мин китермен. Мине яндырырҙар
Әүәлерәк һинән.
Донъя бит ул. Төрлө саҡ булғандыр.
Рәнйеп ҡалма, имән.

*1989*

## БИКБУЛАТКА ЙЫР

И, Бикбулат, Шакир атлы дуҫым,
Тыуып үҫкән төбәк!
Хайран ҡалып һиңә ҡарап торам
Ике күҙем төбәп.

Тауҙар моңон, дәртле тауҙар йырын
Йырлап аҡкан Эйек,
Сәләм бирәм һиңә, сәләм бирәм
Баштарымды эйеп.

Эйәр тауҙың көмөш биҙәгендә
Ай нурҙары уйнай,
Шул нурҙарҙың яҡтыһына күңел
Зауыҡланып туймай.

Күктә йондоҙ, ә тирәмдә күпме
Алсаҡ йөҙҙәр балҡый.
И, Бикбулат, онота алмам инде
Һине ғүмер баҡый.

*1989*

## ЮЛДЫБАЙҒА ЙЫР

Гел иҫемдә булдың, Юлдыбайым,
Әйтмә миңә: «Мостай, оноттоң»,
Өс тиҫтәгә* яҡын ғүмер уҙғас,
Бына йәнә һиңә юлыҡтым.

Бәхилләшмәбеҙ, тик хушлашырбыҙ,
Тағы, тағы килеү иҫәбем.
Киткән саҡта һиндә ҡалдырырмын
Иләҫ йөрәгемдең киҫәген.

*1989*

* Ул саҡта миңә «Юлдыбайҙың почетлы гражданины» тигән исем бирелгәйне.

* * *

Йөҙҙө уҙып киткән анама
Бер көн шулай мыжып, зарланам:
— Көйөр ҡайғым, әйтер ҡазам юҡ,
Ә шулай ҙа, әсәй, маҙам юҡ.
Ғәмдән бушап булмай. Ник алай?
Дошман талай, дуҫтар тартҡылай,
Берәү яла яға һүҙ менән,
Берәү яра һала күҙ менән.

Бына шулай, әсәй, маҙам юҡ —
Хәйер, атап әйтер ҡазам юҡ...
— Зарың шулмы, — ти ул, — иҫәрем?
Минең бүтәнсәрәк иҫәбем:
Һелкетмәйҙәр бахыр алмағасты,
Алмалары бүтән ҡалмағастын...

*1989*

* * *

Яҙам шиғыр, бәйет-фәлән яҙам
Үҙем ише бер ҡатлылар өсөн,
Яҙам
    тамуҡта ла, йәннәттә лә
Минең менән бер яҡлылар өсөн.

*1990*

* * *

Отош уйындары уйнаманым,
Уйнаманым, әммә күп отолдом,
Көстәремде артыҡ мул тотондом.
Йомошсоһо булманым мин кемдең?
Әсеһенә, сөсөһөнә күндем.
Шөкөр,
Яла-ялғандарҙан
Шәт ҡотолдом.

*1990*

* * *

Был донъяла мин аҙаштым, буғай,
Асылыма ҡайтыр һуҡмағымда
Йышыраҡҡа китте туҡталыуҙар.
Алда күтә яңы хаталарым,
Баштарымдан ашты хафаларым,
Уттарымды үртәй уфтаныуҙар.
Асылыма ҡайтыр һуҡмағымда
Йышыраҡҡа китте туҡталыуҙар.

*1990*

* * *

Барыр юлдарым йыраҡ.
Ҡар яуа бурап-бурап.
Сабыр итәм аҙыраҡ:
Хәтәр елдәр баҫылһын,
Көндөң йөҙө асылһын.

Ала ҡарға ҡысҡыра,
Атым никтер бышҡыра,
Никтер минең эс ҡыра.

Барыр юлдарым йыраҡ.
Сабыр итәм аҙыраҡ:
Зәһәр елдәр баҫылһын,
Көндөң йөҙө асылһын.

Бәлки, аяҙыр көндәр,
Аяҙырмы күңелдәр?..

*1990*

* * *

И, шағирым,
Һин үләндән түбән.
И, шағирым,
Тауҙан олоһоң.
Заманыңдың зирәк хакимы һин,
Заманыңдың һуҡыр ҡоло һин.

И, замана,
Тыуған балаңмын мин,
И, донъяҡай, етем кешеңмен.
...Ғүмер аҡшамына еткән саҡта
Ошо дөрөҫлөктө төшөндөм.

*1990*

## ҠОШТАР ЭЙӘҺЕНЕҢ ӘЙТКӘНЕ

Бишек аҫтым элмәгә,
Сыйырсыҡтар килмәгә.

* * *

Баҫма һалдым шишмәгә,
Былбыл баҫып эсмәгә.

* * *

Шөңгөр элдем, бар, ҡара,
Йәйғор тигән ҡапҡаға,
Һабантурғай ҡаҡмаға.

* * *

Ҡоштар өсөн — һәр нәмә
Рәхәт ғүмер һөрмәгә.
Сабый ҡошҡа емем бар,
Сирле ҡошҡа имем бар.

* * *

Белмәй башлаһа ҡәҙер,
Төйләгәнгә уҡ әҙер.

*1990*

* * *

*Рауил Бикбаевҡа*

Сая бейенең һин, менеп бер саҡ
Упҡын өҫтөндәге ҡаяға,
Ҡурҡманым мин, була күрмәһен, тип,
Ошо саялығың заяға.

Күҙ алдымда ташландың һин бер көн
Тауҙан атылып төшкән ташҡынға,
Мәкерле һыу һине йотмай тип,
Хатта шик инмәне башыма.

Ил алдына сыҡһаң, — мин тынысмын —
Һөйләмәҫһең ваҡты, яманды,
Изгеләрҙе яуыз яһамаҫһың,
Хаҡҡа сығармаҫһың ялғанды.

Кисә һине «03» алып китте,
Ышанамын, доктор ҡотҡарыр.
Ҡаты сырхау йыҡҡас, һинең өсөн
Тәү ҡат, Рауил, осто ҡоттарым.

*1990*

* * *

Тағы килдем, зыярат ҡылайым тип,
Атайымдың һуңғы төйәген.
Ҡәбер өҫтөн сал һағышҡа манған
Аҡ ҡылғанға башым эйәмен.

Таш ҡойманың эсе тыныс, шомло.
Бында ҡоштар оя үрмәйҙәр.
Күбәләктәр генә ғәмһеҙ уйнай,
Әйтерһең дә, кискә үлмәйҙәр.

Уйҙа күбәләктәр. Ҡайтып киләм —
Гүйә, китеп барам зыяратҡа.
Фронтовик мин. Инде күптән торам
«Иң льготный» тигән сиратта.

*1990*

## БЫУАТ

I

— Ниндәй мең йыл хәзер урамда? —
Бер мәл шағир шулай һораған.

Тимәк, әле ул саҡ Ваҡыт булған,
Тимәк, ерзе ҡояш ураған,
Тимәк, елдәр үз яйына иҫкән,
Ҡар-ямғырзар яуған болоттан.

Шағир инанған тик мәңгелеккә,
Фанилыҡты шуға оноткан.

Мин дә бөгөн шул һораузы бирәм:
— Ниндәй быуат хәзер урамда?
Үз яуабым хафаларға һала.
Тарафтарға ҡарап торам да
Күрәм: бушҡа әйләнә Ер шары,
Бер урында Ҡояш таптана,
Быуат та юҡ, йыл да, сәғәт тә юҡ,
Ваҡытһызлыҡ итә тантана.
Ваҡытһызлыҡ ҡоло — иманһызлыҡ
Ҡара дегет сәпәй ҡапҡаға.
Замананың ботаҡтары һынһа,
Ҡорор мәңгелектең тамыры.
— Әй, азашҡан Ваҡыт, ҡайзаһың һин?
Әзәм һине йәнә табырмы?

Ҡабатлайым, торам-торам да:
— Ниндәй быуат бөгөн урамда?

II

Ел-дауыллы ниндәй быуат һуң был?
Боларып уҡ тыузы тыуғанда.
Дөрөҫ икән, етә, тиеүзәре,
Туғыззағы ҡылыҡ туҡһанға.

Туҡһанда ла ҡылып бөтөрмәне
Бар гонаһын, барлыҡ сауабын.

Хисап көнө еткәс, бәйнә-бәйнә
Тарих үҙе алыр яуабын.

Юҡ!
Тарихҡа ҡалдырмайыҡ судты.
Быуат — беҙ ул. Беҙ ул асылда.
Беҙ үҙебеҙ хөкөм эйәһе лә,
Үҙебеҙ үк хөкөм аҫтында.

Үҙебеҙҙе гел ҡараға манһаҡ,
Алда кем һуң беҙҙе аҡлаһын.
Килер замана ла, беҙгә эйәреп,
Бар ғәйепте артҡа таҡмаһын,
Алла һаҡлаһын!

*1990*

## БЕҘ КЕМ?

Рәнйетәләр һине, Ватан-әсә,
Кәмһетәләр һине, изгебеҙ.
Былай булғас, йә баламы һиңә,
Йә бәләме һиңә инде беҙ?

Берәү һата һинең иманыңды,
Берәү тарта алтын сәсеңдән,
Берәү рәхәт таба күҙҙәреңдән
Сәсрәп сыҡҡан тоҙло йәшеңдән.

Ете яттар һалған ҡул яраһын
Тиҙ уңалттың, илем, ул саҡта.
Үҙ тоҡомоң һалған тел яраһы
Йөрәгеңдә хәҙер аҡһата.

Ғазаптарың аҙаҡҡыһы булмаҫ,
Ғазаптарҙан өмөт ярала.
Ватан-әсә, әгәр ҡабул күрһәң,
Яңағымды ҡуям яраңа.

*1990*

* * *

Хаҡлыҡ юллап, инде арып-талып,
Донъя аша уҙып барғанымда
Буталдым мин. Хаҡ-нахағы бары
Асыҡланыр донъя аръяғында.

*1990*

* * *

Төн ҡыҫҡартып, көндәремде оҙайттым,
Йылдарымды ашыҡ-бошоҡ оҙаттым.

Әй ҡауҙыр ҙа булдым инде — ҡабалан,
Шуға күрә самам ашты саманан.

Каса килһә, беренсе мин күтәрҙем,
Тын да алмай төбөнәсә түңкәрҙем.

Татығанда ләззәттәрен ғишыҡтың,
Танһыҡтарым ҡанмаҫ кеүек ашыҡтым.

Бәхәстәрҙә бәхәсләштем ярһынып,
Булды: бөтөнгә сығарҙым яртыны.

(Мин тылҡыуҙан ярты бөтөн булманы.
Мин юраուҙан талға бөркөт ҡунманы.)

Ҡай ваҡыт тыңлай белмәнем ахмаҡты,
Шул ахмаҡтар бер саҡ килеп аҡһатты.

Әй ҡауҙыр ҙа булдым инде — ҡабалан,
Самаларым сығып китте саманан.

Әллә йәшәү кәрәк булған яй ғына,
Әллә уйлау кәрәк булған һай ғына?..

...Ҡояш байыр алдынан бер шом була.
Күңелемдә ғәм түгел, тик шом ғына.

Юҡ! Хәҙергә ҡояш әле батмаған,
Моңһоу ерҙе әлегә шом баҫмаған.

Мин барыбер әүәлгегә ынтылам.
Хәйер, ҡай саҡ ынтылам да... ымһынам.

*1990*

* * *

Булды ҡотло көндәр,
Эштәремдән уңдым,
Эштәремдән былай
Төштәремдән уңдым.

Төштәр ябай түгел,
Улар затлы, татлы,
Зауыҡланып күрәм
Мин, бахыр, бер ҡатлы.

Рәхәттәргә сумып,
Уянамын тыныс,
Тик төштәрҙән өнгә
Инеүҙәр ҡурҡыныс.

Бер мәл яман төштән
Ҡот ҡалмай уянып,
Баҫһам ине ергә
Аҡ көнгә ҡыуанып.

*1990*

## ҠУРҠАМ

Хәстәр-хәсрәттәрҙе оноттом да
Еңел бер һағышҡа баттым бөгөн,
Ике күҙем тулы тыуған ерем,
Ике күҙем тулы тыуған күгем.

Ә шулай ҙа ҡурҡам, күҙҙәремдән
Ерем, күгем ҡапыл сайпылыр, тип,
Сайпылып уҡ улар түгелһәләр,
Был йыһанда бүтән ни ҡалыр, тип.

*1990*

* * *

Ул киткәндән бирле...
Дала буйлап,
Бигерәк моңһоу аға Юшатыр.
Юшатырға ҡарап, уны һағынам,
Күңелемде кемдәр бушатыр?

*1990*

## ИЛГИЗГӘ

Иртә лә генә томан, кис тә томан,
Был томанҡайҙарға ни булған?

*Халыҡ йыры*

Иртә тимәй, көндөҙ, кисен тимәй,
Төшә аҙаштырғыс томандары,
Яуа һаташтырғыс ямғырҙары —
Електәргә үтә торғандары.

Ерҙе генә түгел, йәндәрҙе лә
Күшектерә ошо боҙоҡ көндәр.
Ни саралар табып йыуанайыҡ,
Шифа булыр икән нindәй имдәр?

Тәбиғәттән уҙып, ни ҡылаһың?
Һынауҙыр был. Сабыр итеү кәрәк.
Беҙ көтөрҙәй бүтән донъялар юҡ,
Бар донъяны түҙем көтөү кәрәк.

Юлдар йонсоу. Бөтә ишектәр ҙә
Юлаусылар өсөн асыҡ торһон.
Усаҡтарҙа ҡуҙҙар һүрелмәһен,
Шәмдә ялҡын һәр саҡ баҫып торһон.

Үҙ донъяңды күндәм көтөү кәрәк
(Өмөт бармы-юҡмы бәхетенә).
Аҙыҡ бирһен ир-ат мал-тыуарға,
Имсәк бирһен әсә бәпесенә.

Көйө бар әҙәмдәр көй көйләһен,
Тартынмаһын, ундай һәләт булғас,
Иман итеп шуға ышанайыҡ:
Моң тынмаһа, ғаләм һәләк булмаҫ.

*1990*

* * *

Көҙҙө оҙаҡ көҙән йыйырҙы,
Ысҡындырмаҫ һымаҡ.
Ысҡындырҙы. Көҙ күҙҙәрен асты,
Күҙҙәрендә — сыуаҡ.

Ерҙең сафлығына хайран ҡалып,
Урман буйлап барам.
Ғазап кискән был сафлыҡты тапау
Түгел микән харам?

Ә мин барам. Япраҡ, хас йәнләнеп,
Килә ҡыштыр-ҡыштыр:
— Яғанан һуң өмөт иткәнебеҙ
Инде ап-аҡ ҡыштыр...

*1990*

* * *

*Т. К.*

Ергә һыға йәйге хәтәр дауыл
Ҡайындың түбәһен,
Япраҡтарын өҙә, тәнен иҙә,
Әйттерә тәүбәһен:
— Бынан ары күккә баш сөйөргә
Баҙма... Баҙма... Баҙма!
Минең өсөн үлән ни ҙә, һин ни —
Аҙма... Аҙма... Аҙма!..
Бер мәл ҡайын хәтәр ынтылды ла
Аяҡ үрә баҫты.
...Бындай саялыҡтан ҡото осоп,
Дауыл үҙе ҡасты.
Кеше, һин дә бирешмә был донъя
Ел-дауыллы саҡта,
Ҡабығыңды түгел, тармағыңды,
Тамырыңды һаҡла.

*1990*

## ПЕРЕСТРОЙКА БӘЙЕТЕ

Елдәр ҡуҙҙы көйрәтте,
Йылдар һүҙҙе һөйләтте.
Көйрәтте лә, һөйләтте лә,
Һәнәк итте көрәкте.

Ҡыҙыл ҡатыш ҡарабыҙ,
Тамаҡтарҙы ярабыҙ.
Ҡул ҡаушырып тормайбыҙ,
Дөп-дөп күкрәк ҡағабыҙ.

Илебеҙҙе фаш иттек,
Ҡойроҡтарҙы баш иттек.
Аҡты манып ҡараға,
Тоҙ һибәбеҙ яраға.

Яңырттыҡ бар саманы,
Йәйен ектек сананы,
Ҡышын ектек арбаны,
Әммә эштәр барманы.

Ҡысҡырҙыҡ бар көс-хәлгә:
— Әй, хәлүә, хәлүә, хәлүә!
Һөрәнләнек нахаҡҡа —
Тәм кермәне тамаҡҡа.

Биш йылға ла түҙмәне
Ҡыптыр ҡуян тиреһе.
Имеш, ынтылдыҡ алға,
Килеп сыҡты иреһе.

Әллә иблис ҡоторттo,
Әллә Хоҙай «ултыртты».
Иҫ-аҡылым ҡалманы
Был бәйетте яҙырға,
Китәмен тел һатырға,
Китәмен ер һатырға,
Китәмен ил һатырға
Рыночный баҙарға.

*1990*

* * *

*Рәсүл Ғамзатовҡа*

Ер йөҙөндә һап-һары көҙ.
«Был һарғайған йөҙ», — тимә,
«Көҙөм етте», — тип зарланма,
Әүлиәгә көҙ нимә?!

Донъяның серҙәрен һаҡла,
Сисмә һин барыһын да,
Йәшәһен меңәр төрлө төҫ
Бер япраҡ һарыһында.

*1991*

## ӨС ТОЛПАР

Һуңғы ваҡытта Ҡазан матбуғатында
Туҡай, Таҡташ, Туфанға ҡарата
ҡәҙерһеҙ һүҙҙәр күренгеләй башланы.

Татар Туҡай, татар Таҡташ,
Татар Туфан. Тамаша!
Ошо заттар телемә килһә,
Йәнем күктәргә аша.

Был өс толпар тартып еләҙ
Татар рухы арбаһын.
Һикереп төшмәҫ шул арбанан
Татар, ҡайҙа бармаһын,
Пәйғәмбәрен һатмаҫ милләт
Әллә ниндәй хаҡтарға.
...Әммә яман хәбәр-хәтер
Килә беҙҙең яҡтарға:

Сүп ырғыталар Туҡайға,
Таш аталар Таҡташҡа,
Хөкөм итәләр Туфанды
Иман һатҡан ҡаҡ баштар.

Был — халыҡтың тамырына
Балта сабыу түгелме?!

Шундай хәлдәргә шаҡ ҡатып,
Рәнйей башҡорт күңеле.

Татар Туҡай, татар Таҡташ,
Татар Туфан. Тамаша!
Ошо заттар телемә килһә,
Йәнем күктәргә аша.

*1991*

* * *

Ер ҡорғаҡһып янып көйгәндә,
Илгә афәт, ҡытлыҡ килгәндә,
Күк ебәрҙе шифа ямғырын,
Һауаларҙа йәшен яндырып.

*1991*

* * *

Йәнә һиңә, тәҡдирем, баш эйәмен,
Бөгөн имтихан тапшырҙы ейәнем.
— Афарин! — тим. — Үҙен кәм-хур итмәне,
Хәләл икән ейгән ризыҡ-икмәге.

*1991*

## «КҮҘ ТЕЙМӘҺЕН ФӘҮЗИӘГӘ...»

*Фәүзиә Рәхимғоловаға*

Күҙ теймәһен Фәүзиәгә,
Яңы тулды етмеше.
Күп халыҡты һоҡландыра
Етмешенең емеше.
Йәнгә аҙыҡ, йәнгә сихәт
Сәскәне лә урғаны.
Йомшаҡ булһын түшәктәре,
Йылы булһын юрғаны.
Үҙе сабыр, үҙе батыр,
Һис тә тормаҫ ебеп ул,
Хәтәр төндә ат урлашыр,
Ҡыҙ урлашыр егет ул.
Етмеш уға килешеп тора,
Үлсәп теккән кейемдәй.
Һикһәнде лә һикереп үтер,
Ғорур башы эйелмәй.

*1991*

* * *

Замананың хаҡһыҙ язаһына
Әллә күнде йәнем. Әллә һүнде.
Уттарына ла төшөп яныр инем,
Мин янырлыҡ уттар ҙа юҡ инде.

*1992*

## ХӘҮЕФЛЕ УЙҘАР

Тиҫкәре ел ыңғай яҡҡа үҙе
Боролор, тип күңел йыуаттыҡ.
Шул саҡ илдә көйө илһеҙ ҡалдыҡ,
Ерҙә көйө ерҙе юғалттыҡ.

Шашынғандар шаулай. Ә, һыу уртлап,
Телдән яҙҙы бөйөк шағирҙар.
Мәмерйәгә боҫоп, йән аҫрай
Сығып майҙан тотор шаһ ирҙәр.

Эштән биҙгән ҡулдарыбыҙ ҡорой,
Уйҙан биҙгән аңдар кибәләр.
Ялған ғына үрсей. Уны беҙгә
Ямғыр урынына һибәләр.

Бер көн килеп тертләп уянырбыҙ,
Инде ҡыҫыр булыр уйҙарыбыҙ.
Бөйөк илдә көйө илһеҙ ҡалдыҡ,
Ерҙә көйө ерҙе юғалттыҡ.

*1992*

* * *

Ирҙәр йөрөр юлға оҙатканда
Әйтте атайым миңә ошолай тип:
«Уҙамандар ҡорона тап килгәндә
Ҙур һүҙ һөйлә, эре һөйләшмә тик».
Йәнә әйтте: «Көсөң ташҡанда ла
Йөгөндөрөр йөктө йөкмәмә һис.
Ахмаҡтың һәр һүҙен кире ҡаҡма,
Маҡтансыҡтың һүҙен йөпләмә һис».

*1992*

* * *

Уны алмаһаң, и, Хоҙайым,
Фәрештәң һуң аҙмы күктә?
Бит яҙыҡлы был ер иң изге
Аҡ фәрештәнән яҙҙы...

*1992*

* * *

Бешеп еткәс кенә, дауыл йығa
Игендәрҙе.
Нығып еткәс кенә, ҡайғы бөгә
Күп ирҙәрҙе.

*1992*

* * *

Шаһ затынан, моғайын, һин,
Санабархон,
Бар булмышың менән бит һин
хандарға хан.
Әгәр ҙә мин бәләләргә юлда тарыһам,
Һин етәкләп алырһың, тим,
Санабархон.
Йөрәгемде ҡап уртаға әгәр
ярһам,
Үҙәгендә һин булырһың,
Санабархон.

*1992*

## ТӘҮГЕ ҠАР

— Был донъяла ниҙәр бар?
— Күктә болот, ерҙә ҡар.
— Ниҙәр бар был донъяла?
— Бөгөн донъя йөн яҙа.

*1992*

* * *

Илдең ҡото киткән был көндәрҙә
Һығылып төшкән саҡта ир бәндәләр,
Харап булмам әле, харап булмам,
Рәсүл менән Муса эргәмдәләр.

Мин инанам, донъялыҡта улар
Ысын дуҫлыҡтың татып белә татын.
Юҡҡа ғына икеһе лә улар
Йөрөтмәйҙәр пәйғәмбәрҙәр атын —
Рәсүл, Муса.

*1992*

* * *

Был донъяны бик күп гиҙҙем,
Балтырҙарым талғансы,
Шатлыҡ эстем, хәсрәт йоттом
Танһыҡтарым ҡанғансы.

Ғаләмдең дүрт яғын күрҙем,
Ай-ҡояш һәр яғында.
«Йыһан һүнде!» — тимәнем һис
Күҙем һүнер сағымда.

Шул көндө менеп баҫырмын
Мәңге йөҙөр карапҡа,
Һәм китермен, юҫыҡ алып,
Мин бишенсе тарафҡа.

Юлым — юлһыҙ. Даръяларҙан
Болоттарға осормон.
...Йәрем биргән күк сәскәне
Күкрәгемә ҡыҫырмын.

*1992*

* * *

Илар инем, тыуған өйөм,
Башым һалып буҫағаңа,
Йәшем кипте.
Йырлар инем, Тыуған илем,
Таңда сығып баҫыуыңа,
Көйөм китте.

*1992*

* * *

Ут менән һыу ҡушылып аға хәҙер,
Күк төбөнә тауҙар ишелә.
Әжәлдәрҙән ҡурҡыу бөттө инде,
Әҙәмдәрҙән ҡурҡып йәшәлә.

Батша һарайынан күркәмерәк
Бахыр дәрүиш ятҡан кәшәнә.

*1993*

## ШАЯРЫУ

Йөрәгемдә йөй таптылар.
Ҡасан сатнаған икән?
Мөхәббәт аллаһы уға
Уғын атмаған микән?

Ә врач әйтә: «Был оҡшаған
Йылан саҡҡан эҙгә, — ти. —
Берәй саҡ һыйынманымы
Шул хәшәрәт һеҙгә?» — ти.

Эйе, эйе, хәтерләйем:
Сыҡһам да мин, керһәм дә,
Байтаҡ йыл бер ҡара йылан
Уралды гел эргәмдә...

*1993*

## ЯҢАУЫЛҒА ЙЫР

Таралды бар һағыштарым,
Юғалды бар хәстәрем,
Таң менән һайрап ебәргәс
Яңауыл әтәстәре.

Рәхмәт һеҙгә, уяу ҡоштар,
Килтерегеҙ имен көн,
Һеҙҙән башҡа был донъяның
Йоҡлап ҡалыуы мөмкин.

Яңауылда быҫҡаҡ ямғыр,
Ямғыр түгел, игелек.
Ергә түгел, күккә бөгөн
Башым эйәм иң элек.

Йәмле ерҙәр, асыҡ йөҙҙәр
Күңелемде арбаны.
Яңауылға йыр йырлауҙан
Башҡа сарам ҡалманы.

Яңауыл, Яңауыл —
Йөрәгемдә яна ул.

Таралды бар һағыштарым,
Юғалды бар хәстәрем,
Кәпәс һалып сәләмләйем
Яңауыл әтәстәрен.

Яңауыл, Яңауыл —
Йөрәктәрҙә яна ул.

*1993*

* * *

Был донъяла бер ожмахта булдым,
Бер һуғылдым тамуҡ тарафына.
Йәнем бер саҡ килеп ҡунмаҫ микән
Тамуҡ менән ожмах араһына?

*1993*

## ШИШМӘ МОҢДАРЫ

*(Тәлғәт Шәрипов көй яҙҙы)*

Тупраҡҡайым, ҡояш, айым —
Мөҡәддәс тыуған яғым,
Һиндә тирбәлде бишегем,
Һиндә ярһыны яҙым.

Һин нигеҙем ташы,
Һин йөҙөгөм ҡашы,
Һин йырымдың башы,
Шишмәм, минең Шишмәм.

Илдәр гиҙҙем, һыуҙар кистем,
Донъя матур, киң икән.
Иң йәмле ил — Шишмә икән,
Иң тәмле һыу — Дим икән.

Һин нигеҙем ташы,
Һин йөҙөгөм ҡашы,
Һин йырымдың башы,
Шишмәм, минең Шишмәм.

Балҡып яна, балҡып һүнә
Аҡшамдарың, таңдарың.
Күңелемдән китмәҫ инде
Һағыштарың, моңдарың.

Һин нигеҙем ташы,
Һин йөҙөгөм ҡашы,
Һин йырымдың башы,
Шишмәм, минең Шишмәм.

*1993*

## АУАЗ МЕНӘН БӘХӘС

Елдәй елгән һыуҙар һымаҡ
Аҡҡан булдым.
Гел киләсәк ҡапҡаларын
Ҡаҡҡан булдым.

Юлдар һалдым, бағып бары
Алға ғына,
Ҡул һелтәнем донъялыҡтың
Ҡалғанына.

Ҡулым талды ҡапҡаларҙы
Ҡаға-ҡаға,
Хәлем бөттө иҫә-иҫә,
Аға-аға.

...Кисә ҡаҡтым уҙғанымдың
Ишектәрен.
Ҡаҡҡанымды уҙған заман
Ишетмәне.

Юл һалырға ниәт ҡылдым
Артҡа табан.
Ауаз килде: «Шашҡанһың һин,
Әй, кем, наҙан!

Ул тарафҡа юл һалынмаҫ
Һис ни мәлдә.
Хатта шуны белмәйһеңме,
Бахыр бәндә?

Үткәндәргә ҡапҡа бикһеҙ,
Юлдар асыҡ,
Тик ул яҡҡа барыуҙары
Түгел насип.

Тере саҡта килер көндөң
Ишеген ҡаҡ,
Артҡа түгел, алға торған
Һуҡмаҡҡа баҡ».

Өгөт биреү еңел дә ул
Һиңә, Тауыш.
Ҡайҙа һуҡмаҡ? Ерҙә алыш
Йәки һағыш.

«Улай ебеп төшкәс, — хәтәр
Ҡыҙҙы Тауыш, —
Мәңгелеккә тупраҡ менән
Тот та ҡауыш!..

Кешеләргә шик-шом һалып
Йөрөмә, мыжыҡ...»
Был кәңәшең һинең, Тауыш,
Ифрат ҡыҙыҡ.

Һин иҫкәрттең, рәхмәт, ә мин
«Иҫкәрермен».
Ләкин кемдер «аҡыл таҡһа»,
Мин ҡай саҡта
Тиҫкәремен...

*1993*

* * *

Шатлыҡтарым шөйлә иҫкерәләр,
Тик яңыра бара хафаларым,
Ҡылған изгелектәр төпкә бата,
Өҫкә ҡалҡып сыға хаталарым.

Ер тапауым оҙаҡҡараҡ китте,
Һиҙәм: донъя бик йыш ҡырын ҡарай,
Хатта ел дә сәстәремде түгел,
Далалағы ҡылғанымды тарай.
Ҡуй, зарланма, ҡартлас.
Ярай...

*1993*

* * *

Донъя сирле. Кемдер унан
Биҙеп китә,
Бар өмөтөн, тапап-тапап,
Иҙеп китә.

Донъя серле. Берәү уны
Фашлап китә;
Берәү иһә, ләғнәт уҡып,
Ташлап китә.

Бәғзеләре, саҡ ҡыймылдап,
Йәшәп китә,
Бер үк йырҙы, бер үк зарҙы
Көйшәп китә.

Ҡай берәүҙәр тонсоғалар,
Малға батып,
Ә күпмеһе шөһрәт ала,
Иман һатып.

Әүлиәләр ҡайҙа? Кемгә
Баш эйәләр?
Хәмер эсеп, зина ҡыла
Әүлиәләр.

Донъя сирле. Белеп булмай
Ни яҙаһын;
Кем һуң уҡыр был донъяның
Йыназаһын?

*1994*

* * *

Октябрҙә йондоҙҙар төҫ ташлай,
Күк үҙе лә тоноҡлана икән,
Ай кителгән. Әллә төнгө ҡоштоң
Ҡанат осо уға тейеп киткән.

Минең миҙгел, минең ыҙаным был.
Күпме үттем уны аша атлап.
Уйһыулыҡты шыйыҡ томан ҡаплай,
Баш осомда йондоҙҙар төҫ ташлай.

Барыр ергә барып етмәгәнмен,
Юлда туҡтап, әле усаҡ яғам,
Ә шулай ҙа ай-йондоҙҙан әүәл,
Ирекһеҙҙән, ҡара ергә бағам.

Иләҫ уйҙар инде тулап ташмай,
Юғарыла йондоҙҙар төҫ ташлай...

*1994*

## АЙ САҠЫРҘЫ

Айҙың күңел бөтөн бөгөн,
Күккә һыймай яктыра.
— Әйҙә, шағир, миңә ҡун, — тип
Ул үҙенә саҡыра.

— Саҡырһаң да, ҡеүәт етмәҫ,
Мин осалмам — ауырмын.
Хәсән Назар осор ине —
Ул торғаны ҡауырһын.

— Хәсән менән һүҙ һуңыраҡ,
Йәнем һиңә ылыкты.
Сыҡ далаға. Бер үтәйек
Дер һелкетеп тынлыкты.

Китеп барҙыҡ. Ул — түбәлә.
Мин атлайым түбәндә.
Һөйләшеп һүҙебеҙ бөтмәй.
Ул — планета. Мин — бәндә.

Ай һораша:
— Һин нисәлә?
— Етмеш биштә мин әле.
— Шулай йәшме? Ә бит даның
Миңә мең йыл билдәле.
(Бәхәсем юҡ. Айҙың иһә
Үҙ иҫәбе, үҙ мәле.)

Дәртле инең элек,
Хәҙер
Бойоҡ йырҙар яҙаһың. —
Йөҙөңдә лә, күҙеңдә лә
Замананың маҙаһы.

Миңә лә бик рәхәт түгел —
Бер тулам, бер түгеләм;
Мин күргәнде ҡояш күрһә,
Ҡасыр ине күгенән.

Әммә, шағир, бирешмәйек,
Һис нәмә юҡ мәңгелек:
Тамсы ысыҡ күрһәк, шуға
Ҡыуанайыҡ иң элек.

Айҙың күңел бөтөн ине,
Күккә һыймай яҡтырҙы.
Кисә мине төн йөҙөндә
Юлдаш итеп саҡырҙы.

*1994*

* * *

Тәнемә ял, рухҡа тынлыҡ кәрәк.
Яныу бөттө. Тыйҙым мәжлестәрҙе.
Бөгөн иртән ҡыуып олаҡтырҙым
Эсемдәге барлыҡ иблистәрҙе.

Сығып киттем. Һары һил урмандың
Төшөп алдым аулаҡ һуҡмағына.
Аҙымдарым улай ныҡлы һымаҡ —
Таяҡ таянманым юҡҡа ғына.

Бына шулай тәүбә итеп кенә
Хас моратҡа икән ирешәләр.
Китеп барам. Яҙыҡ-маҙарым юҡ.
Иңдәремә ҡунған фәрештәләр.

Ел дә иҫмәй, өн дә ишетелмәй.
Шундай тынлыҡ, шундай дөм яңғыҙлыҡ.
Дөм яңғыҙлыҡ әле алдалыр ул,
Бынығы ла аңдан яҙҙырырлыҡ.

Зелпе ботағында эленеп тора
Йәй үк етем ҡалған ҡош ояһы...
Донъя ҡапыл ҡотһоҙланып китте,
Бик тиҙ кәрәк уға ҡот ҡояһы.

Туҡталдым да икеләнеп ҡалдым:
Нишләмәк һуң кәрәк бындай саҡта?
...Таяғымды һелтәп ырғыттым да
Кире ыңғайланым килгән яҡҡа.

*1994*

## АҘАШЫУҘАР

Ҡояштан китеп, етә алмай ергә,
Нурҙар аҙаша;
Йөрәктән сығып, йөрәккә етмәй,
Йырҙар аҙаша.

Һаташа ҡоштар. Ҡайҙалыр йөрөп,
Ҡыштар аҙаша;
Танымай аҡты, күрмәй ҡараны,
Баштар аҙаша.

Тәхеттәрҙә ултырғаны көйө
Аҙаша батшалар.
Көн-төн һәрмәнеп тә, һуҡмаҡ тапмай,
Аҙаша баш ҡала.

Туп-тура тиһәң, сыбалып китеп,
Юлдар аҙаша;
Ҡай тарафҡа барырға ла белмәй,
Йылдар аҙаша;
Үҙ ерендә, ай-ҡояшһыҙ ҡалып,
Илдәр аҙаша.

Ғәзиз дуҫым! Арабыҙға ятҡан
Ярты Ер шары.
Ара нимә? Тик һуҙырға кәрәк
Ҡулды ни бары.

Мә ҡулымды. Тотон. Икәү булһаҡ,
Беҙ аҙашмабыҙ.
Алдашҡандар ғына аҙашалар,
Беҙ алдашмабыҙ.

*1994*

* * *

Хоҙайҙы күрҙем төшөмдә...

*Х. Туфан*

Тәңребеҙ төшөмә керҙе
Уянып китер мәлде.
Сәләм бирҙем, ҡабул итте,
Итте лә ғәжәпләнде:

— Бәй, әле һин иҫәнме ни?
Гонаһ шомлоғо... хәтер...
Затыңды ла, атыңды ла
Иҫкә төшөрәм хәҙер...

Йөҙөңдө күргән кеүекмен,
Ҡиәфәтең дә таныш.
Һин бит теге... Кем әле һуң?.. —
Яуҙар сапҡан Туҡтамыш.

— Тәңрем! Мин бит Мостай Кәри-им.
(Имеш, бирәм төҙәтмә.)
— Мостай Кәрим? Әлегә һин
Тыумағанһың. Йөҙәтмә!

— Һынабыраҡ баға күр! — тим. —
Мин бар, Раббым, мин тере.
— Бәхәсләшмә. Алла һуғыр!
Миндә Хоҙай хәтере.

*1994*

* * *

Ямғыр ҡатыш ҡар —
Ерҙә, һауала.
Поезда барам,
Ҡаршымда бала.

Ул сабый миңә
Шундай саф ҡарай.
...Донъяла әле
Йәшәргә ярай.

*1994*

## БОРОНҒОЛАРҒА ЭЙӘРЕП...

Шаңҡыта алмаҫ алтын сыңы ҡолаҡты.
Нәфсе-шайтан күптән китеп олаҡты.
Баҫып ҡына уҙырмын ул алтынға,
Аунап ятһа ла аяғым аҫтында.

* * *

Әйләнмәнем мин мөхәббәт ҡолона,
Сығарманым уны үҙемдән олоға.
Тикшермәйсә аҡылымды, буй-һынды,
Мөхәббәт ул үҙе миңә буйһондо.

* * *

Ымһынмаһын, әсир итәм тип, ирек,
Һөйләшәм мин уның менән түш киреп.
Кәрәк түгел көс-ҡеүәттең башҡаһы,
Мин бит үҙем азатлыҡтың батшаһы.

* * *

Ни хәлдәргә төшөрҙөләр хаятты —
Ҡуласаһына тыҡтылар таяҡты.
Пыран-заран килде бөтә тирә-яҡ.
Зыян күрмәй бөтөн ҡалды тик таяҡ.

* * *

Ишәйеп китте был заман һуҡбайҙары,
Төн төнәргә улар ҡайҙа туҡтайҙар?
Ҡайҙа булһын? Ишек асҡан һарайҙар.
Үҙҙәрен бит улар хаким һанайҙар.

* * *

Афәттәр күп: дарья тулай, йә тау ҡолай.
Йә йот килә... Шулай булған. Булыр шулай.
Нимә уның ташҡындары, ҡоролоғо?! —
Донъя туҙҙы, һис ҡалманы торорлоғо.

* * *

Таң нурына һоҡланыуҙан йәшем аға,
Иҫем дөрөҫ. Һанамағыҙ диуанаға.
Илар ерҙә көлгән булам ҡайһы саҡта,
Зинһар, мине сығармағыҙ шаталаҡҡа.

* * *

Анау йылды Муса әйтте миңә:
«Хыялдарҙан, сабый, айны, уян!»
Айныманым, шөкөр, уянманым.
Мин һаман да «юҡтан бушҡа ҡоям».

* * *

«Юҡ» тигәнем тормош үҙе икән,
Яҙмыш булып сыҡты «буш» тигәнем.
Хоҙайыма табынамын тиһәм,
Иблис булып сыҡты баш эйгәнем.

* * *

Еңеп булмай тик анауы хәмерҙе...
Бара-тора...
Тәнем түгел, әрнеп, йәнем һыҙлай бөгөн —
Юғалттым мин был донъяның ырыҫ төгөн.

* * *

Хәбәр булды газетанан кисәге:
Күп әҙәмдең теле икән тилсәле.
Атап әйткән депутаттар тураһында —
Улар тора иң беренсе урында.

* * *

Ямғыр яуып китте матур ғына,
Үлән ҡыяҡлана, шартлай бөрө.
Ерҙең һуты күперелгәс, тимәк,
Тәбиғәттең орлоҡтары тере.

* * *

Мәңге яңырыуҙың ҡаршыһында
Ни нәмә ул минең ҡартлыҡ зарым?
Өҙгөләнмә, йәнем! Сыҙа, буйһон,
Булғанынса ҡабул ҡыл да барын.

* * *

Балаларым бары ла ер өҫтөндә.
Донъя көткән кешем үҙ эргәмдә.
Уттар үртәгәндә, үртәлмәнем,
Бөгөлмәнем хәтәр ел өргәндә.
Мин яҙмышым менән имен бәндә.

* * *

Нахаҡ, яман һүҙҙән ҡойолоп төштөм,
Яһил күҙҙән, туңып, өшөнөм мин.
Моң ишетһәм, йәнем ҡанат ҡаҡты,
Бер аҙашҡан ҡошсоҡ ишелер мин.
Моғайын да, мәжнүн кешелер мин.

* * *

Аҡыллы һүҙ үтә һирәк булыр,
Шуға ла ул бик-бик кәрәк булыр.
Ахмаҡ һүҙҙең уның күп күләме —
Гүйә, сәсмәй үҫкән сүп үләне.

*1994*

* * *

Оран килде: «Тау башында
Шаҡ ҡатҡыс тамашалар! –
Унда көлөү өләшәләр,
Йылмайыу тараталар...»

Көлөү түгел, йылмайған юҡ,
Ҡороп бара көс-дарман.
Ни булһа ла эләгер тип,
Тауға саптым йән-фарман,

Саҡ-саҡ-саҡ килеп өлгөрҙөм,
Бөтөп барғанда бүлеү.
Өлөшөмә тороп ҡалған
Бер йылмайыу, бер көлөү.

Уларҙы, сәскә шикелле,
Йылтыр ҡағыҙға төрөп,
Минең ҡулыма тотторҙо
Ҡыҙыл фәс кейгән төрөк.

Шундай танһыҡ табышыма
Илереп үк ҡыуандым.
Ҡыуаныс күпкә барманы.
Уяндым...

*1994*

## ЭКСПРОМТТАР

* * *

Үлем теләй. Үҙе ҡурҡа әжәлдән.
Ни көтәһең инде бындай әҙәмдән?
Имеш, шундай хәйләкәр ул. Ҡара һин! —
Бер итмәксе ике донъя араһын.

* * *

Аҡса тигән йәнбаҫарға
Әсир төшмәҫ выжданым.
Ҡоралһыҙ шул бер выжданым —
Бар ҡоралым, бар даным.

* * *

Ураҡ менән ҡылыс ғүмер баҡый
Алышҡандар. Ҡандар түгелгән.
Алмас ҡылыс бер саҡ шартлап һынған,
Тимер ураҡ бары бөгөлгән.

*1994*

## БАБИЧ ӨНӨ

Ай нурына манып, йырҙар теҙҙем.
Халҡым өсөн, тимен, яҙамын.
Нур өләшеп, ҡараңғыла ҡалдым,
Мин бисара — Шәйехзадамын.

Дан татыным. Уртаһында булдым
Ел дауылдың, бәлә-ҡазаның.
Илем өсөн ҡаныма сәсәп ауҙым,
Үкенмәйем. Шәйехзадамын.

Заманымдың барлыҡ ҡылғанына
Үҙем аҡлау, үҙем язамын.
Егерменсе ошо быуат мин ул.
Мин Бабичмын. Шәйехзадамын.

*1995*

## ҺОРАУҘАР

Күктәрҙән өҙлөкһөҙ
Һорауҙар яуалар.
Ер йөҙөн көйҙөрөп,
Һорауҙар яналар.

Алда ла, артта ла
Гел һорау, гел һорау.
Һорауҙар эсендә,
Тик ҡатып, мин торам.

Таралды зиһенем,
Тығылды ауазым.
Һорауҙар бирмәгеҙ,
Юҡ минең яуабым.
Юҡ!..

*1995*

* * *

Таң алдынан ғына, көтөү булып,
Аҡ боландар керҙе төштәремә.
Аҡ күбектәй, аҡ болоттан төшкән
Ҡара ҡарҙар ҡуна өҫтәренә.

Мин уларҙы тауға әйҙәп барам,
Тоҡсайымды аҫып иңдәремә.
Ни тип юрарға был сәйер төштө?
Нимә булыр икән өндәремдә?

...Өнөмдә лә аҡ боландар көтәм
Ҡара ҡарҙар яуған көндәремдә.

*1995*

* * *

Байтаҡ күрҙем: ап-аҡ фәрештәне
Ҡара иблис итте харам-яҙыҡ.
Тик бирәү ҙә фәрештәгә кире
Ҡайтҡаны юҡ, шайтанлыҡтан яҙып, —
Бына шуға етмәй һис зиһенем.
Кет-кет көлә иблис: «Һи-һи, энем...»

*1995*

## ҮҘЕМӘ ӨГӨТ

Бәлйерәмә, рухым, бөгөлмә, бил,
Кисә дауыл ине, ә бөгөн һил.

Кисә дымлы ине керпектәрем —
Кипмәҫ һымаҡ йәшем бөрсөктәре.

Керпектәрем кипте. Бөгөн ана
Үлән ҡыяғында ысыҡ яна.

Ярым-ярым көнөм булыр бөтөн,
Етем ҡалдырмаһа бер өмөтөм.

Көсөм артыр, тағы Иҙел кисһәм.
Һыйынайым тиһәм,
Башҡортостан атлы илем иҫән.

*1995*

* * *

Йөрәгем минең тоташҡан
Йөрәгең сымдарына.
Ялҡын менән яуап бирәм
Осҡондай ымдарыңа.

Бары булды. Туңдырҙың да,
Дөрләттең дә, көйрәттең.
Ялған ауаз ғына бирмә,
Шартлатырһың йөрәкте.

*1995*

* * *

Яҙыктарым үкенеүҙәр аша
Донъямды яңырта.
Әгәр шул булмаһа, был тормошта
Ни кәмей, ни арта?

*1995*

## ТӘҮБӘ

Әйтмәгеҙ: был һаталыр, тип, сафсата.
Һуңғы шешәмде һыттым мин — Мостафа.
Хәмер миңә бынан ары мең харам.
Антты боҙһам, буласаҡмын мин харап,
Әйткәндән ҡайтмам һис ҡасан, һис ҡайҙа.
Был антымды тапшырамын Хоҙайға!
(Антты һаҡлау-һаҡламау уның иркендә.)

*1995*

## ҠОРОЛТАЙҒА ҠОТЛАУ

Далаларҙан, тауҙан, урмандарҙан
Шәрбәт йыйып ҡайтты бал ҡорттарым.
Бал ҡорттары һымаҡ, йыйылдылар
Баш йортома бөгөн башҡорттарым.

Оҙаҡ йылдар, оҙон юлдар буйлап
Ашҡынышып килдек, һағынышып.
Ҡоштар ҙа бит табышҡанда шулай,
Ҡыуаналар, ҡанат ҡағынышып.

Хәсрәт түгел, хәстәр йыйҙы беҙҙе:
Туғанлыҡты кәрәк яңыртыуҙар,
Һүрелмәһен өмөт, һүнмәһен дәрт,
Һүнеп ҡалһа ла янар тауҙар.

Йөҙәтмәһен әжәл юраусылар,
Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ,
Үҙебеҙҙең йырыбыҙҙы йырлап,
Тарих арбаһында барасаҡбыҙ.

Әммә һис ҡасан да бирелмәбеҙ
Күкрәк һуға торған мин-минлеккә,
Табынырбыҙ башҡорт илендәге
Татыулыҡтар менән именлеккә.
Татыулыҡтар менән именлеккә...

*1995*

## ӘБЙӘЛИЛДӘРГӘ МАҠТАУ

Маҡтауымды дөрөҫләрлек
Миндә бик күп дәлилдәр:
Ҡунаҡсыл да, туғансыл да,
Йомарт та әбйәлилдәр.

Хатта бында килтергәндәр
Үҙ һыйҙарын, йорттарын.
Королтайҙы йәмләнеләр
Әбйәлил башҡорттары.

Өйҙәре лә бейектер, тим,
Ҡуйылыр өйрәләре.
Үҙҙәре зиһенле булғас,
Башлылыр түрәләре.

*1995*

* * *

Иртән тарттым ғүмеремдең тиҫбеһен,
Уйлап тормай ни булырын кискеһен.
Хәҙер беләм, аңдый мине нимәләр:
Еп өҙөлөр ҙә, һибелер төймәләр.
Еп ялғанмаҫ, төймә ҡабат теҙелмәҫ.
...Хоҙайҙың һис быға эсе өҙөлмәҫ.

*1995*

7 – 1.0142.11

## КӨЙӨРГӘҘЕГӘ ЙЫР

Көйөргәҙем, көйөм күптән әҙер,
Тик һүҙҙәрем килмәй зарыҡтырҙы.
Төндә айың, көндөҙ йәйғорҙарың
Йөрәгемдә минең янып торҙо.

Юшатырҙың һыуын дарман өсөн
Бер уртланым алып ҡуш усыма.
Һүҙҙәр килде шул саҡ тел осона,
Гүйә, йәнем йәнә ҡош осора.

Тауҙарыңа бағам, ҡырҙарыңа:
— Һаумы, — тимен, — хозур Көйөргәҙе!
Томанда ла, ҡышҡы буранда ла
Күңелеңдә һинең көн үҙәге.

Сиктәреңә килеп аяҡ баҫҡас,
Шуны белдем әле бында ғына:
Ҡояш үҙе һинең ҡапҡа аша
Нур сәсергә сыға көн яғына.

Көйөргәҙе иле! Көйөргәҙем!
Гел балҡыһын шулай көн үҙәгең.

*1995*

## Һағынғанда яҙылғандар

(Шаярыуҙар)

### БАШҠОРТ ШАҒИРЫНЫҢ ЗАРЫ

Халҡым бәхетһеҙ, тип, зар иланым,
Ихлас зар илайым һаман мин.
Ярай үҙем бәхетһеҙҙән түгел,
Шөкөр, үҙем имен-аманмын.

* * *

### МУСА ҒӘЛИГӘ

Юлдар менән күпме бәхәсләштем,
Елдәр менән күпме көрәштем.
Ҡаҡ маңлайым сатнап ярылғансы,
Планеталар менән төкәштем.

Көсәнеүем булды заяға,
Ғаләм үҙ көйөнә яй аға.

### ӘНҒӘМ АТНАБАЕВҠА

Һинең, Әнғәм, ҡупшы мыйығың бар,
Мыйығыңдан бейек ҡыйығың бар.
Ҡай саҡ шәйләмәйҙәр ҡыйығыңды,
Күрәләр ҙә кәрниз-мыйығыңды.
...Ә бит теләһә ниндәй осорҙа ла
Үҙ хазинаң булды осормала.

### ФАКИҺА ТУҒЫҘБАЕВАҒА

«Фатихамды бирәм».

*Ф. Туғыҙбаева*

Беҙҙәргә лә килеп етте фатихаһы,
Ә һуң ҡайҙа тороп ҡалған Факиһаһы?

Фатихаһы, Факиһаһы бергә икән,
Бәндәләргә терәк кәрәк ерҙә икән.

Шул икәүһе бер йөрәккә һыя икән,
Яуызлыкты илай-илай тыя икән.

## НӘЖИБ АСАНБАЕВҠА

Ул төрлөсә. Тик хәйләләп
Яһалмай ул.
Ҡырҡ бер тапҡыр суҡынһа ла,
Асанбай ул.

## ТАМАРА ҒӘНИЕВАҒА

Тамара:
О! Кто ты?
Речь твоя опасна!
Тебя послал мне ад иль рай?

*М. Лермонтов. «Демон»*

Мин шағирмын!
Шуға шауҡымлымын,
Гонаһҡа ла, язаға ла әҙер.
Шайтандарҙы ғашиҡ итер инем,
Ғашиҡ булыр шайтан да юҡ хәҙер.

*1995*

* * *

«Эстәрлекәй ҡала — сәхрә-дала», —
Шулай йырлай ине ағайым.
Был буранлы төндә Эстәрлелә
Күңелдәрем ҡалды һағайып.

«Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә...» — тип
Зар моңая булған һөйгәнем.
Был буранлы төндә Эстәрлелә
Һағыштарҙан рәхәт сигәмен.

Торатауға менеп бер йырлармын:
— Эстәрлекәй ҡала, Эстәрлем.
Килке-килке һине һағыныуымдан
Бушамаҫ та инде эстәрем.

*1995*

* * *

*Хәйҙәр Бегичевҡа*

Дуҫтар менән табын ҡороп
Мәскәү тарафтарында,
Таңдар атҡансы тирбәлдек
Моңоң ҡанаттарында.

Ярһыттың да, йыуаттың да
Күңелдәрҙе һин, йырсы.
Бер ҡараһаң – доғасы һин,
Бер ҡараһаң – сихырсы.

Йонсоу сағында көндәрҙең,
Хөрт сағында хәлдәрҙең
Һулышымды иркенәйтә
Бер ауазы Хәйҙәрҙең.

Тағы шуны өҫтәп ҡуям,
Һүҙем түгел зерәгә:
Үҙе генә бер мөғжизә
Тап килеүе Зөһрәгә.

*1996*

* * *

Бер саҡ әйттем: «Бирә күрсе, яҙмыш,
Оҙон ғүмер, ҡыҫҡа ғына ҡартлыҡ».
Хәҙер ялбарамын: «Ғүмерҙе лә
Бирмә, зинһар, кәрәгенән артыҡ».

Самаларға кәрәк булған бокалға ла
Йомартланып ҡойған саҡта шарап:
Артылып уҡ китһә, танһыҡ ризыҡ
Әрәм генә була, була харап.

Сиктән уҙған, хаттин ашҡан ғүмер
Ситкә аҡкан анау шарап ише.
Теләгем шул: булмаһам да ине
Шәүләһенә абынып йәшәр кеше.

*1996*

## ӘЛФИӘГӘ

*(1996 йыл, 22 июнь. 45 йәшенә)*

В полдневный жар в долине Дагестана
С свинцом в груди лежал недвижим я.

*М. Лермонтов*

Ерҙе төтөн баҫҡан, ялҡын алған,
Шәрә күктә ҡояш – ут йомғағы.
Орел тигән яҡтың тупрағында
Салҡан ятам. Алйып күҙ йомамын.

Һыҙлау ҙа юҡ. Ғазап, һағыш та юҡ.
Күкрәгемдә бары тимер көйрәй.
Тәнем буйлап йылы ҡаным аға.
Тынлыҡ. Әсәм бишек йыры көйләй.

Йыр өҙөлдө. Миңә ҡағылып китте
Ғазраилдың ҡара ҡанат осо.
Һиҙәм, бына маңлайымдан һыйпай
Йәп-йәш әжәлемдең һалҡын усы.

Ерҙе ялҡын алған, төтөн баҫҡан,
Шәрә күктә ҡояш – ут йомғағы.
Һулышымдан яҙып, ҡаҡ битләүҙә
Салҡан ятам. Инде күҙ йомамын...

Ни мөғжизә?! Бер бөртөк нур төшөп
Ғазраилдың ҡара ҡанатына,
Шул саҡ ҡапыл, мине ташлап, осто
Яҡындағы мәхшәр тарафына.
Ул нур, балам, һинең өнөң булған.

*1996*

* * *

«Яҙыу» менән «Яҙмыш» бер тамырҙан,
Яҙыу яҙһам, гүйә, яҙмыш яҙам.
Ҡулға ҡәләм алып, күпме заман
Аҡ ҡағыҙҙы ҡараларға баҙам.

Йәнем аша уҙа бар ғаләмдең
Шатлыҡтары, бәлә-ҡазалары.
Йыр теҙәм тип, яҙа яҙмыш яҙһам,
Таман миңә тамуҡ язалары.

Аҡланыу юҡ миңә, ярлыҡау юҡ,
Дәлил түгел ваҡыт дәлилдәре.
...Мине аңдып тора Мәңгелектең
Туҡайҙары, Бабич, Йәлилдәре...

*1996*

* * *

Һыҡтамағыҙ, етер, башҡорт шағирҙары!
Беҙ бит – илдең майҙан тотор шағирҙары.
Беҙ илағас, бүтәндәргә нимә ҡала?
Һеҙгә эйәреп, бәләһеҙ ҙә бәлә һала.

Шағирәләр! Сеңләмәгеҙ инде, зинһар!
Өҫтәмәгеҙ был донъяға йәнә аһ-зар.
Күк сазының һеҙ бит – изге, саф ҡылдары,
Яҙғы таңдың моң һибеүсе былбылдары.

*1996*

* * *

Таң әтәстәре ҡысҡыра, —
Сәғәт нисәләр икән?
Беҙ эсәсәк шараптарҙы
Кемдәр эсәләр икән?

Ерҙә дауыл күтәрелде, —
Сәғәт нисәләр икән?
Беҙ кисәсәк даръяларҙы
Кемдәр кисәләр икән?

Күктә йондоҙҙар болара, —
Сәғәт нисәләр икән?
Бер донъянан икенсегә
Ниңә күсәләр икән?..

*1997*

## ТУКАЙҒА

Ун биш йәшем тулыр-тулмаç уҡ
Шиғриәткә килеп абындым.
Ун туғыҙҙа һиңә тағылдым.
Алтмыш өс йыл һиңә табынам,
Алтмыш өс йыл һине һағынам.

*1997*

* * *

*Әлфиәгә*

Иртә таңда, минең янда
Мең һандуғас һайраны,
Йырҙарының иң матурын,
Иң татлыһын һайланы:

Әл-фи-ә! Әл-фи-ә! Әл-фи-ә!!!

Болот тиште, ергә төштө
Бөгөн ҡояш нурҙары.
«Әлфиәкәй! Әлфиә!» – тип
Нурҙар ҡотлап йырланы.

«Әлфиәкәй, Әлфиә...» – тим,
Һин шатлығым, терәгем.
Ҡырҡ алты йыл «Әлфиә!» тип
Тибә минең йөрәгем.

Ҡоштар һайрар, ҡояш һаман
Нурҙарын һибер әле.
«Әлфиә» тип байтаҡ ғүмер
Йөрәгем тибер әле.

*1997*

## ӘСЕ ХӘТЕР

Дүртөйләнөң ҡалын урманында
Бар ине дүрт һоҡландырғыс нарат.
Исемдәрен хәҙер теҙеп әйтәм:
Хәниф, Рәзил, Флүр, Марат*.

Мал бүлешеп түгел, аң бүлешеп
Беҙ йәшәнек ғәмһеҙ күп замандар.
Донъя көтөүҙәре ышаныслы
Илдә барҙа бындай уҙамандар.

Был дүртәүҙән затлы ике ирҙе
Үтә тиҙ тарһынды донъя-йыһан.
(Шул уҡ йыһан аҙмы яуыздарҙы,
Аҙмы мөртәттәрҙе үҙенә йыйған.)

Юл яратты Хәниф. «Юл!.. Юл!..» — тине,
Йылдам уйы, сабыр хәрәкәте.
Тайғаҡ юлда, боролмала уны
Аңдып торған икән һәләкәте...

Рәзил таңды һөйҙө. Ҡасып-боҫоп,
Таң ҡошона тәүҙә таш аттылар,
Унан, үскә сәсәп, шул хаиндар
Йөрәккәйен таңда шартлаттылар.

Үлтереүселәр әле ҡасан ғына
Табындарҙың хәтәр шаулыһында
Маҡтай-маҡтай бокал күтәрҙеләр,
Түңкәрҙеләр уның һаулығына.

Дүртөйләнөң ҡалын урманында
Гел саф нарат, тинем, ул саҡтарҙы.
Күҙем күрһә, күңелем айырмаған
Тамырҙары серек уҫаҡтарҙы.

---

* Хәниф Вәлиев, Рәзил Мусин, Флүр Хәтмуллин, Марат Мухаяров — шағирҙың Дүртөйләләге дуҫтары.

...Ике дуҫым менән әүәлгесә
Таныш тауға менеп, усаҡ яҡтыҡ.
Ҡыҙыл ялҡын, күккә үрләмәйсә,
Ап-аҡ ҡар өҫтөндә илай ятып:

Касаларҙа – әсе хәмер,
Күңелдәрҙә – әсе хәтер...

Күҙ күреме етмәй дүрт тарафҡа
Ер өҫтөндә һаман йә ел, йә һил.
Усаҡ быҙлай. Йөрәк һулҡып һыҙлай:
– Рәзил, Хәниф – Хәниф, Рәзил.

*1998*

* * *

Донъя туҙҙы. Уны тиҙ үк
Һипләү кәрәк,
Ҡото китте, ибе бөттө,
Ипләү кәрәк.
Ремонт менән шөғөлләнмәй
Үҙе Алла.
Ипләү-һипләү бәндәләргә
Тороп ҡала.

*1998*

## МУСА ҒӘЛИГӘ

Ҡоштар киткәнен дә шәйләмәнек,
Сәйерерәк булды был көҙөбөҙ.
Әллә беҙҙе ҡапыл донъя баҫты,
Әллә моңһоу булдыҡ беҙ үҙебеҙ.

Ә шулай ҙа бөгөн дәрт иттек тә,
«Аҡ шишмә»ңә килдек, тартҡас аяҡ,
Сылтыр-сылтыр аҡҡан инеш өнөн
Тын да алмай тыңлай тирә-яҡ.

Ғаләм һүрән. Ҡояш инеп боҫҡан
Тәпәшәйгән күктең аҫтарына.
Һинең сәсең төҫлө аҡ томандар
Уралғандар ҡайын таждарына.

Аҡ томандар яманлыҡҡа булмаҫ,
Именлеккә быны, тим, юрайыҡ.
Әйҙә әле, бынау урман буйын
Яйлап ҡына икәү бер урайыҡ.

Ҡайындарҙың әле яҙҙар һайын
Илереп үк япраҡ яраһы бар.
Беҙҙең иһә аҡ томандар аша
Ап-аҡ ҡышҡа ҡарай бараһы бар.

Ныҡ булайыҡ, дуҫым, ҡар ярайыҡ,
Аяҡтар бит әле талмағандар.
«Аҡ шишмә»нең шифа һыуын эсеп,
Юҡ, һыуһындар әле ҡанмағандар.

*1998*

* * *

Йәшәй-йәшәй дусар булдым көлләһенә.
Был донъяның ҡыйыш-мыйыш көҙгөһөнә
Ҡарай-ҡарай, ғәрипләнде йөҙөм-күҙем.
Ҡыйратам, тип күпме тапҡыр алдым сүкеш,
Шөрләп ҡалдым — бер һелтәргә етмәне көс.
Селпәрәмә килермен, тип, бары үҙем...

*1999*

* * *

Килде-киттеле донъяға
Килдем дә китеп барам.
Бәндәмен. Шәт, буталғандыр
Хәләле менән харам.
Йәнем һәләк йомарт булды,
Аҡылым ғына һаран.

*1999*

## ТӨН

(Картина)

Урам бушап ҡалды. Кешеләрҙе
Өйҙәр йотоп бөттө берәм-берәм,
Шул өйҙәрҙең һүнгән күҙҙәрендә
Былт-былт нур балҡыны — шуны күрәм.

Бер мин генә торам буш урамда,
Буш ауыҙҙа яңғыҙ теш шикелле.
Аҙашҡан эт һаулап өрөп ҡуйҙы.
Уның бәхете лә бик икеле...

*1999*

## ҮҘЕМӘ ҠОБАЙЫР

Унда уйын уйнаным,
Ун биштә көс һынаным,
Утыҙҙа уй уйланым.
Ҡырҡымда мин ҡырҡылдым,
Иллемдә икеләндем,
Алтмышымда алҡындым,
Етмештә бер елкендем,
Һикһәнемдә һелкендем,
Туҡһан тулмаç туңҡайҙым.

Ни күрҙем дә ни белдем,
Таң атты ла кис килде.
Осто-кунды бер турғай —
Уҙған ғүмер шул, буғай.

*1999*

* * *

*Ҡулыева Гөлнисаға*

Тәбиғәттең илһамы юҡ быйыл...
Яумай үтә килгән болоттары.
Ҡыҫыр сәскәләрҙән шәрбәт эҙләп,
Тамам хәлдән тайҙы бал ҡорттары.

Донъябыҙҙың илһамы юҡ быйыл...
Замананың еле гел тиҫкәре.
Ил тотҡаһы булған ирҙәрҙең дә
Тиҫкәрегә сыға күп эштәре.

Илһамым юҡ быйыл...
Йәнем сырхау.
Сырхау йәнем менән ни ҡылырға?
Донъя һәм ил иҫән.
Йән үлмәгән.
Иртәгәгә кәрәк ынтылырға.

*1999*

* * *

*Әлфиәгә*

Донъям тотҡалары һирәк минең,
Һирәк булды минең таянысым.
Тыуғаныңдан бирле, аҡ фәрештәм,
Һин өмөтөм булдың, ҡыуанысым.

Бит Әлфиә* тигән исемең дә
Тәүге иртә, тәүге нур һымаҡ,
Һинең бер ҡарашың, бер ауазың
Изге доға, моңло йыр һымаҡ.

Минең өсөн һин һаман да сабый —
Хәсрәттәрҙән азат, хәүефтән...
Һоҡланып та һиңә, борсолоп та
Күңелем бишегендә бәүелтәм.

*1999*

* Ғәрәпсә «беренсе» тигән һүҙ.

## КЕМ ҠУНАҒЫ?

Ошбу донъяға юлыҡтым
Юрамал, уйнап ҡына.
Тәңре әйтте: «Ҡәҙерен бел,
Һин бында ҡунаҡ ҡына».

Ҡунағын ҡунаҡ тиһең дә,
Ә һуң кем хужам әле?
Кемдең түрендә ултырып
Йырымды һуҙам әле?

Юҡ, Тәңрем, мин ҡунаҡ түгел —
Әйтеп аңлатам башта —
Был Йыһанға мин дә хужа,
Һинең үҙеңдән башҡа.

Теҙ бөкләп тик ултырмайым,
Хәстәрҙәрем ап-арыу —
Һинең ҡулың етмәгәнде
Миңә ҡала башҡарыу.

Юҡ, Тәңрем, тик ултырмайым,
Йәнә аңлатып үтәм —
Был донъяға мин дә эйә
Һинең үҙеңдән бүтән.

Һин юҡты бар иткәндән һуң,
Ваҡыт бит уҙа төштө,
Һин яралтҡан донъябыҙҙың
Үҙәге туҙа төштө.

Үҙең бер ҡат төҙөгәнде,
Күрәм, һин һипләмәйһең.
Үҙең ипһеҙ ҡылған эште,
Күрәм, һин ипләмәйһең.

Был йәһәттән бар мәшәҡәт
Төшә минең елкәмә:
Һипләйем дә, ипләйем дә, —
Шуны, тим, һин белһәнә.

...Кунаҡ булһам, өс тәүлектән
Китер инем ҡурандан.
Юҡ, Тәңрем, мин донъялыҡтан
Улай тиҙ үк ҡуҙғалмам.

*1999*

* * *

> Ҡар һыуҙары ағып бара...
> Үкенмәйем үткәндәргә.
>
> *Муса Ғәли*

Эй йүгерә сылтыр ҡар һыуҙары,
Эй ашыға сабый йылғасыҡтар!
Шундай шаттар. Әйтерһең дә, улар
Осо-ҡырыйы юҡ, юлға сыҡҡан.

Мин борсолоп, моңһоу һорау бирәм:
— Күпме барыр икән ағышығыҙ?
Ни мәғәнә һеҙҙең был сәфәрҙән,
Нимә менән бөтөр яҙмышығыҙ?

— Бар мәғәнә шунда — беҙ ағабыҙ...
Эйе, бер саҡ тыныр тауышыбыҙ,
Йәки, ергә һеңеп, дым булырбыҙ,
Йәки даръя менән ҡауышырбыҙ.

Икһеҙ-сикһеҙ беҙҙең яҙмышыбыҙ,
Юҡҡа ғына һеҙҙең һағышығыҙ.

*2000*

* * *

*Әлфиәгә*

Мин үҙемә үҙем кәрәк түгел.
Хәҙер хәлдәр бына шулай тора —
Ҡайһы яҡҡа, ҡайҙа юл торорға
Юлдан яҙған юлаусынан һора.

Мин үҙемә үҙем кәрәк түгел.
Кәрәкмендер, бәлки, бер балама —
Оҙон-оҙаҡ ғүмерҙәрем буйы
Мине терәп торған бағанама.

Мин үҙемә үҙем кәрәк түгел.
Ғәмгә һала мине намыҫ, даным.
Кәрәкмендер, бәлки, әле һеҙгә,
Башҡорт илендәге туғандарым.

Мин үҙемә үҙем кәрәк түгел.
Кәрәк булһам ине бүтәндәргә.
Әйтһен ине бер саҡ әҙәми зат:
— Миңә кәрәк ине ошо бәндә...

*2000*

## БЫУАТ МЕНӘН ХУШЛАШЫУ

*Рәшиҙә Солтановаға*

Бәхиллек һора тарихтан,
Ҡанлы быуатым;
Бәхил бул, ярлыҡа беҙҙе,
Данлы быуатым.

Шайтан ҡоторһа, һин, шашып,
Күкте түңкәрҙең.
Хоҙай ҡушһа, һин әҙәмде
Күккә күтәрҙең.

Изге лә һин, яуыз да һин —
Бына ни затлы;
Үҙең гонаһҡа батҡанһың,
Үҙең сауаплы.

Һин — минеке, мин — һинеке,
Ике һыңар — бер.
Икебеҙ ҙә шыр яланғас,
Икебеҙ ҙә — сер.

Үҙемә үпкәм юҡ минең,
Һиңә юҡ зарым.
...Үҙем менән алам барын,
Ҡалдырам барын.

*2000*

* * *

Вино прозрачно, чище, чем вода.

*Амар Ибн Әл-Фәрид.*
*XIII быуат*

Ошо һүҙең раҫтан булһа, и, ғәрәп,
Беҙҙең хәлдәр булып сыға бит харап.

Имеш, шарап булған икән һыуҙан саф.
Ҡасан, ҡайҙа тороп ҡалды ундай саҡ?

Хәҙер араҡы әйләнде дегеткә,
Ағыуҙары үтеп инә елеккә.

Эсеп алһаҡ, күңел тиле, аң — ғәрип,
Бына шундай көнгә төштөк, Әл-Фәрид.

Донъя аға. Котолоу юҡ был яҡтан.
Заманалар шарапты ла болғатҡан...

*2000*

* * *

Бәрәкәтле тағы бер көҙ килде.
Килде гөрләп уҙыр туйҙар мәле,
Ҡыр ҡаҙҙары киткән күккә ҡарап
Хушлашыуҙар мәле, уйҙар мәле.

Һәр көҙ һайын бөртөк кенә йылым
Эйәреп китте ҡоштар төркөмөнә.
Ҡоштар ҡайтты яҙын. Әйләнмәне
Минең ғүмеремдең бер көнө лә.

Ҡайтмаһындар йылдар. Үкенмәйем.
Артта тороп ҡалды аһ-зарҙарым;
Ҡайтһалар ҙа йылдар, етмәҫ инде
Ҡабул итер өсөн көс-дарманым.

*2000*

* * *

Һана, яҙмыш, гонаһ-сауабымды,
Барлыҡ ҡылғанымды,
Тик үртәмә бинахаҡтар менән
Күңел ҡылдарымды.

*2000*

* * *

Сәбәпле лә, сәбәпһеҙ ҙә
Йөрәгем яна.
Бар өмөтөм һиндә, заман,
Ярамды яма.
Юҡ, ямама. Бит барыбер
Ҡаласаҡ йөйө.
Уҙыр юлымды уҙайым
Яралы көйө.

Пуляларҙан ауманым мин –
Шулай мәсьәлә.
Аяҡтан ғына йыҡмаһын
Мыҫҡыл... мәсхәрә...

*2000*

* * *

Китеп барһам, ҡан-ҡәрҙәштәр, һеҙгә
Нимә ҡалдырам, тип ҡаңғырам.
Түп-түңәрәк ер ҡалдырам һеҙгә,
Сатнамаған ҡояш ҡалдырам.

Янып торған ут ҡалдырам һеҙгә,
Ағын һыу ҡалдырып китәмен.
Ер һәм ҡояш, ут, йәнә һыу булғас,
Үҙегеҙ хәстәрләгеҙ бүтәнен.

Бына шуға өмөт итәмен.

*2000*

* * *

Ҡарайым, күрәм:
Донъя тутыға.
Хатта ҡояш та
Тутығып сыға.
Тутыға йәнем,
Тутыға аңым.
Етте, күрәһең,
Тутығыр сағым.

*2001*

* * *

*Дуҫтарым Ф. Т. һәм Й-ға*

Ратһағыҙ, мине яратығыҙ,
Кеше алдында әммә йән атмағыҙ.
Мине өнәмәгән әҙәмдәрҙә
Үҙегеҙгә асыу уятмағыҙ.
Үҙегеҙҙе, тимен, талатмағыҙ.

*2001*

## ҠАЗАН

Нишләп әле шулай килеп сыҡты? —
Үҙем дә һис аңламайым, Ҡазан.
Ғәзиз исемеңде тәүге тапҡыр,
Шиғыр итеп, аҡ ҡағыҙға яҙам.

Ә бит һиңә хайран ҡалғандан һуң
Ярты быуат ниндәй ғүмер аҡты.
Килгән һайын урыным — түр башында,
Йәнем-тәнем һый-хөрмәткә батты.

Төндәреңдә йондоҙҙарың, Ҡазан,
Йымылдашып күҙҙәремә баға.
Иҙел тулҡындары, иркә итеп,
Ярҙы түгел, күкрәгемде ҡаға.

Булды йылдар: шиғырҙарым һиндә
Ҡанатланды, һауаларға ашып,
Рухым иһә Камал сәхнәһендә
Үкһене лә, шатланды ла шашып.

Урамыңды күп тапаным, Ҡазан,
Ҡыҙмаса һәм... хатта айыҡ баштан.
Бер саҡ ҡапыл күҙ сағылып китте
Тимбикова затлы йәш Ҡояштан.

Тупрағыңа баҫҡан һайын, Ҡазан,
Яңа... туңа... минең бәғерҙәрем.
Бәғеремдә йәшәй иҫән дуҫтар,
Бәғеремдә — дуҫтар ҡәберҙәре.

Туфан, Фәйзи, Хәким, Ахун, Риза —
Ундар, йөҙҙәр күҙ алдымдан уҙа...
...Ерҙә һаман аҡ бурандар туҙа.
Күктәр, һаман күкрәп, йәшен һыҙа.

Таушалмаған һөйөүемде, Ҡазан,
Бышылдарға һиңә бөгөн баҙам.
Данлы исемеңде мәңгелеккә
Доға итеп яҙам: Ҡазан... Ҡазан...

*2001*

## ТАҢҒЫ СӘҒӘТ ИНЕ

Һандуғас балаһы кеүек
Шат йәшәйек донъяла.

*Йырҙан*

Бер саҡ Туфан менән таң еткерҙек
Май башында «Аҡҡош күле»ндә.
Ҡоштар һайрай, өҙөлөп һайрай ҡоштар —
Һәр береһе тик үҙ теләндә.

Нәҡ Туфанса мөлдөрәмә итеп,
Бокалдарға ҡойола ал шарап.
Офоҡ сите ҡапыл сайҡала ла,
Алһыулыҡҡа сума бар тараф.

Нурҙар эсеп, оторо ярһый ҡоштар —
Ғазапмы был? Былмы тантана?
Мин дуҫыма әйтәм: «Бөйөк шағир,
Шуға аныҡ яуап тапһана».

«Миңә мәғлүм түгел уларҙың, — ти, —
Ни шатлығы, йәнем, ни зары.
Күңелендә әле нимәләр бар, —
Ҡоштар шуны йырлай ни бары...»

Ошо булды яуап асылы —
Миңә ябай бер сер асылды.

*2001*

* * *

Ҡан ҡайғырып торам һеҙҙең өсөн,
Рауза, Булат, — Ерем менән Күгем.
Ни тип кенә йыуатайым һеҙҙе?
Кисәгенән яманыраҡ бөгөн.

Мин тейешмен бары һеҙҙең өсөн
Йөкмәргә был яҙмыштарҙың йөгөн —
Убылмаһын өсөн ошо Ерем,
Ҡоламаһын өсөн ошо Күгем.

*2001*

* * *

Көмөш бирһәң түрәгә —
хуп күрер.
Кәңәш бирһәң түрәгә —
төкөрөр.

*2001*

* * *

*Д. Б.*

Оҙон итеп һиңә хат яҙырға
Һаман әле, һаман йыйынамын.
Аҡ ҡағыҙға йәшем тамыр тим дә,
Ҡәләм алғас, тағы тыйыламын.

Яҙа алмам, ахыры, ҡулым бармай,
(Һис нәмәгә, хәйер, хаслығым юҡ).
Бары тик шул: аҫыл таштар итеп,
Алдарыңа сәсер шатлығым юҡ.

*2001*

## СӘФӘР

*(Шаян юлдар)*

Минең дуҫтар сит илдәргә бара,
Сәкыралар улар мине лә.
Хыялдары әйҙәй дуҫтарымды
Байрон йәки Тагор иленә.

*«Шагирҙарҙың тыуган ерҙәре»*
*Роберт Миңнуллин*

Бер ҡатлылар тура юлдан йөрөй.
Үлеп яратам мин урауҙы.
Йыйын йүнһеҙ билгә хәнйәр аҫа,
Ә мин тағам безле бырауҙы.

Парижға йә Римгә осҡан саҡта,
Төшөп ҡунам бер кис Шәммәттә.
Унан киткәс, ярапланды бороп,
Ҡушлауысҡа һуғылам, әлбиттә.

Күккә менгәс, түҙер әмәлдәр юҡ,
Сырҡыҙыны өҙөлөп һағынам.
Шунда сәй эсәм дә, кире китеп,
Әсәнгә лә мотлаҡ ҡағылам.

Ә Кәрмәткә төшөп мунса инәм,
Ҡояш бара икән байып та.
Былай булғас, аҡшам намаҙын
Уҡып әйтмәй булмай Айытта.

Зарығып көтөп торған Гете, Тагор,
Данте, Байрон, Элюар, Хикмәттәр.
Миңнуллинды күреп бер килһәм,
Әллә ҡайҙа, тимен, китмәҫтәр.
Коллегалар бит ғәйеп итмәҫтәр.

Минең дуҫтар экономить итә
Кеҫә тарафтары таҡырға,
Йылдар буйы аҡса йыя улар
Тура барып ҡына ҡайтырға.

Юл тотһағыҙ Лондон, Бишкәк,
Берлин, Бөрө, Дели, Ташкент яғына,
«Онотмағыҙ, татар шағирҙары,
Тыуған ерҙәр һеҙҙе һағына...»

*2001*

## Дуҫтарға Яңы йыл сәләмдәре

### НОҒМАН МУСИНҒА

Яҙмайым мин эсем көйгәнгә,
Яҙам халҡым мине һөйгәнгә.

### ХӘСӘН НАЗАРҒА

Бер китабын Мостай Кәрим ҡуйғас
Классиктар торған кәштәгә,
Байрон уны «дуҫым» тип маҡтана,
Пушкин һанай уны әшнәгә.
Назон* башын эйә: «Дан, аҙаш!» — ти,
Һуҡыр Гомер әйтә: «Замандаш!» — ти.

### МУСА СИРАЖИҒА

Беҙҙең Муса Сиражи
Шағир түгелме рази?
Валлаһи, тим, шағир ул,
Шағирлыҡта маһир ул.
Бер ҡараһаң, ут инде,
Бер ҡараһаң, мут инде,
Йыйып ҡына әйткәндә
Муса баламут инде.

### САФУАН ӘЛИБАЙҒА

Андерсен да Андерсен тип
Ҡатырмағыҙ ҡолаҡты,
Тиңдәше юҡ алышта
Уны күптән ҡолаттым.
Уй-өмөткә бирелеп,
Хәҙер торам самалап:
Мине шәйләр барыбер
Юлай улы Салауат.
Ҡылһа шундай изгелек,
Үҙе күрер игелек,

---

* Боронғо Рим шағиры Овидий Назон. Моғайын Назон — Назар исемдәре бер тамырҙан сыҡҡан, тип уйлайҙыр.

Ғәмәлдә мин татырмын
Игелекте иң элек,
Булыр һиңә мең сауап,
Зарыҡтырма, Салауат!

## РОБЕРТ МИҢНУЛЛИНҒА

«Талбишек»тә тирбәләһең,
Ҡояш балҡый түбәңдә,
Көнсығыштан Көнбайышҡа
Ер тәгәрәй түбәндә.
Ауыҙыңда – имеҙлек,
Күңелеңдә – изгелек.
Иблистәргә бирешмә,
Һинән сығыр фәрештә.

## РАУИЛ ФӘЙЗУЛЛИНҒА

Ҡыҫҡа шиғырҙарға оҫтамын –
Бер юллыҡты кисә осланым,
Рекорд ҡуясаҡмын бик тиҙҙән –
Шиғырым торор бары бер һүҙҙән.
Даһилыҡҡа, тимен, ни еткән?
Ҡуйоп ҡуям шиғыр, теләһәм,
«Мин» тигән бер бөйөк ишектән.

## ИРЕК КИНЙӘБУЛАТОВҠА

Мин – ирекмен! Минең ата-бабам
Ҡәҙимдәрҙән-ҡәҙим һәр яҡтан,
Әле арба тәгәрмәсһеҙ саҡта,
Улар инде дегет ҡайнатҡан.
Иң тәү башлап ошо дегет менән
Донъя ҡуласаһын майлатҡан.
Майлай торғас, тамам яйлатҡан
Быны хәҙер үҙем башҡарам,
Ышаныс юҡ минән башҡаға
Бөтәһен дә үҙем майлайым,
Үҙем яйлайым.
Вәт!

*2002*

* * *

Даһи үлтереп, даһи булып булмай.
Батша үлтереп, батша булалар. —
Был донъяла шундай йолалар.

*2002*

* * *

Тәндәрегеҙ ер ҡуйынына инде,
Йәндәрегеҙ балҡый һауала.
Өҫтөбөҙгә ҡара ҡайғы ауҙы
Был ҡайғынан юҡ шул дауалар.
...Күҙ йәштәре күктән яуалар.

*2002*

* * *

— Ҡайғың ауыр, әммә иламайһың,
Һинең кеүек түҙем ир һирәк.
— Иламауым сабырлыҡтан түгел,
Иларға ла, дуҫым, көс кәрәк.

*2002*

* * *

**Үҙем сығарған әйтемдәр**

Байҙың уйы — килемдә,
Ярлыныкы — илендә.

* * *

Астың күҙе — икмәктә,
Туктың күҙе — итәктә.

*2003*

* * *

В упор я крикнул солнцу...

*В. Маяковский*

Мин ҡояшҡа әйттем: «Эй, сыҡ! –
Күр, мин күптән аяҡ өҫтөндә».
Ул ишетте мине. Күҙен асты.
Нур уйнаны күктең түҫөндә.

Йәй ине был. Оҙон көн буйына
Икәү үттек байтаҡ араны.
Бер яңғыҙым тороп ҡалдым аҙаҡ,
Ә ул байыу яғын ҡараны.

Уға нимә? Көнлөк эше бөттө.
Миңә иһә һаман ваҡыт тар.
Төн йөҙөндә һөйгәнем килеп
Өҙөлөп тә һөйләр һүҙем бар.

*2003*

## РАУЗА ИҪТӘЛЕГЕНӘ

Кескәй генә бер күбәләк ине,
Донъялыкта донъя йәмләтте.
Тегендә лә һоро шәүлә булмаҫ,
Йәне уның биҙәр йәннәтте.

*2003*

## ИҪКЕ ШИҒЫР

Кисә генә телевизорҙан Валентина Терешкова күренеп ҡалды. Ул Йыһанға осҡан саҡта һыҙғылай башлаған шиғырымды ошо тәьҫир аҫтында ослап ҡуйҙым.

Ҡыҙ баланы күккә сөйҙөләр ҙә
Шашып ҡыуанышты бөгөн ир-ат.
Имеш, улар йәп-йәш фәрештәгә
Саф ҡоростан ҡуйҙы ике ҡанат.

Ә мин иһә, төн йоҡламай сыҡтым,
Япғыҙ осҡан шул һеңелде йәлләп:
— Йыһан сикһеҙ, аҙашырһың, — тимен, —
Кире борол! Унда түгел йәннәт.

Кире борол! Ҡанаттарың көйөр
Шул шәфҡәтһеҙ ғаләм елдәрендә.
Ҡайт! Мин көтәм, аҡ мамыҡтар түшәп
Һин талпынып төшөр ерҙәреңә.

*1963, 17 июнь — 2003, 26 июнь*

* * *

Кавказ тауҙарында буран икән.
Ҡарҙар ҡаплай дуҫтар ҡәберҙәрен.
Ҡайсын, Рәсүл! Ярты төндән бирле
Һеҙҙең хаҡта һыҡтай хәтерҙәрем.

Берегеҙ ағай, икенсегеҙ ҡусты —
Мин һаман да һеҙҙең урталамын.
Арағыҙға һыйынмаҡсы булып
Килке-килке һеҙгә үкталамын!

Кавказ алыҫ хәҙер. Етеп булмаҫ.
Ундай теләк аңға кермәһен дә.
Иҙел буйындағы ҡалҡыулыҡта
Урыным бар йәрем эргәһендә.

Ул үҙенә мине саҡыра.
Ҡар ҙа яуып тора саҡ ҡына...

*2004*

* * *

*Ренат Хариска*

*(иртәнге теләктәр)*

Көндөҙҙәрең хәрәкәтле булһын,
Булһын бәрәкәтле.
Төнгө йоҡоларың тыныс булһын
Алһыу таңға хәтле.

Йөгөң ауыр булһын, юлың оҙон,
Таҡыр, түтә булһын,
Алдарында әле башланмаған
Бәхет көтә булһын.

Олоһона, кесеһенә һаман
Һүҙең үтә булһын.

*2004*

## ЭКСПРОМТТАР

* * *

Ҡай берәүҙәр утыҙға ла етмәй
Туҡай, Бабич, Таҡташ булғандар.
Һикһән биштә мин тик Мостай Кәрим.
Ни ҡылайым инде, туғандар?

* * *

Хаттин ашып китте минең йәш —
Лев Толстой хәҙер энекәш.

* * *

Миңә теклəп тороп баға ла:
— Һаумы, дуҫ! — ти күҙле бағана.

*2004*

* * *

Был йәй ҡоро. Күккә ҡарайым да:
«Яуыр әле, — тимен, — яуыр әле».
Рухым һүнгән саҡта сабыр итәм:
«Яныр әле, — тимен, — яныр әле».

«Ҡара төндөң ҡарынында аҡ таң
Атыр әле, — тимен, — атыр әле.
Мәңгелеккә киткән кешем бер саҡ
Ҡайтыр әле, — тимен, — ҡайтыр әле...»

*2004*

* * *

Һинән башҡа ерем күкһеҙ, рухым үкһеҙ.
Һин өн түгел, һин төш хәҙер, уйым ғына.
Бөгөн төндө ай нурҙары, бөгәрләнеп,
Йомарланып һыйындылар ҡуйыныма.

Йоҡом ҡасҡан ошо һалҡын аяҙ төндә
Мин йылыһын тойҙом тулған ай нурының,
Үткәндәргә ҡайтып – килеп мең ураным,
Ҡуйынымда һинең йәнең, тип юраным.

*2004*

* * *

Урмандарҙа ышыҡ табырмын, тип
Күңелемдә өмөт яралды.
Ҡарурманға ҡояш төшмәй икән,
Шырлыҡтарҙың эсе ҡараңғы.
Далаларға сыҡһам, далалар тар,
Миңә икән анау тау кәрәк.
Ҡартлығыма, гүйә, үс иткәндәй,
Йәндәремә икән дау кәрәк,
Дау ғына ла түгел, яу кәрәк.

*2004*

* * *

Таланттарға донъя тар түгел ул,
Улар татыу — күркәм тамаша.
Киң донъяға һыя алмайынса
Талантһыҙҙар ғына талаша.

*2004*

* * *

Көндән-көнгә бойоғамын һаман.
Һүнә барам.
Һүнә барам.
Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, һүнеүемә
Күнә барам,
Күнә барам...

*2005*

## ЯҘ ХӘБӘРЕ

Тәүге тамсы тамды түбәнән...
Ә Ер шары шундай түңәрәк.

Унда океан, унда диңгеҙҙәр,
Тауҙар бейек, сүлдәр тигеҙҙәр.

Бөркөт оса, ашып ҡаяны,
Ҡояш тора күккә таянып.

Тик йыраҡ был тирә-әйләнәм –
Күҙем күрә, күңелем шәйләмәй.

...Тәүге тамсы тамды түбәнән,
Ҡанат ҡаҡты тәүге күбәләк.
...Ә Ер шары – алыҫ түңәрәк.

*2005*

* * *

Таң һыҙылыу менән сәфәр сығам
(Теләгемә үҙем эйәрәмен).
Зөһрә йондоҙ балҡып, оҙата килер,
Хәле булһа, ай ҙа эйәрер.

Таң һыҙылыу менән сәфәр сығам,
Елдәр иҫер, һөйөп арҡамдан,
Ғәм-ғөмдәрем артта тороп ҡалыр,
Шатлыҡтарым алыр алҡымдан.

Таң һыҙылыу менән сәфәр сығам,
Ергә теймәй барыр табаным.
Йыһанда дүрт юҫыҡ. Мин шуларға
Бер-бер артлы, һынап, бағамын.

Таң һыҙылыу менән сәфәр сығам,
Был ниәтем түгел һис юҡҡа.
Тик, кешеләр, өйрәтегеҙ мине —
Юл тотайым ҡайһы тарафҡа?!

*2005*

* * *

Ҡояш сыҡты ла төртөлдө
Манараға*.
Сиркәү ҡағырға кереште
Шул арала.

И ҡаға был. Нурға ҡушып,
Моңдар сәсә.
Бына шундай нәмә ҡылды
Ҡояш-Әсә.

Унан күсте мәхәлләбеҙ
Мәсетенә,
Аҙан һуҙҙы мосолмандар
Бәхетенә.

Уны тыңлай һәммә ғаләм
Хайран ҡалып:
Һауала – ҡош, тауҙа – йәнлек,
Һыуҙа – балыҡ.

Шаярмаҫ ул, әгәр ҙә ки
Ҡояш икән –
Был ғәмәлде үҙем күрҙем
Бөгөн иртән.

*2005*

* Бында — колокольня.

* * *

Эйе, булды: ваҡ-ваҡ яҙыҡ ҡылдым.
Үкенергә хәҙер сәбәбе бар.
Ә шулай ҙа тәүбә итеүҙәрҙең
Иманлы бер изге сәғәте бар.

# Тәрҗемәләр

## *Навоиҙан*

### Фәрхад һәм Ширин

### (өҙөктәр)

### ДҮРТҺАРАЙҘЫ БИҘӘҮ ҺӘМ ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУ

Был гранитта кем пероһын ҡайраған,
Шул бына низәр һыҙғылап ҡалдырған:

* * *

Шаһзадабыз өйгә ҡайтты был кис тә,
Йөрәгенә тынғы тапманы һис тә,
Ул гранит тамашаға хайран ҡалды,
Йөрәгенә мауығыу ҡаушау һалды.
Күпте белеүсе ҡарт булһа ла аҡыл,
Мауығыуға һис ҡарыша алмай ул.
Әйтерһең дә тауҙарҙа ер тетрәүе —
Ауып төштө төн ҡараһының тауы,
Һәм тәхетен ҡояш ултыртты тауға,
Күк йөҙө манылды мәрмәр буяуға.
Ҡояш менгәс күктең иң түбәһенә
Тамашаға ҙур Джамсид* сабып килә.
Ул саптырып бында табан атын ҡыуа,
Шул саҡта оҫталарҙа ҡаушау тыуа.

---

* Боронғо Иранда бөтә донъяны буйһондорған легендар батша.

Йылдам ҡараш ташлап ул һәр бер эшкә,
Туҡталмайса тиҙ генә сабып үтә.
Һәр кешенең һөнәренә күҙ һала.
Уның менән шул саҡ уртаҡ тел таба,
Нәҡ шулай оҫта теләккә ирешә,
Ҙур дәрт менән тағы эшкә керешә,
Һүҙҙәре дәрт өләшкәс һәр береһенә,
Ул китте оҫта Кәрин эргәһенә.
Ул тағы ла шул граниtҡа урынлашҡан,
Һәм ниҙер Кәрин юна ҡаты таштан.
Шунан һуң ул саҡыртты тимерсене:
«Кәйлә, сүкеш ҡоростан сүке», — тине.
Тимер ҡуллы тимерсе лә шунда уҡ,
Әйткән эшкә башланы ең һыҙғанып.
Утта ҡыҙған тимер, гүйә, яҡут таш,
Гүйә, ул аҡшам ваҡытындағы ҡояш.
Яһаны ул ҡоралдарҙың төрлөһөн,
Кәрин ҡабат һуғарҙы һәр береһен.
Һуғарып тотондо гранит соҡорға.
Һәм граниттан осоп торҙо оҫкондар.
Төрлө яҡҡа серле ҡараш ташланы,
Йәшерен һәм асыҡ эште аңланы.
Ул шул тиклем күп көндәрҙе белә,
Ул ҡушылһа эш мең тапҡыр йәмләнә.
Оҫтарыу өсөн ул гранит яныrға,
Әҙер ине, Фәрхад, өйрәнсек булырға.
Ҡай саҡ кеше һиҙмәһен тип ул эшен,
Ҡулға йәшерен ала ине сүкешен.
«Һә» тигәнсе шундай күп эш башҡара,
Бының өсөн бер йыл да аҙ башҡаға.
Хыяллана ине һәр саҡ төндәрҙә:
«Нисек һуң оҫтарырға был һөнәрҙә?»
Күк әйләнеүенә дүрт йыл тулған көндө,
Дүрт бик ҙур ожмах һарайы өлгөрҙө.
Кәрин эшләне тышҡы диварҙарын,
Мани һыҙҙы эстәге буяуҙарын.
Юғарыла әйтелгән буяу менән
Һүрәт яһаны һарайҙар эсенә.
Художниктың эше — ҡәләм тирбәтеү,
Ә ҡарап эшләтеүсенең — тиргәшеү.
Һәр һүрәтте Мани бөтөргәс яһап,
Артынан уҡ күсерә барҙы Фәрхад.

Һүрәттәрҙе ул бик йәһәт төшөрҙө,
Һәм эште лә кәрәгенсә төшөндө.
Эсен, тышын тамамлауға өйҙәрҙең,
Ул художник һәм ташсыға өйрәнде.
Һарайҙағы ошо өлкән ҡоролошта
Күрһәтмәһен һөнәрен күпме оҫта,
Фәрхад тапты һәләтен һәр бер эштең,
Һәр һөнәрҙә оҫта булып етеште.

* * *

Шулай итеп, бар һарайҙар ҡоролдо,
Йәннәткә хас баҡсалар ултыртылды.
Шундай булды бер һарай биҙәксәһе —
Эсе, тышы ал, гүйә, мәк сәскәһе.
Алһыу ине рәсемдәрҙәге йөҙҙәр,
Гүйә, улар гөл эсендә йөҙәләр.
Ал төҫтәге нәфис балаҫ һалынған,
Дивандарға ал ебәктәр ябылған.
Мейестәр ал, ал тәҙрә тотҡалары,
Ал буяулы ишек һәм тупһалары.
Күңелдәргә көс бирә, быуалар саф,
Тирәһендә аҫыл мәрмәр, яҡут таш.
Быуаларҙа ал шарап ята тулып,
Арыҡ буйлап аға ташырҙай булып.
Бөтә яҡта түтәлдәр гөл сәскәнән,
Бөтә ерҙә һибелә ал сәскәләр.
Һәр тарафта ал йөҙҙәр, ал нурланып,
Күңел аса, ебәктәргә сорналып.
Бер ситтәрәк йәшел баҡса — иҫ киткес,
Баҡсала йәйге һарай — шундай нәфис.
Гүзәл һарай йәшел төҫкә буялған,
Хатта унан күк йөҙө лә оялған,
Баштан-аяҡ ер йәшелгә кейенгән,
Туғайында кипаристар, сирендәр,
Ҡоштар-тутый, улар изге был төштә,
Кейемдәре йәшел, гүйә, фәрештә.
Уйнап йөрөй йәшкелт йөҙлө сибәрҙәр,
Кәсәләрҙән йәшкелт шарап һибәләр.
Уйнай һарай тирәһендә йәшел нур,
Иҙәне лә йәм-йәшел шыма фарфор.
Кипарисы түгел, хатта һәр үлән,
Оло шатлыҡ сәсеп тора йөҙөнән.

* * *

Көҙ буяуын алды бер һарайҙары, —
Еләҫ залдар зәғферән төҫлө һары.
Түбәләре һарайҙың алтынланды,
Ложалары офоҡтоң төҫөн алды.
Оҫта бында күрһәтте ҡәләм көсөн,
Алтынланы һарайҙың тышын, эсен.
Эстәге һүрәттәре рухҡа оҡшаш,
Түңәрәктәр тыштағы — нурлы ҡояш.
Алтын кирбес быуаһының ситтәре,
Ожмахтағы, гүйә, гәүһәр шишмәһе.
Был быуала аға һап-һары шарап,
Нурын сәсә ул ҡояшта ялтырап.
Һары шараптың быуала ағыуы —
Көҙгө розаларҙың хас болғаныуы.
Йөҙө нурлы һылыуҙар, ҡояш һымаҡ,
Гәрәбәнән кейенгән баштан-аяҡ.
Күргән кеше уларға була ғашиҡ,
Ғашиҡтан бит ҡотолоп булмай ҡасып.

* * *

Ә дүртенсе һарай нурға төрөнгән,
Гүйә, уға аҡ камфара һибелгән,
Һәм һарайҙың аҡ мәрмәр эсе, тышы,
Мәрмәр нәмә, бар ере яшма ташы.
Быуаһының яҡтылығы саф көмөш,
Ялтырап торған һыуы-тере көмөш.
Алебастр — арыҡтарҙың ян-яғы,
Әйтерһең дә, ҡаш аҫтында күҙ ағы.
Өлкән һарай аҡ ебәккә биҙәлгән,
Аҡ фарфорҙан унда бөтә иҙәндәр,
Көмөш һынлы ҡыҙ яҡтырта һәр залын,
Тәндәре хәс йәсмин япрағы,
Аҡ сәдәфкә оҡшай быуаның һыуы,
Саф ынйыға оҡшай һыу тулҡыныуы,
Шундай дүрт суратханала — дүрт һарай,
Һәр ҡайһы ожмах шикелле ялтырай.
Һарайҙарҙың түбәһе күктәрҙәй киң,
Биҙәктәрҙең һәр ҡайһы ҡояшҡа тиң,

Шундай гүзәл, гүйә, Эдем* баҡсаһы,
Ҡайҙа баҡса, Ҡәғбә** һымаҡ барсаһы.

* * *

Мүлк-араның ҙур тырышлығы менән
Эштәр еткәс бөтәһе үҙ еренә,
Берәм-берәм дүрт ауыр эш хаҡында
Үҙе килеп һөйләне ул хаҡанға.
Эш хаҡында һүҙен бөтөргәс вәзир,
Хаҡан үҙе ҡарарға китте хәҙер.
Һул яғынан килә аҡыллы вәзир,
Ул аҡылдың нурынан яҡтыра ер.
Уң яғынан бара шаһзада Фәрхад,
Шат ине шаһ, шаһзаданың күңеле шат,
Шаһ һәм Фәрхад, вәзир өсәүләп бергә,
Тәүге баҡсаны киттеләр күрергә.
Аттан төшөп һарайҙарҙы күрҙеләр.
«Был ер түгел, ә йәннәт, йәннәт», — тиҙәр.
Йөҙләгән ҡыҙыҡ күрҙеләр баҡсала,
Һарайҙарға ҡарап улар таң ҡала.
Беренсенән икенсе һарай матур,
Өсөнсөһө нәфисерәк ун тапҡыр.
Дүртенсеһен әйтергә етмәй әмәл,
Өсөһөнән ул күп тапҡырға гүзәл.
Бынығы матур, матурыраҡ тегеһе,
Ҡыҫҡаһы шул: гүзәл береһенән-береһе.
Хаҡан бирҙе оҫталарға күп бүләк,
Нәмә күп, алдылар күпме кәрәк.
Мүлк-араның дәрәжә артты тағы,
Киңәйҙе уға ихтирам ҡосағы.
Һәм тапшырҙы хаҡан Фәрхадҡа барын,
Баҡса, һарай һәм гүзәл хур ҡыҙҙарын.
Ойошторҙо ул күңелле һый-хөрмәт,
Барын һөйләргә телемдә юҡ ҡеүәт.
Әйтте хаҡан: «Мүлк-ара тиҙләт, тиҙләт!»
(Һәр һуңлауҙан сыға ул зыян-зәхмәт.)
Һәр һарайҙа, ваҡытына ҡарап йылдың,

---

* Әкиәттәге гүзәл баҡса.
** Мәккәләге храм.

Һый-хөрмәтең өс айлыҡ әҙер булһын.
Зирәк вәзир ишеткәс тә әмерҙе,
Бөтә көсөн ҡушылған эшкә бирҙе.
Асып хазина ишеген ян-яҡҡа,
Әҙерләне һый бер йыллыҡ ҡунаҡҡа:
Йөҙ баш йылҡы әҙерләне һәр көнгә —
Ә ҡуйҙарҙың иҫәбе етә меңгә.
Шуға лайыҡ ашамлыҡтар күптән-күп,
Төрлө төҫтә шараптары хуптан-хуп,
Бар йыһаздар ебәктәргә биҙәлгән,
Һәм келәм менән ябылған иҙәндәр.
Төрлө емеш — бында уның юҡ һаны,
Бында ҡытай һыйҙарының иң даны.

* * *

Ҡытай шарабына оҡшаш, бир шарап,
Мин ғашиҡмын был гүзәллеккә ҡарап,
Ҡытай иле, ҡотло булһын туйығыҙ,
Һыйланайыҡ беҙ ҙә, шарап ҡойоғоҙ!

## ҺАРАЙҘАРҘА МӘЖЛЕС ҺӘМ УЙЫН-КӨЛКӨ

Ҡояш Өлкәр йондоҙона еткәс тә,
Бөтә ерҙе ҡаплап ала гөл-сәскә.
Шул ваҡытта оҫталығын күрһәтә,
Биҙәп тәбиғәт киленде мешшатә[1]:
Сәстәренә һибә уның төн төҫөн,
Көндән яһай уның нәфис ал йөҙөн.
Көмөш ямғыр бөтә ерҙе сылата,
Розаларҙың ирендәрен дымлата.
Ҡыяҡлы гөл башын бөгә оялып,
Гүйә, тына, тәмле йоҡоға талып.
Ҡыяҡлы гөлдөң йоҡоһон күрәләр,
Һәм бөрөләр ҡыҙарғансы көләләр.
Татлы көлөргә теләһә бөрөләр,
Ул көлөүҙән ҡупшы роза өрөлә.
Шундай нәфис роза гөлөнә ҡунғас,
Зарын ҡоя ғашиҡ булған һандуғас.
Гөлдөң һөйөүен һорап, ул тилерә,
Ул ҡыҙара... Шулай ҙа был хаҡ түгел —

Һандуғастан һөйөлөүсе аҫыл гөл,
Ҡыҙартмай ул йөҙөн ҡыҙыл ҡан менән,
Ә йөрәге тулы тик ялҡын менән.
Бына шағирҙар нимә ти был хаҡта:
«Йәйен роза гөлө яна ҡыуаҡта».
Ел ҡуҙғатһа розаларҙың ҡанатын,
Төрлө яҡҡа осҡон һибә был ялҡын.
Әйтерһең дә ут ямғыры ҡойолған,
Ер ҡып-ҡыҙыл саҡҡыларҙан ҡойонған.
Был гүзәллекте һөйләргә фәҡир тел,
Һәр розаһы нәфислектә бер түгел.
Һибә моңон зарлы һандуғас һаман,
Нишләһен һуң? Ғишыҡ бит шундай яман,
Һыуынып барған эҫелек өҫтөнән
Осоп әйләнә ҡайғылы төҫ менән,
Тырыша ул гөлгә ҡанат елпергә,
Һүнгән утты теләй ул көйрәтергә.

* * *

Йәннәт төҫө ингәс гөл баҡсаһына,
Шаһ йүнәлде алтын һарай яғына.
Әҙерләнгән мөлкәт бында шундай күп,
Гөл баҡсаһы оялды уны күреп.

Һарай эсен биҙәй ал ебәк, бәрхәт,
Күккә тиң итеп яһалған ал тәхет.
Шаһ ултырҙы, эргәһендә шаһзада,
Яңаҡтары шараптан алһыулана.
Һый мәжлесен йәмләй ҡытай ҡыҙҙары,
Улар балҡый, гүйә, таң йондоҙҙары!
Ал төҫтәге шараб ҡоя аяҡсы,
Эсә халыҡ, тамсыһын ҡалдырмайсы.
Йырсы йырлай, ташып сыға дәртле моң,
Бындай моңға һандуғас тиңдәшме һуң?
Кипаристар шат япраҡтар ябынған,
Һәр тарафтан гөл һибелә табынға.
Эсте Фәрхад — шаһзада алһыу шарап,
Шатланды шаһ, унының йөҙөнә ҡарап.
Ул йөҙгә ҡарап онота шаһ үҙен,
Һөйөнөүҙән ҡаплай йәш ике күҙен.
Һәр ҡараштa уға мөхәббәт сәсә,
Ә өҫтөнә йә гөл, йә гәүһәр сәсә.

Ул ғынамы? Уға ғашиҡ бар халыҡ,
Ҡытай иле наҙлай ҡосаҡҡа алып.

* * *

Һәм йондоҙҙар әйләнеп күктә шулай,
Уҙҙырғансы ваҡыттарын нәҡ өс ай.
Шиңеп ҡойолғанға тиклем гөлдәре,
Алһыу шарап эсеп үтте көндәре.
Килеп елдең көсләһә һәм бөркөүе,
Розаларҙы өҙөп ергә бөркөнө.
Бар розалар күмелделәр тупраҡҡа,
Ә ағастар күмелделәр япраҡҡа
Туғайҙары эмалдән кейенделәр,
Эмаль ни ул, күк төҫөнә инделәр.
Һәр һуҡмаҡта кипаристар кәүҙәһе,
Гүйә, улар Фәрхадтың үҙ шәүләһе.
Һәр ағасын кипарис, уҫаҡ тимә.
Был кипарис уҫаҡҡа өлгө генә,
Япраҡтары уның тутый ҡош йөнө,
Ағастары тауисҡа оҡшаш ине.
Япраҡ ярыу, йәш йөн сығарыу кеүек,
Ә ағастың йәшәреүе — таж кейеү.
Әгәр ағас булмаһа, бар тауисы,
Һыңар аяклы ғына һуң ни өсөн?
Һиҙепмелер үҙенең йоҡо сағын,
Ҡанатына йәшергән бер аяғын.
Алтын әфлисун — ағастың емеше,
Көмөш сыңы — япраҡтар елпенеше.
Һәр ботаҡҡа үрмәле гөл уралған,
Ул һөйгәнен, гүйә, ҡосаҡҡа алған.
Йәшел бөркәнсек — болондоң һәр төшө.
Ә йылғалар — таҫманың да көмөшө.
Шыма көҙгө — бында һыуҙарҙың өҫтө,
Унда төшкән шәүләләр тутыҡ төҫлө.
Ул һыуҙар бит, аңла — баҡсаның йөҙө,
Аңла, улар күк өсөн зәңгәр көҙгө.
Йылдың донъя йәмләнгән был мәлендә,
Йәшәргәс ут офоҡтоң ситтәрендә,
Хаҡан килеп зәңгәр гөлдәр яғында,
Мәжлес ҡорҙо шул йәшел туғайында.
Шарап эсте һарайҙың күкһелендә,

Күктең хатта онотоп күклеген дә.
Хаҡан менән Фәрхад кейеп күк биҙәк,
Ултырҙылар Ҡытайҙың тәхетен биҙәп.
Бөтә ерҙә һылыуҙар көмөш түшле,
Кейем йәшел — япраҡлы ағас төҫлө.
Ҡыҙыл шарап асыҡ йәшел кәсәлә —
Гүйә, туғай уртаһындағы ләлә.
Зәңгәр бокалдарҙа шарабтың алы —
Гүйә зәңгәр күктәге йәйҙең таңы.
Табын теләгенә таратты ҡарап,
Аяҡсылар татлы һәм әсе шарап,
Ашамлыҡтың бирҙеләр иң яҡшыһын,
Бая әйтеп киткәнемсә, татлыһын,
Булдылар эмаль һарайҙа нәҡ өс ай,
Шарап эсеп, күңел астылар шулай.
Күк йөҙөндә гәрәбәләнгәс ҡояш,
Булғас баҡса саф гәрәбәгә оҡшаш,
Һары ялҡын ҡаплап алғас баҡсаны,
Елдәр туҙҙырҙы чинарҙың япрағын.
Ел ҡапланы һыуҙарҙы ялҡын менән,
Һыу ҡылысын биҙәне алтын менән.
Осҡон сәсә япраҡтарҙың ялҡыны,
Гүйә, һибелә шаһтың иң саф алтыны.
Ғазаплы йөҙ төҫлө булды талдары,
Бөтәһенә, әйтерһең, булған һары.
Бер һары ҡош — һәр ағасы баҡсаның,
Тик көтә ул йыраҡҡа осор сағын.
Осор өсөн ул ҡанат елпеп ҡуя,
Ел тирбәтеп, уның япрағын ҡоя.
Аҡшамдан һуң иҫкән еләҫ көҙ еле
Япраҡтарҙы ал нурға мана ине.

Алтын иреткән яҙмыштың хужаһы;
Шул алтынға манылған көҙ донъяһы.
Был эште ул башҡарҙы шундай яҡшы —
Саф алтынға батырҙы һәр япраҡты,
Алтын һарай ҡояш миҫалы бында,
Һары япраҡ — йондоҙҙай һәр яғында,
Йылдың гүзәл ваҡыты ергә асты йөҙ,
Сөнки һәр саҡ балҡыны ҡояш, йондоҙ,
Шундай гүзәл саҡта шаһ һәм шаһ улы
Иттеләр был ерҙе мәжлес урыны.

Зәғферәндәй һары ебәк кейҙеләр,
Гүйә улар көҙ ҡояшы инеләр.
Алтын һауытта шараптың иң йәше
Һарылыҡта шыйыҡ алтын тиңдәше,
Иҙән алтын, алтын һарай түбәһе,
Алтын һауыт, шарап — алтын бөтәһе.
Һарайҙа алтын йыһаз һәм кейемдәр,
Һәр биҙәге йондоҙға оҡшаш гәүһәр.
Йыры йырсының күңелде шаштыра,
Тауышын ул алтын күккә аштыра,
Табында емеш — лимон һәм әфлисун,
Ә айваға бында сама бармы һуң?
Уйын-көлкө бында шундай күп ине,
О, күп тимә, уға иҫәп юҡ ине.
Был һарайҙа ла булдылар нәҡ өс ай,
Шарап эсеп күңел астылар шулай.
Япраҡтарҙы сәсте елдең көслөһө,
Мәрмәрләнде терегөмөш һыу көҙгөһө
Һауа һоро тун ябынды болоттан,
Терегөмөштө һиптерергә болоттар.
Декабрь тап көмөшсөләй эшләне,
Һалҡын һыуҙың өҫтәрен көмөшләне.
Болоттарҙан тамған һәр һыу туҙаны,
Ынйы булып, бар Йыһанды биҙәне.
Арыҡтағы һыуҙар хәнйәргә оҡшаш,
Ә өҫтәре яҡты ынйынан тоташ
Ниһайәт, күк төндө күмер яһаны,
Киске шәфәҡ нуры көйрәтте уны.
Ай шишмәһе һәр төн һайын һипте боҙ,
Һәр туҙаны ул боҙҙоң булды йондоҙ.
Быялаланды һалҡындарҙан ер йөҙө,
Быяла ни ул — ерҙә яп-яҡты көҙгө.
Уттың эҫелеген һалҡын урланы,
Уҫал түгел инде ут саҡҡылары.
Утлы күмер, әйтерһең, таҙа ахаҡ,
Һалҡында ул розаның сафы һымаҡ.
Һалҡынлыҡта ҡыҙыл ут та — роза гөл,
Ә төтөнө — розаларҙағы сөмбөл*.
Килде һыуыҡ көндәрҙең иң зәһәре,
Таш булды һыу ебәгенең зәңгәре.

* Сөмбөл — гөл, үҫемлек.

Тын менән ҡыуа фәкир ҡыш һыуығын,
Күкрәгенә ҡыҫа ике тубығын.
Ҡуйынына тыға туңған ҡулдарын,
Яурынын баштан күтәрә юғары.
Риза булмай ҡояш һалҡын нурына,
Сәсә камфара яҡтылыҡ урынына.
Камфараға оҡшаш ер ҡары менән.
Гәлсәргә хас һауа боҙҙары менән,
Аҡ кейемдән кейенгән һәр береһе,
Эстән кейгәндәр йылы тейен тиреһе.
Аҡ һарайға тағы ҡунаҡтар килде,
Табын шундай — гүйә, йондоҙ һибелде
Ҡытай һылыуҙарының юҡ иҫәбе,
Улар наҙланып алалар кәсәне.
Ҡытай фарфорынан гүзәл кәсәләр
Камфаралай яҡты, аҡ нур сәсәләр.
Һөйләнде, бел, был мәжлестең ҡиммәте,
Тик йөҙ тапҡыр артыҡ ине зиннәте.
Әйткәнемсә, мәжлестә шатлыҡ ине,
Ул әйткәндән йөҙ тапҡыр артыҡ ине.

* * *

Тағы уйын-көлкөлә үтте өс ай,
Фәрхад нурынан биҙәлде дүрт һарай.
Маҡсаты шул ине уйын-көлкөнөң:
Шаһзаданың шат итеү ине көнөн,
Шарап бирһен шаһзадаға йыуаныс,
Минут һайын арта барһын ҡыуаныс.
Ләкин ул һис үҙгәртмәне ҡылығын,
Тәҡдирҙе үҙгәртеү мөмкинме һуң?
Аһ-зар менән тулы һулышы, һүҙе,
Һәм һағышлы күңел көҙгөһө — күҙе.
Әгәр берәү илаһа, ул илаһы,
Кеше ҡайғыһы йөрәген талаңы.
Томаланы утлы ҡуҙ уның башын,
Һалҡын һауа утлы итте һулышын!
Кеше ҡайғыһы яндырҙы йөрәген,
Ватыҡ ҡапҡа күрһә, ватты күкрәген.
Һөйләһәләр уға һөйөү тарихын,
Ҡат-ҡат ҡабатлата ине барыһын.
Һораша ул мөхәббәттең һәр төрөн,

Йөрәгендә һаҡлай мөхәббәт серен.
Һөйөшкәндәр ҡушылһа, ул шат була,
Һәр аҡылы ҡайғынан азат була.
Айырылыуҙы ишеткәндә ҡолағы
Ҡанлы йәштәр түкте, оҙаҡ иланы.
Ҡарағас та хаҡан үҙенең эшенә,
Бар эшенең хатаһына төшөнә.
Үҙ хәленә үҙе ул хайран ҡалды,
Ҡаушаны һәм йөрәген ҡайғы алды.

* * *

Мин дә ҡаушаным, аяҡсы, бир кәсә,
Табын көтә, табынға ебәр кәсә.
Әгәр мөхәббәт йөрәккә һалһа ут,
Һалҡын шараптан башҡа һис дауа юҡ.

*1484*

*Гётенан*

## МАЙ ЙЫРЫ

Яҡтыра, balҡый
Ғәжәйеп донъя.
Ҡырҙар йылмая
Ҡояш нурында.

Бәүелә гөлдәр
Сәхрә еленә,
Ҡыуаҡтар һайын
Моңдар һибелә.

Һәр бер йөрәктән
Сыға шат ауаз:
О, ҡояш, һауа,
О, бәхетле яҙ...

Биҙәй алтын таң
Болоттар йөҙөн —
Мин төҫөн күрәм
Яҙғы һөйөүҙең.

Ниндәй шәфҡәтле,
Йәм-йәшел ялан,
Йәшәү һулышы
Ерҙе солғаған.

Күҙ нурҙарыңдың
Беләм ҡәҙерен,
О, һине нисек
Һөйәм, бәғерем...

Шулай һөйә ҡош
Алһыу таң йырын,
Иртән уянған
Сәскәләр тынын.

Ҡанды ҡайнатҡан
Был яҙғы һулыш

Ҡайтарҙы миңә
Йәшлек һәм тормош.

Был яҡты яҙ бит —
Һинең бүләгең.
Аҡ бәхет һиңә —
Бөтә теләгем!

*1771*

## *Пушкиндан*

* * *

Һирәк болоттар теҙмәһе ағылды.
Киске йондоҙ, моңһоу йондоҙ, ҡабындың!

Һин даланы көмөш нурға күмәһең,
Тын күлде һәм ҡара ҡая түбәһен.

Яратам мин күктәге аҡ нурыңды;
Уятты ул ойоп торған уйымды.

Таныш йондоҙ балҡығаның иҫемдә
Күңелем һөйгән тыныс илдең өҫтөндә,

Унда зифа тополь күккә үрелә,
Кипаристар йоҡлай, гөлдәр өрөлә,

Татлы шаулайҙар тулҡындар көндөҙөн.
Унда бер саҡ уйға батып бер үҙем

Йөрөнөм диңгеҙ буйында, тауҙарҙа...
Һәм өйҙәргә төн шәүләһе ауғанда.

Эҙләне һине эңерҙән йәш бер ҡыҙ,
Һәм исемен һинән алды ул йондоҙ.

*1821*

* * *

Ҡоҙғон килә ҡоҙғонға,
Һәм шулай ти ул уға:
«Алаһы ине тамаҡҡа?
Ни тиерһең шул хаҡта?»

Ҡоҙғон әйтә ҡоҙғонға:
«Беләмен, һый бар унда,
Киң яланда, был яҡта
Батыр мәйете ята.

Кем үлтергән һәм ниңә,
Ыласын ғына белә,

Һәм белә ҡара аты,
Һәм дә белә йәш ҡатын.

Ыласын урманға осҡан,
Атты атланған дошман,
Ҡатын көтә һөйгәнен,
Иҫән ҡайтып килгәнен».

*1828*

## ДОН

Киң ҡырҙар аша ялтырап,
Аға Дон!.. Күрсе йәмен!
Килтерҙем, Дон, һиңә йыраҡ
Улдарыңдың сәләмен.

Бар йылғалар һине, Дон,
Туған күрә, дуҫ күрә.
Алыҫ Евфрат һәм Аракс
Һиңә сәләм ебәрә.

Дошман ҡыумай инде арттан;
Алыҫтан, әллә ҡайҙан
Һиҙеп туған ерҙе, аттар
Һыу эсә Арпачайҙан.

Әҙерләп ҡуй, Дон, үҙеңдең
Батыр улдарың өсөн
Алтын шарабын йөҙөмдөң, —
Ҡайнап торған әсеһен.

*1829*

## *Лермонтовтан*

### ТЕЛӘК

Ниңә мин ҡош, ҡыр ҡоҙғоно түгел икән
Әле генә минең өҫтән осоп үткән.
Ниңә күктә ҡанатымды йәйә алмайым,
Ә ниңә һуң ул иректе һөйәлмәйем?

Осор инем көнбайышҡа, көнбайышҡа
Бабамдарҙың ҡыры сәскә атҡан төшкә.
Томанлы тау, буш һарайға ҡалған бары
Бабамдарҙың онотолған туҙандары.

Бик боронғо стенала – мираҫ ҡалған
Һәм тутыҡҡан ҡылыстары эленеп ҡалған.
Ҡалған ҡылыс өҫтөнән мин үтер инем,
Ҡанат менән туҙандарын елпер инем.

Шотланд арфаһы ҡылдарын сиртер инем,
Уның тауышы алыҫ күккә етер ине;
Берәү тыңлар, берәү менән уятылыр
Һәм ул тауыш яңғырар ҙа, ҡапыл тыныр.

Хыялдар буш, ялбарыуҙар юҡҡа бары
Был яҙмыштың ҡаты ҡанунына ҡаршы,
Арабыҙға һөйгән ватан менән минең
Тулҡындары йәйеләләр диңгеҙҙәрҙең.

Һуңғы нәҫеле батыр боецтарҙың бында
Яңғыҙ шиңә алыҫ ерҙең ҡырауында.
Бында тыуҙым, ләкин мин ят йәнем менән...
О, ниңә мин ҡыр ҡоҙғоно түгел икән...

*1831*

### ТЕРЕК БҮЛӘКТӘРЕ

Олой Терек, ҡырағай, уҫал,
Өлкән ҡаялар буйлап,
Дауылға оҡшай илауы,
Йәше оса туҙан булып.

Ләкин далала йүгереп,
Ингән хәйләкәр йөҙгә
Һәм, сәләмләп, иркәләнеп,
Гөрләй Каспий диңгеҙгә:

«Рөхсәт ит, о ҡартлас диңгеҙ,
Ас тулҡыныма ҡосаҡ,
Иркендә күп йөрөнөм мин,
Етте ялға тыныр саҡ.
Мин Казбек янында тыуҙым,
Болот күкрәгеп имдем,
Кешенең ят хакимлығын
Еңергә әҙер инем.
Улдарыңа йыуаныстҡа
Бөлдөрҙөм дарьямды,
Суйыр таштар төркөмөнән
Биҙәнем ярҙарыңды».

Тик, текә ярға һөйәлеп,
Тонйорап Каспий тына,
Иркәләнеп Терек ҡарттың
Геүелдәй ҡолағына:

«Һиңә, ағай, бик ҡиммәтле
Бүләк алып килдем мин,
Һуғыш ҡырында йығылған
Ғәйәр егет кабардин.
Ул зиннәтле кольчугала,
Еңе ҡоростан ҡойолған
Һәм Ҡөрьәндән изге шиғыр
Алтын менән яҙылған.
Асыулы ҡаш йыйырҙы ул,
Мыйығының остарын
Ҡыҙарттылар ҡайнар ҡандың
Саф, изге тамсылары.
Яуапһыҙ асыҡ ҡарашы
Иҫке үс менән тулы,
Иңе буйлап ҡара сәсе
Ишелә, толом булып».

Йомшаҡ ярға һөйәлгән
Каспий бүлмәй йоҡоно.

Тулҡынланып уҫал Терек
Ҡартҡа ҡабатлай шуны:

«Тыңла, ағай, хаҡһыҙ бүләк!
Бар бүләктәрҙән өҫтөн,
Мин уны бөтә донъянан
Йәшерҙем быға тиклем.
Йәш казачканың мәйетен
Һиңә илтә тулҡындарым,
Күрерһең һин аҡ муйынын
Һәм ҡоңғорт толомдарын.
Йөҙө томанлы, ул йоҡлай
Ҡарашы тын, ҡайғылы,
Күкрәгенә ал яранан
Ағып төшә ҡан юлы.
Һағынмай был йәш гүзәлде,
Йылғаға күҙен текәп,
Гребенской утарында
Тик бер генә казак егет.
Төнөн һуғышҡа сыҡты ул,
Эйәрләп ҡара атын,
Уҫал чечен хәнйәренән
Юғалтты шашҡан башын».

Асыулы ташҡын шымды һәм,
Ҡырау төҫлө ағарып,
Туҙылған толомло бер баш
Тирбәлеп үтте ағып.

Ҡеүәтле йәшен булды ҡарт
Хакимлығы нурында,
Һәм тонған зәңгәр күҙҙәре
Төрөндө дәрт дымына.

Ул уйнаны, шатлыҡ тулы —
Йүгерек тулҡындарҙы
Һуҡраныулы һөйөү менән
Үҙ ҡосағына алды.

*1839*

## МЦЫРИ*

*Поэма*

Вкушая, вкусих мало меда и се аз умираю

*1-я книга Царств*

1

Бер нисә йыл бынан элек,
Ике татыу һеңел кеүек,
Арагва һәм Кура бергә
Шаулашып ҡушылған ерҙә
Монастырь ине. Хәҙер ҙә
Үтһәң, тау аша күрәһең,
Емерек ҡапҡалар тирәһен,
Башня һәм сиркәү түбәһен.
Тик кадило сәсмәй инде
Хуш еҫле изге төтөндө.
Йырламай төнгө сәғәттә
Ғибәҙәт ҡылған монах та,
Хәҙер тик бер сал ҡарт ҡына
Харабаны һаҡлап тора.
Үлем дә уны оноткан,
Халыҡ хәтеренән сыҡҡан,
Тик ҡәбер ташына баға,
Ундағы туҙанды ҡаға.
Таштағы яҙмалар һөйләй
Үткән көндәрҙең данын һәм
Нисек шашып тәхете менән
Фәлән батша, фәлән йылда
Халҡын Рәсәйгә тапшырған.

Хоҙай бәрәкәтен бирҙе
Грузияға! Сәскәләнде
Күләгәле гөл бағында,
Дуҫтар штыгы һағында, —
Дошмандан ҡурҡыу юҡ унда.

---

* Әҫәр шағир Сәләх Кулибай менән берлектә тәржемә ителгән.

2

Рус генералы бер заман
Тифлискә үтте тауҙарҙан:
Тоткон бала илтә ине ул,
Сирләне бала. Алыҫ юл
Ғазабына сыҙаманы,
Уға алты йәш самаһы,
Ҡырыҫ, гүйә, ҡыр кәзәһе,
Ҡамыштай, йомшаҡ кәүҙәһе.
Ләкин ғазапҡа һәм сиргә
Өйрәткән уны түҙергә
Ата рухы. Ялбарыуһыҙ,
Интекте ул, тауыш-тынһыҙ
Йомолдо бала ирене,
Ашамлыкты ҡаҡты кире,
Тын һәм ғорур үлер ине...
Бер монах ҡыҙғанып шул саҡ
Ауырыуға асҡан ҡосаҡ.
Ул шул изге йортта ҡалған,
Монах үлемдән ҡотҡарған.
Ят күреп ул йыуанысты,
Башта барынан да ҡасты,
Яңғыҙы йөрөнө өнһөҙ,
Шәреҡкә ҡарап, өҙлөкһөҙ
Билдәһеҙ һағышта янды —
Ул тыуған илен һағынды.
Ләкин тотҡонлоҡҡа күнде,
Аңлай башланы ят телде;
Рәһәб суҡындырҙы уны
Һәм, белмәй шаулы донъяны,
Теләне ул өлгөргәстен
Бирергә монах вәғәҙәһен
Ул ҡапыл бер саҡ юғалған
Көҙгө төндә. Урап алған
Тау буйҙарын урман — ҡуйы,
Эҙләүҙәре өс көн буйы
Юҡҡа... тик һуңынан уны
Яландан һушһыҙ тапҡандар,
Яңынан алып ҡайтҡандар;
Ябыҡҡан йөҙөндә нуры

Ҡалмаған эштең ауыры
Сир, йә аслыҡ ғазаплаған;
Һораузарҙан баш сайҡаған,
Һәр көн һайын шиңә барған;
Һәм яҡынайған әжәле,
Ҡаты өгөтләп, инәлеп,
Монах килгән уға шул саҡ,
Һәм ауырыу ғорур тыңлап,
Көсөн йәйеп, торған да икән,
Шулай оҙаҡ һөйләп киткән:

3

«Тыңларға килгәнһең икән
Һин тәүбәмде, хөрмәт итәм.
Яҡшыраҡ, кемгә булһа ла
Һөйләһәң, күңел бушана.
Рәнйетмәнем кешеләрҙе,
Шуға ла минең эштәрҙе
Белеү һеҙгә бик аҙ файҙа,
Ә йәнде һөйләр һүҙ ҡайҙа?
Йәшәнем аҙ... тотҡонда мин,
Булдыра алһам, бирер инем
Бер ғауғалы ғүмер өсөн
Шундай йәшәүҙең икеһен.
Тик бер уйҙа янды йөрәк,
Эйе, тик бер ялҡынлы дәрт,
Ҡорт булып, йәнде кимерҙе,
Йәшәне, мәңге көйҙөрҙө.
Ул хыялымды саҡырҙы,
Ташлап тынлыҡ, ғибәҙәтте,
Ғауғалы һәм мәшәҡәтле
Башҡа донъяға килергә,
Ҡайҙа болот — төркөм, төркөм,
Ҡайҙа кеше — азат бөркөт.
Был дәртте ҡара төндә мин
Йәш менән тыуҙыра инем,
Тыңлаһын күгең һәм ерең
Мин ҡысҡырып әйтәм уны,
Һорамайса ярлыҡауҙы».

4

«Ҡарт! Күп тапҡыр ишеттем мин,
Үлемдән ҡотҡарғанһың һин, —
Ниңә?.. Яңғыҙ, уҫал йөҙлө,
Йәшен өҙгән япраҡ төҫлө,
Үҫтем тынсыу ҡараңғыла,
Яҙмыш — монах, күңелем — бала.
Әйтә алманым һис ҡасан
Изге һүҙҙәр: атам, әсәм.
Шул исемдәрҙән, беләмен,
Һин биҙҙерергә теләнең
Тын монастырь тарлығында.
Тик юҡҡа: тыуған сағымда
Уларҙың өнө янымда
Тыуҙы. Күрҙем башҡаларҙың,
Ватан, өй, дуҫ, туғандарын,
Ә тапманым мин үҙемдә
Яҡындарҙың ҡәберен дә!
Юҡҡа йәш түкмәйсә шул саҡ
Күңелгә бирҙем ныҡлы ант:
Булһа ла бик аҙ ваҡытҡа
Яныусы күкрәктәге утты
Башҡа күкрәккә ҡыҫырға,
Ҡаты һағышты баҫырға.
Бушҡа... ул хыялдар инде
Шул гүзәл көйөнсә үлде,
Һәм мин дә ят ерҙә, беләм,
Ҡол һәм етем булып үләм».

5

«Мине ҡәбер һис ҡурҡытмай,
Унда, тиҙәр, ғазап йоҡлай.
Сыға алмай һалҡын тынлыҡтан,
Тик китеү ауыр тормоштан.
Мин йәш, йәш... ә белдеңме һин
Хыялын ярһыу йәшлектең,
Оноттоңмо, белмәнеңме,
Янғаныңды, һөйгәнеңде,

Ситтәге бейек башнянан
Ҡояш, ҡырҙы күреү менән
Йөрәгең нисек һуҡҡанын,
Һауаһы саф, һәм ҡай сағын
Тәрән стеналар төбөндә
Балаһы билдәһеҙ илдең —
Ултыра ул йәш күгәрсен,
Ҡулына һуғыр, тип йәшен?
Шыҡһыҙ һиңә был гүзәл ер,
Сөнки һин сал, зәғиф хәҙер;
Теләктәрҙән дә биҙгәнһең.
Ни зыян? Һин йәшәгәнһең!
Онотор нәмәң бар һинең
Донъяла. Һин йәшәгәнһең,
Мин дә шулай йәшәр инем».

6

«Беләһең киләлер һинең
Иректә күргәнде минең —
Күрҙем ҡырҙар иркенлеген,
Бөтә яҡты солғап алған.
Шат төркөм булып шаулаған,
Татыу дуҫтарға оҡшаған
Урмандың тажы ҡаплаған
Ҡалҡыулыҡты,
Ташҡын айырған саҡта мин
Күрҙем ҡаялар төркөмөн,
Аңланым улар фекерен,
Ул миңә бирелде күктән!
Һауала һуҙылған күптән!
Ул һалҡынайған таш ҡосаҡ.
Һәм ҡауышыу теләй һәр саҡ
Ләкин саба көндәр, йылдар,
Тик ҡауыша алмаҫ улар,
Күрҙем тау һырттарын, бейек...
Улар азат, хыял кеүек
Таңдар һыҙылған сағында,
Зәңгәр күктең ҡосағында
Быҫҡыйҙар, алтарҙәй булып,
Һәм болот артынан болот

Ташлап серле ҡуналҡаһын
Шәреҡҡә тота юл башын;
Ап-аҡ каруанға оҡшаштар
Йыраҡ илдән килгән ҡоштар!
Күрҙем томан аша, алыҫ:
Ап-аҡ ҡарлы, гүйә, алмаз,
Сал һәм ҡаҡшамаҫлыҡ Кавказ;
Ниңәлер йөрәкте шул саҡ
Рәхәтлектәр алды солғап.
Әйтте миңә бер серле өн
«Һин унда бер саҡ йәшәнең»
Хәтеремдә мин үткәнде
Асығыраҡ күрҙем инде».

7

«Хәтерләнем атам йортон,
Соҡорлоҡто, тауҙар һыртын,
Баҡсаға сумған ауылды,
Шау-шыу килгәндәй булды
Сабып ҡайтҡан көтөүҙәрҙең
Һәм өргән таныш эттәрҙең.
Ҡусҡыл ҡарттар ҙа иҫемдә,
Һәм яҙҙың айлы кисендә
Атам өйө эргәһендә
Ултырған йөҙҙәр иҫемдә;
Хәнйәр ҡынында биҙәксә
Ялтырауы... төштәгесә
Бары, тәртипһеҙ сыуалып,
Минең алдан үтте сабып.
Ә атам! Ул гүйә, тере,
Кейеп һуғыш кейемдәре,
Килде миңә. Хәтерләнем
Мылтыҡ, кольчуга зеңләүен
Ғорур, наҙлы караштарын,
Һәм туған йәш апайҙарҙың
Нурын татлы күҙҙәренең,
Ауазын йыр, һүҙҙәренең
Бишегем өҫтөндә минең...
Соҡорҙа тау шарлауығы,
Тәрән түгел, ләкин шаулы,
Уның алтын ҡомона мин

Көндөҙ уйнарға килә инем,
Ҡарлуғастарҙы күҙәттем:
Ямғыр алдында тулҡынға
Улар ҡанаттарын ҡаға.
Иҫемдә таныш өй, тағы
Киске усаҡ алдындағы
Боронғолар хаҡындағы
Хикәйәләр. Элек-элек
Йәшәгәндәр улар нисек».

8

«Беләһең киләлер һинең,
«Иректә ни ҡылдың?» — тиһең,
Йәшәнем һәм тормошомда,
Был өс гүзәл көндән башҡа,
Һинең ҡартлыҡтан да көсһөҙ
Булыр ине — буш һәм төҫһөҙ.
Бик күптән уйлап йөрөнөм:
«Ҡасан ҡырҙарҙы күрермен,
Ер матурлығы белермен
Беҙ ни өсөн тыуҙыҡ әле:
Төрмәгәме, ирекәме?»
Ҡот осҡос төн ҡоторғанда,
Һеҙҙе йәшен ҡурҡытҡанда,
Һәм һеҙ алтаргә йыйылғас,
Йөҙ түбән ергә йығылғас,
Ҡастым. О, туған итеп мин,
Дауылды ҡосоп, шат инем.
Күҙләнем болот тауҙарын,
Ҡул менән йәшен ауланым;
Әйт миңә һин шул турала:
Һин бына ошо ҡурала
Утлы йөрәк һәм йәшендең
Ҡыҫҡа, йәнле дуҫлығына
Ни бирер инең алмашҡа?»

9

«Оҙаҡ йүгерҙем туҡтауһыҙ,
Юл билгеһеҙ! Һис бер йондоҙ
Яҡтыртманы минең юлды,

Һулауы күңелле булды
Урмандың төнгө сафлығын.
Иркен ҡырҙарҙың шатлығын?
Бына шул! Мин бик күп сәғәт
Йүгерҙем, арып, ниһайәт,
Үлән араһына яттым,
Тыңланым. Ҡыумайҙармы арттан?
Йәшен тынды. Тоноҡ яҡты
Тар һыҙыҡ булып һуҙыла.
Ер менән күк араһына,
Гүйә ерҙең биҙәксәһе —
Алыҫта тауҙар түбәһе;
Ҡуҙғалмай тын яттым оҙаҡ,
Соҡорҙа шакалдар ҡай саҡ
Балалай ҡысҡырҙы илап,
Тәңкәһе менән ялтырап,
Таш өҫтөнән йылан шыуҙы,
Ләкин белмәнем ҡурҡыуҙы,
Кейектәй, кешегә ятмын
Йыландай шыуыштым, ҡастым».

10

«Тәрәндә, минән түбәндә,
Ямғырҙан һуң көсәйгән дә
Ташыу шаулай. Уның шауы —
Йөҙләгән асыу ауазы
Кеүек. Ишетмәнем һүҙҙе,
Аңланым ул һөйләшеүҙе,
Зар, мәңге бәхәсләшеүҙе
Ҡара таш өйөмө менән:
Йә тынды, йә ҙур көс менән
Ишетелде ул тынлыҡта,
Томанлы күктә шул саҡта
Һайраны ҡоштар, көнсығыш
Алтынланды. Елдәр сығып
Тирбәтте дымлы япраҡты,
Һуланы гөлдәр, баш ҡаҡты,
Улар кеүек, көнгә ҡаршы
Күтәрҙем мин дә башымды...

Бар яҡты ҡарап, ҡурҡындым:
Ҡот осҡос тәрән упҡындың
Ята инем тап ҡырында,
Уҫал тулҡын олой унда,
Баҫҡыстар төшә ҡаянан,
Шайтан ғына атлап унан,
Һөрөлгәс тә изге күктән,
Ер аҫты — упҡынға үткән».

11

«Тирә-яғым баҡса – изге,
Үҫемлектәрҙең бизәге
Һаҡлай йәшен күк йөҙөнөң,
Һәм һабаҡтары йөҙөмдөң,
Бөҙрәләнә, ҡыуағында,
Нурҙар уйнай япрағында;
Уларҙа тәлгәштәр тулы,
Зиннәтле алҡалай булып,
Эленгәндәр. Ҡай сағында
Ҡурҡаҡ ҡоштар ҡуна унда,
Мин ҡабат ергә йығылдым,
Тағы ла тыңларға булдым
Серле, ғәжәп ауаздарҙы,
Гөрләтәләр ҡыуаҡтарҙы,
Гүйә һөйләй улар шунда
Күк һәм ер сере хаҡында.
Тәбиғәттең бар тауышы
Ҡушылған бында. Тик ошо
Тантаналы гүзәл төндә
Тауыш сығарманы бәндә.
Шул саҡтағы тойғоларҙың
Эҙе лә юҡ — ул уйҙарҙың,
Ләкин теләйем һөйләргә
Һәм тағы ла шул ерҙәрҙә
Уйҙа булһа ла йәшәргә.
Салт аяҙ ине ул таңды
Күктәр. Фәрештә асҡанды
Үткер ҡараштар күрерлек;
Ул шундай төпһөҙ тәрәнлек,

Тулған тигеҙ зәңгәр менән!
Уға йән һәм күҙҙәр менән
Баттым. Тик төшкө эҫенән
Минең уйҙарым таралды,
Һыуһау ғазабы талдырҙы».

12

«Шул саҡ шарлауыҡлы яҡҡа,
Тотоноп йәш ҡыуаҡтарға,
Һикереп мин таштан ташҡа
Түбән төштөм. Аяҡ аҫтан
Таш ысҡынып ҡайһы ваҡыт,
Туҙан болото ҡуҙғатып,
Бураҙналап төштө унан,
Геүләп, һикереп һыңынан
Сумды тулҡындар эсенә;
Мин ҡалдым упҡын сигендә,
Тик иреклe йәшлек көслө,
Үлем дә ҡурҡыуһыҙ төҫлө!
Төшкәс тә текә ярынан,
Тауҙың һалҡын һыуҙарынан
Һалҡын бәрелде битемә,
Йығылдым йылға ситенә.
Аяҡ тауышы, ҡапыл өн...
Шул саҡ ҡыуаҡҡа ҡасып мин,
Ҡурҡаҡ ҡарашымды һалдым,
Ирекһеҙҙән ҡалтырандым,
Тыңлай башланым онотолоп,
Яңғыраны яп-яҡын булып
Йәш грузинканың тауышы,
Шундай дәртле ауаз ошо,
Шундай татлы, һәм ул гүйә,
Тик дуҫтарҙың исемен генә
Күнеккән төҫлө әйтергә.
Ул ябай йырҙы ғүмеремдә
Онотмам, ятты күңелемә.
Һәм миңә килә ҡара көн,
Йырлаһа уны серле өн».

13

«Көршәген юғары тотҡан
Йәш грузинка тар һуҡмаҡтан
Ярға килде. Һәм ҡай саҡта
Тайып китте таш тауынан,
Көлдө етеҙ булмауынан.
Бик ябай уның кейеме,
Һәм ул еңел бара ине,
Пәрәнжәһен артҡа ташлап,
Йәйге эҫе алған ҡаплап
Алтын шәүлә менән битен,
Күкрәген уның. Эҫе тын
Бөркөлә ирендәренән,
Күҙ ҡараһы шундай тәрән,
Һөйөү сере менән балҡый,
Хатта, минең дә дәртле уй
Ҡаушаны. Тик ҡолағымда
Шаулап һыу тулған сағында
Көршәк шыңғырҙауы һәм дә
Ҡыштырлау... Башҡа — һис нәмә
Мин ҡабат уянғас инде,
Йөрәкте хас йылан имде,
Ә ул йыраҡлашҡан инде,
Тын һәм еңел бара ине,
Буйы шундай зифа, төҙөк,
Ҡыр батшаһы — тополь кеүек.
Еләҫ рәшәлә (бик яҡын)
Гүйә тауҙан үҫеп сыҡҡан
Ике саҡлы, дуҫ-иш төҫлө,
Ҡаплап яҫы түбә өҫтөн
Һибә ҡуйы зәңгәр төтөн.
Әйтерһең, хәҙер ишеттем
Асылыуын ул ишектең...
Һәм ябылды ул яңынан.
— Беләм, һыймайҙыр аңына
Минең ҡаты ҡайғы-һағыш,
(Аңлаһаң да бары бер буш!)
Ул гүзәл иҫтәлек бергә
Йәшәр һәм инер ҡәбергә».

14

«Төнгө эш менән талығып
Яттым күләгәгә барып.
Тәмле йоҡо басты күҙҙе
Һәм тағы йоҡомда күрҙем
Грузинканың йәп-йәш төҫөн.
Ғәжәп, татлы һағыш менән
Тағы һыҙланы күкрәгем,
Оҙаҡ һуларға теләнем
Һәм уяндым. — Ай ҙа бына
Өҫтән нур түгә, — һәм һыңар
Болот ҡасты ай артына
Нәҡ үҙенә табыш һанап,
Ҡомһоҙ ҡосаҡтарын кереп.
Донъя ҡараңғы, тын ине,
Тик көмөшлө суҡтар булып
Тау һыртының ҡар сылбыры
Сағыла алда алыҫланып,
Һәм ярҙарға сәсрәй ташҡын.
Таныш өйҙә янған яҡты
Һелкенә, йә һүнә тағы...
Күктә инде төн уртаһы
Шулай һүнә яҡты йондоҙ!
Мин теләнем... ләкин унда
Инә алманым шул теләктә,
Тыуған илемә йөрәктә
Китеү ине. — Һәм аслыҡтың
Ғазабын көскә оноттом;
Һәм бына тура юл менән
Төштөм, ҡыйыуһыҙ, һил генә,
Ләкин, тиҙ урман эсенән
Тауҙы ла күҙҙән юғалттым,
Һәм шунда эҙҙән яҙлыҡтым.
Юҡҡа ҡотороп шул ваҡыт
Өмөтһөҙ ҡул менән тартып
Өҙҙөм кәрешкә үләнен,
Мәңге дөм урман тирәлек,
Ҡурҡыныс һәм йыш һәр сәғәт.
Ҡара күҙ шикелле дәһшәт
Һәр сауҡа ботағы аша
Төндөң ҡараңғыһы баға.

Баш әйләнә башланы минең,
Ағас буйлап киттем менеп,
Хатта күктең ҡырыйында
Киртләс урман ине һаман —
Шунда ергә мин аунаным,
Асыуға түҙмәй иланым,
Кимерҙем дымлы түшен ерҙең,
Ергә йәшем, йәшем минең
Аҡты ҡайнар ысыҡ булып...
Бел, кешенән ярҙам уйын
Теләмәнем.. мәңгегә мин
Нәҡ йыртҡыс инем илгә сит,
Хатта минутлыҡ тауышым
Мине алдаһа — ҡарт, антым
Телде өҙөр инем алып!»

16

«Иҫеңдәме, бала саҡта
Йәш белмәнем бер ваҡытта,
Ятһыҙ иланым бында
Кем күрһен? — Тик ҡара урман
Һәм ай, күк йөҙөнән уҙған!
Айҙың нурынан нурланып,
Мүккә һәм ҡомға ҡапланып,
Үтә алмаҫ ныҡ диуарҙай
Әйләнеп алып алдымдан
Ялан ята. Унда ҡапыл
Ялтырап ике ут балҡый.
Осҡондар осто... Һәм шунан
Ят бер йыртҡыс бер ырғыуҙан
Һикереп һаҙҙан һәм шунда
Уйнай салҡан ятты ҡомда.
Ҡунағы яландың мәңге
Ул юлбарыҫ ине. Һөйәктәрҙе
Кимерә һәм дә шат шыңшый;
Йә ҡанлы ҡарашын һирпә,
Иркәләнеп ҡойроҡ һелкә,
Тулған айҙа өҫтөндәге
Көмөшләнеп балҡый йөнө,
Мин мөгөҙлө ботаҡ тотоп,

Көтәмен алыш минутын —
Көрәшкә һәм ҡанға һыуһап
Ҡапыл минең йөрәк яна...
Эйе! Миңә яҙмыш ҡулы
Дусар итте башҡа юлды...
Бөгөн шуға нык ышанам,
Аталар иле яғында
Булыр инем баш батырҙан».

17

«Көттөм. Бына төн ҡуйынында
Дошманын һиҙҙе, сыйылдау
Оҙон, моңло ыңғырашыуҙай,
Яңғырай ҡапыл... Һәм ул шунан
Усы менән ҡомдо ҡаҙа,
Буйға баҫа, тағы ята,
Һәм тәүге уҫал һикереү
Ҡурҡыныс үлем килтерҙе...
Ләкин мин алдан һиҙҙерҙем.
Тура һәм тиҙ генә һуҡтым.
Балта кеүек ботағым нык
Ярҙы уның киң маңлайын...
Ул кеше кеүек ыңғыраны.
Һәм йығылды — ләкин ҡабат,
Торһа ла яраһы ҡанап
Ҡуйы, мыжғып һәм урғылып
Көрәш ҡыҙҙы — дәһшәт булып!»

18

«Ташланды ул ҡуйыныма,
Мин өлгөрҙөм тамағына
Тығып ботаҡ, борғоларға.
Хәлһеҙләнеп ул шыңшыны,
Бар көсө менән ынтылды,
Пар йылан булып ишелеп,
Ҡосошоп ике дуҫ кеүек,
Беҙ йығылдыҡ — һәм был төндә
Көрәш дауам итте ерҙә.

Уҫал ҡырағай юлбарыҫ кеүек,
Ҡыҙам, ҡысҡырам уның кеүек;
Тыуып үҫкәнмен, әйтерһең,
Ояһында барс, бүренең,
Урман пәрҙәһе эсендә.
Кешеләр һүҙен шул мәлдә
Оноттом — һәм күкрәгемдә
Ҡурҡыныс тауыш яралды,
Әйтерһең, башҡа ауазды
Һөйләп телем күнекмәгән...
Ләкин дошман көсһеҙләнә,
Әлһерәй һәм йыш тын ала,
Һуңғы ҡабат мине ҡыҫа...
Хәрәкәтһеҙ күҙ алмаһы
Ҡурҡыныс янды — шунан һуң
Ябылды мәңге йоҡоға.
Тантаналы дошман менән
Үлемде йөҙгә-йөҙ менән
Ҡаршыланы батыр ирҙәй!..»

19

«Күкрәктә күрәһең минең
Тырнаҡтарҙың тәрән эҙен:
Төҙәлмәгән, улар әле
Уңалмаған. Ләкин ерҙең
Еүеш тупрағы таҙартыр,
Һәм үлем мәңге уңалтыр.
Онотоп яра барлығын,
Йыйып көсөмдөң ҡалдығын,
Гиҙҙем мин урман эсен...
Талаштым яҙмыш менән,
Яҙмыш көлдө минең өҫтән!»

20

«Урмандан сыҡтым. Һәм бына
Көн яҡтырҙы, көн нурында
Юғары йондоҙ билгеһе.
Томанлы урман тереләде.

Ситтә ауыл төтөн бөрктө,
Ялан шомло гөрләп китте...
Тыңлай башланым ултырып;
Ә ел менән гөрләү тынды.
Тирә-яҡҡа һалдым күҙем:
Был ерҙе мин таныш күрҙем.
Һәм, ҡот осҡос ине миңә,
Оҙаҡ аңламаным. Йәнә
Килдем, әйтерһең, төрмәмә,
Файҙаһыҙға күпме көндәр
Йәшерен фекерҙе мин һөйҙөм,
Түҙҙем үҙем, яндым, көйҙөм,
Бары ниңә? Йәшлегемдә,
Саҡ был йыһанды күргәндә,
Япраҡтарҙың зарын тыңлап,
Иректең ләззәтен аңлап,
Мөҡәддәс илде һағыныуҙы,
Теләктәрем алданыуын,
Һеҙҙең йәлләүҙең ғәрлеген
Гүргә алып китергәме!..
Шикләнеүҙәргә солғанып
Шулай был төштә уйланып,
Кинәт алыҫта ҡыңғырауҙың
Һилдә сыңланы тауышы...
Миңә беленде барыһы.
О! Мин уны шундуҡ белдем,
Ул йәш күҙҙәремдән инде
Тере төштәремдән ҡыуҙы:
Һөйөклөм һәм дуҫтарымды,
Ҡырағай ялан ireген,
Аттарҙың ярһыу йүгереген,
Матур ҡая янындағы
Минең еңгән һуғыштарҙы!
Мин тыңланым йәшһеҙ, хәлһеҙ.
Йөрәктән сыға тиерһең
Сыңлау. Кемдер, әйтерһең дә,
Тимер менән түшкә бәрә.
Саҡ мин аңланым шул саҡта —
Миңә инде тыуған яҡҡа
Юл һалынмаҫ бер ваҡытта».

## 21

«Эйе, минең өлөш бында.
Ҡеүәтле ат сит яланда,
Менгән егетте ул бырғап,
Тыуған ил яғына ҡырҙан
Тура һәм яҡын юл табыр...
Мин һуң нәмә? — Юҡҡа бары
Күкрәк моң менән солғана:
Ул маҡсатһыҙ, буш, ут янған,
Хыял уйыны, аҡыл сире.
Төрмә миңә һалды эҙен,
Нурһыҙ үҫкән сәскә шулай.
Яңғыҙ үҫһә төҫһөҙ була.
Сорнаны үлән йән-яғын,
Йәйәлмәне йәш япрағын.
Ризыҡланыр нур көттө ул,
Бик күп көндәр үтеүҙән һуң,
Тик бер рәхимле ҡул йәлләп
Күҙ төшөрҙө был сәскәгә.
Һәм ул күсте бер баҡсаға,
Күрше булды роза уға.
Тирә-яҡта тормош аңҡый.
Нихәл итмәк? — Ҡояш ҡалҡты,
Уның шундай ҡайнар нуры
Төрмә сәскәһен яндырҙы».

## 22

«Һәм шулай уҡ мине өттө
Уты мәрхәмәтһеҙ көндөң.
Арып талсыҡҡан башымды
Юҡҡа үләнгә баҫырҙым;
Кипкән үләндең япрағы
Минең йөҙөмдө ҡапланы.
Һәм битемә ялҡын менән
Ер һулышын бөрктө миңә.
Өҫтә бызлап осҡон уйнай,
Пар һуҙылды аҡ ҡаянан,
Тәрән йоҡо менән йыһан
Уратылып алып йоҡлай.

Ҡысҡырһасы берәр ҡошҡай,
Йә сиңерткә сереллдәүе
Ишетелһәсе!.. — Йә шишмәнең
Балаларса гөрөлдәүе
Ишетелмәй!.. — Тик бер йылан,
Ҡыштырлатып ҡоро ҡаулын,
Йылтлап һары һырты менән,
Яҙылып нәҡ алтын менән,
Әйтерһең, ул үткер ҡылыс,
Ваҡ ҡом буйлап һыҙыҡ һыҙып,
Шыуҙы, әкрен — бына шунан,
Уйнап, иркәләп ул ҡомда,
Өс ҡат балдаҡҡа бөгөлдө;
Утта янғандай күренде,
Кинәт осондо, һикерҙе,
Һәм йәшенде селектәргә...»

23

«Һәм барлыҡ күктең өҫтөндә
Яҡты һәм тын. Томан аша
Ике тау көңгөрт сағыла.
Монастырь бер тау артынан
Күренеп тора ялтырап.
Көмөш уҡа менән һырып,
Яңы утрауҙарҙы йыуып
Йәш сауыллыҡ төптәренән
Татыу, еңел китә ағып...
Улар булды минән алыҫ!
Тормаҡ булдым: ә алдымда
Әйләнде бар нәмә шунда!
Ҡысҡырмаҡ булдым: тел кибеп
Өнһөҙ һәм ул хәлһеҙ ине.
Мин үләмен. Минең хәлде
Үлем һаташыуы енде:
Имеш, ятам һыу төбөндә,
Ҡараңғы, бер ни күренмәй,
Боҙ кеүек, һалҡын тамсылар
Һыуһынға тейеп аҡтылар,
Сылтырап, күкрәкте йыуып...
Шикләндем, тик йоҡлау ҡыйын, —

Сөнки татлы, йәмле ине...
Ә өҫтәге һыуҙа инде
Тулҡын тулҡынға ҡыҫылды,
Ҡояш көмбәҙләп тулҡынды
Нурын һипте айҙан татлы,
Өйкөм балыҡ эре-ваҡлы
Нурҙа уйнай ҡайһы ваҡыт.
Береһе әле хәтерҙә:
Ул бер балыҡ бөтәһенән
Ныҕыраҡ иркәләнде миңә,
Һырты уның алтын менән
Биҙәлгәйне. – Үтте уйнап
Баш өҫтөмдә бер нисә ҡат.
Күк күҙенән сыҡҡан ҡараш
Һөйөклө һәм тәрән ине
Мин ҡуҙғала алмай инем! –
Ул балыҡтың көмөш өнө
Әйтә ине серле һүҙҙәр,
Йырлай йәнә, тына тиҙҙән.
Ул һөйләне: «Балаҡайым,
Ҡал һин минең янда:
Һыуҙа бигерәк иркен йәшәү
Һалҡын, тыныс бында,
Һеңлеләремде килтерәм!
Беҙ түңәрәк бейеп
Асырбыҙ тоноҡ ҡарашың,
Һәм рухыңды һинең.
Йоҡла! Йомшаҡ урының,
Көмбәҙең һинең ябыҡ.
Йылдар, быуаттар үтерҙәр
Ғәжәп йоҡо татып.
О һөйөклөм, йәшермәйем,
Һине нисек һөйәм,
Ирекле ағым итеп һөйәм,
Тормош кеүек һөйәм...»
Мин оҙаҡ, оҙаҡ тыңланым;
Әйтерһең, йылға ағымы
Ҡуша үҙенең тын өнөн
Алтын балыҡ һүҙе менән.
Һушһыҙ булдым. Алла нуры
Күҙҙә һүнде. Һаташыуым
Тәнемдәге көсөм алды...»

24

«Шул хәлемдә мин табылдым...
Ҡалғаны билгеле һиңә.
Ышан минең һүҙҙәремә
Йә ышанма, бер ни түгел.
Тик бер хәлгә яна күңел:
Һалҡын, өңһөҙ минең мәйет
Тыуған илдә ҡалыр һүнеп,
Әсе хәсрәтле хикәйәм
Ҡалын шул стена эсенән
Саҡырмаҫ ғәмен бер кемдең
Томанлы исемемә минең».

25

«Хуш бул, ата, ...ҡулыңды бир:
Һиҙәһеңдер, ялҡында мин...
Бел, ошо ялҡын йәштән үк
Күкрәктә иреп йәшәне;
Хәҙер тик аҙыҡ юҡ уға,
Үҙ төрмәһен яндырҙы ла
Һәм әйләнер тағы шуға,
Кем законлы хәл буйынса
Ғазабын һәм тәртип ҡуша...
Ләкин ни миңә? — Ожмахта,
Изге һәм болотло яҡта
Әйҙә рухым тапһын урын...
Бер аҙ минут үтте бары,
Бала сағымда уйнаған,
Текә һәм көңгөрт ҡаяла,
Ожмах, мәңге, тиер инем...»

26

«Ҡасан үлә башлаһам, —
Ышан уға, күп ҡалмаған —
Ҡушырһың мине илтергә
Баҡсаға, шул, теге ергә,
Сәскәле ике өйкөмгә...

Унда үлән шундай ҡуйы!
Һәм һауаһы шундай хушлы,
Һәм шундай көмбәҙ алтынлы
Нурҙа шаярған япрағы!
Һалырға ҡуш шунда мине.
Нуры менән зәңгәр көндөң
Туйынырмын һуңғы тапҡыр.
Күренә унан Кавказ тауы!
Бәлки, ул үҙе һыртынан
Һалҡынса елдең артынан,
Һуңғы сәләмен ебәрер...
Яҡында үлер мәлемдә,
Яңғырар таныш өн йәнә!
Һәм уйлармын, имеш, кинәт
Туғаным, эйелеп миңә,
Иғтибарлы ҡулы менән
Үлем тирен һөртә биттән,
Имеш, йырлай ул йырында,
Һөйөклө илем турында.
Һәм йоҡлармын шул уй менән,
Һәм мин бер кемде тиргәмәм!..»

*1839*

## *Шевченконан*

* * *

Миңә барыбер, йәшәрменме
Украинала, йәки юҡ.
Онотормо берәү, хәтерләрме
Кем дә булһа мине ят ерҙә –
Миңә барыбер.
Мин тотконда үҫтем яттарҙа,
Йыуатманы мине дуҫтар ҙа.
Тотконда илап үләм,
Бөтәһен үҙем менән –
Алам, ҡалмаҫ ғәзиз эҙ ҙә
Данлыҡлы Украинала,
Хәҙер – беҙгә ят ерҙә
Ата улы менән телгә алмаҫ,
Әйтмәҫ атаһы улға:
«Украина өсөн ҡыл доға!
Уны иҙҙеләр элек».
Барыбер миңә, ул бала
Доға ҡылырмы, юҡмы,
Тик миңә түгел барыбер,
Әгәр Украинаны уҫал,
Мәкерле кешеләр утта –
Таланған килеш уятһа –
Ох, барыбер түгел миңә.

*Казематта, 1847*

* * *

Уттар яна, музыка уйнай,
Олой музыка, илай,
Иң саф ҡиммәтле алмаздай,
Йәп-йәш күҙҙәр ялтырай:
Уйнай шатлыҡ һәм ышаныс
Ул ҡараштарҙа. Кәйеф уларҙа,
Гонаһһыҙ саф, йәш күҙҙәргә.
Бөтәһе йылмая, көлә.
Барыһы бейей. Тик бер мин
Сихырланған кеүек ҡарайым.

Һәм тын ғына илайым.
Ниңә мин йәш түгәм? Дөрөҫ, йәл —
Һөйөүһеҙ, яуымлы көн кеүек
Үтте шул минең йәшлек.

*1850*

## САЯ ҠЫҘ ЙЫРЫ

Һуҡмаҡ һалдым ярҙар аша,
Тау аша,
Баҙарҙарға киттем, йәнем, —
Тамаша!

Алып барҙым керәндиләр
Бешереп,
Биш тин баҡыр булды, йәнем,
Төшөмөм.

Араҡыға сығып китте
Дүрт баҡыр.
Әй, ҡурайсы! Береһе һиңә,
Мә, баҡыр!

Йә, ҡурайсы, ҡурайыңды
Тартсы бер,
Хәсрәтемде алып ситкә
Атсы бер.

...Һине бына ниндәй сая
Ҡыҙ көтә!
Мин килермен, һорат, йәнем,
Көҙ етә.

*Кос-Арал, 1848*

* * *

Һыуҙар аға зәңгәр диңгеҙгә,
Аҡҡан һыуҙар кире ҡайтмайҙар,
Эҙләй казак, эҙләй бәхетен,
Эҙләгәнен казак тапмайҙыр.

Йөрөй казак гиҙеп донъяны.
Диңгеҙ дулап ырғый яр аша,
Ярһый... ярһый егет күңеле,
Йөрәк менән аҡыл даулаша:
«Фатиха ла алмай — һорамай
Һин ҡайҙарға китеп бараһың?
Атаң-әсәң, һөйгән сибәрең
Күҙ төбәп һуң кемгә ҡараһын?
Ете яттар унда — сит ерҙә
Ҡыйын булыр донъя күтөүҙәр.

Кемгә һүҙ ҡатырһың? Яңғыҙ башың
Кем иңенә һыйынып йәш түгер?»
Яманһыулай казак сит ерҙә.
Зәңгәр диңгеҙ ярһый һаман да.
Ҡайғыларға килеп юлыҡты
Бәхет эҙләп йөрөгән заманда.

Теҙелешеп оса торналар
Тыуып үҫкән ғәзиз яҡтарҙан.
Илай казак. Ҡайтыр юлдарын
Әрем баҫҡан, ҡарҙар ҡаплаған.

*1838*

*Христо Ботевтан*

## ХАДЖИ ДИМИТР

Ул һаман да тере. Батыр юнаҡ
Һушһыҙ ята, батып ал ҡанға.
Яралары тәрән, йәш егеттең
Һыҡтау өнө тарала Балҡанға.
Һынyҡ ҡылысын уңға ырғытҡан ул,
Ә мушкетын һулға ташлаған.
Күк ирендәр бар донъяны ҡарғай,
Күҙен ҡанлы томан ҡаплаған.
Ята батыр. Түҫһөҙ күк йөҙөнән
Ҡыҙыл ҡояш борҡой томраһын.
Ураҡсы ҡыҙ йырлап китә ҡырҙан,
Ҡан, ҡан ҡаплай егет яраһын.
Ураҡ өҫтө... Йырлағыҙ, ҡол ҡыҙҙар,
Ҡолдар йырын! Ҡояш, тиҙерәк
Күтәрелсе бейек. Әйҙә бөтһөн
Хәлһеҙ юнаҡ... ләкин, сеү, йөрәк!
Ирек өсөн яуҙа ауған егет
Мәңге үлмәй. Уны ил ҙурлай.
Ер менән күк уны һағынып илай,
Ә кешеләр уға дан йырлай.
Көндөҙ бөркөт ҡанат йәйә уға,
Төнөн бүре ялай яраһын,
Ҡыйыуҙарҙың юлдаш ҡошо — ыласын
Һаҡлай уны — үҙенең ағаһын.
Кистәр килһә, йондоҙ һибелә күккә,
Ер яҡтыра айҙың нурынан.
Ҡара урмандарҙа елдәр иҫһә,
Яңғырай Балҡан гайдук йырынан.
Аҡ кейемле гүзәл фәрештәләр
Төн эсенән килеп сығалар,
Юнаҡ тирәһенә ултырышып,
Һоҡландырғыс бер моң һуҙалар.
Береһе яраһына үлән яба,
Икенсеһе бөркөй һалҡын һыу,
Өсөнсөһө иренәнән үбә —
Әллә туғанымы был һылыу?
Әйтсе, һеңлем, Караджата ҡайҙа?
Дружинамды, һеңлем, тапһана.

Юнаҡ йәне — минең ҡанмаған үс, —
Кәүҙәм бында һыуынып ятһа ла.
Фәрештәләр болоттарға ашты,
Шундай яҡты, еңел үҙҙәре,
Улар таңға тиклем бар донъянан
Караджата рухын эҙләне...
Һәм төн уҙа... Балҡан тауҙарында
Ята батыр, урғып ҡан аға,
Бүре эйелеп ялай яраларын,
Ҡояш утын сәсә донъяға.

## МИНЕҢ ДОҒАМ

Әй, Хоҙайым, ғәзел Хоҙай,
Һин түгелһең күктәге, —
Һин йөрәгем өмөтөһөң,
Һин — минең күңелдәге.
Бит һиңә түгел, башҡаға
Поп түгел, монах бил бөгә.
Юҡ, һине динсе хайуандар
Тонсоҡтормай тотонгә.
Юҡ, һин ир менән ҡатынды
Балсыҡтан яһаманың,
Ер улдарын аслыҡҡа һәм
Ҡоллоҡҡа ташламаның.
Папа түгел һин, батшаға
Залим власть биреүсе,
Бәхетһеҙлек тырнағында
Ярлыны тилмертеүсе.
Һин түгел тик доға менән
Фәҡирҙе йыуатыусы,
Һәм гүргә ингәнгә тиклем
Ғазапта илатыусы.
Һин түгел яуыз тирандар
Оятһыҙҙар аллаһы,
Һин йыртҡыс һәм ахмаҡтарҙы
Ҡанатыңа алмаҫһың.
Һин, тәңрем — ҡоллар терәге, —
Яҡты аҡылым минең.
Тиҙҙән күрер бар халыҡтар
Гүзәл еңеүҙең көнөн.

Әй, Хоҙайым, азатлыҡтың
Утын бир һәр йөрәккә,
Тирандарға ҡаршы халыҡтар
Күтәрелһен көрәшкә.
Ҡулдарыма көс бир, Тәңре,
Яуға сыҡҡан сағымда,
Мин әҙер үлем, аҙапҡа
Халыҡтың алғы сафында.
Ялбарам һиңә, сит ерҙә
Йөрәгем һыуынмаһын,
Тауышым, бушлыҡтағыса
Яуап алмай, тынмаһын.

*Коста Хетагуровтан*

## КӨТӨҮСЕ-БАТРАК

*экиәт*

Борон заман великанда
Бер ярлы торған.
Яфаланған ул көтөүсе
Һәм хәлдән тайған.
Һеләгәй һыңар күҙ бер ҙә
Һөймәгән кешене.
Ҡорһағы «кату»ҙай* булған
«Катуй»* — ирене.
Үрсетелгән һарыҡтарҙы —
Гел ашап торған.
— Йә әле, — тигән бер саҡ ярлы, —
Иҫәп бир, туған!
— Ярай, дуҫ, теләмәгәс ни,
Кит, хәйерле юл.
Ҡабат һорамай эш хаҡын,
Уйҙа ҡала ул.
Тағы эшләй, Алла беләү
Күпме интегер,
Үҙен бәхетле итһә көтөүсе,
Ул шартлап үлер.
Һәләк булды көтөүсебеҙ,
Кипте ҡандары;
Бер саҡ ҡырҙан ҡыуып ҡайтты
Туйған малдарҙы.
Великан да ауа-түнә
Саҡ ҡайтып төшкән,
Башы уның уттай ҡыҙған —
Ҡайҙалыр эскән.
Телен саҡ-саҡ болғай,
Үҙе кикерә.
— Әлбиттә, һин уңған малай! —
Егеттән көлә. —

---

* Орлоҡ һалыу өсөн үреп эшләнгән мискәгә оҡшаған кәрзин.
* Сыбыҡтан үрелгән ҙур һоҫҡо.

Иҫәпләшһәк, — яҡшылап
Иҫәпләшәйек,
Беҙ ҡандаштар түгел икәү,
Кил — һөйләшәйек.
Һин ни тиерһең, бер юл таптым,
Мин яҡшы күрәм.
Табышмаҡ әйтәм, тапһаң һин,
Көтөүҙе бирәм.
Тапмаһаң, бер ни бирмәйем,
Буш көттөң малды.
— Һинеңсә булһын, нишләйһең
Ярай, — ти ярлы.
Шатлыгктан көлдө великан:
— Бер! Шуны һин тап!
Бер Алла! Алла ҡушҡанса
Күккә оса таш.
— Әгәр ике булһа? — тине,
Һәр бер бәрәсте
Ике күҙ менән күҙәтә
Яҡшы көтөүсе.
— Ә өс булһа? Нимә ул?
— Түңәрәк өҫтәл,
Ул ҡайғы, арыуҙы ҡуйып
Тик шатлыгк өҫтәр.
— Әгәр дүрт? Нимә була ул?
— Дүрт туған әгәр
Йылдың бер эшен эшләһә,
Нимә? Әйтеп ебәр.
— Әйтмәйһеңме — нимә ул биш?
— Мине биш бармаҡ
Һаҡлай хәйлә һәм сихырҙан —
Ҡайһы яҡшыраҡ.
— Ә алты — был төп табышмаҡ?
— Алты тапҡыр мин
Теләнем иҫәпләшергә,
Риза түгел һин.
— Һүҙ һүҙҙән уҙа, ти ҡарттар,
Әйт һин етенән.
— Великанда ете баш бар,
Аҡылда — бүкән.
Йә табып ҡара, нимәне
Аңлата — һигеҙ?

— Һигеҙ йыл көтөүең көттөм,
Хәҙер юл — тигеҙ.
— Еңел булды. Туғыҙ нимә?
Әйт әле йәһәт,
Туғыҙынсы йылда инде
Итәм сәйәхәт.
— Икәү сәйәхәт итмәнек,
Һөйлә тураһын —
Терек — Турк: шунда булдым
Көтөүҙе шунан ҡыуҙым.
— Һыуҙа кеше батмаймы ни?
Ә атың ниндәй?
— Мине бик еңел йөрөтә
Сатан серәкәй.
— Атың һәйбәт, диңгеҙҙәге
Һыу ҡороп бөткәс,
Ләкин әле бөркөт аша
Бөркөт тә етмәç.
Тураһын әйтәм, дуç кеше,
Алдау миңә ят.
Әгәр алдаһам, ҡаршымда
Һин таш булып ҡат.
Ярлы теләге үтәлде:
Таш великанға оҡшаны
Ауыҙы асыҡ көйөнсә
Баçты ла ҡатты.
Ҡотолдо ярлы, көтөүҙе алды,
Хәҙер тормош мул,
Бөгөн миңә бер бәрәсен
Бүләк итте ул.
Һорамағыҙ көтөүсенән
Һис ниндәй нәмә;
Бары бөткәнсе донъяла
Һин татыу йәшә.

## *Маяковскийҙан*

### ПРОЛЕТАРИАТ ШАҒИРҘАРЫНА ХАТ

Иптәштәр,
    рөхсәт итегеҙ,
        позаһыҙ
            һәм маскаһыҙ –
Олораҡ һәм аҡыллы
        иптәш булып, мин
Һөйләшәм һеҙҙең менән,
        иптәш Безыменский,
Иптәш Светлов,
        иптәш Уткин.
Беҙ даулашабыҙ,
        ҡурғашлауҙы һорай тамаҡтар,
Беҙ эстрада еңеүҙәренән
        тонсоғабыҙ.
Ә минең
        һеҙгә, иптәштәр,
            эшлекле тәҡдим бар:
Әйҙәгеҙ,
        күңелле
            обед ҡорабыҙ,
Түшәйбеҙ аҫҡа
        коверлы комплименттарҙы,
Кемдең теше оҙон –
        тешен ҡырҡабыҙ.
Луначарский
        тараҡкан
            лавр веноктарҙы
Иптәштәрсә
        уртаҡ һурпаға ҡушабыҙ.
Хәл иттек,
        үҙебеҙсә дөрөҫ
                бөтәбеҙ,
Үҙ тауышы менән
        йырлай
            һәр кеше!
Шөһрәттең
        уртаҡ тауығын киҫәбеҙ,

Һәм һәр кемгә
бирәбеҙ тип-тигеҙ өлөштө.
Ташлайыҡ
бер-беребеҙгә
шпилька ҡаҙауҙы,
Үҫтерәйек
һүҙҙәрҙең
гүзәл ажурын.
Ә ҡасан миңә
иптәштәр һүҙ бирә —
Мин һүҙҙе алам
һәм әйтәм шуны:
— Мин күренәм һеҙгә
ҙур артлы академик булып,
Имеш, бер мин
ирешә алмаҫлыҡ
поэзияның жрецы.
Ә миңә ысындан да
берҙән-бер кәрәк:
Күп булһын шағирҙар,
яҡшыһы
һәм төрлөһө.
Күптәр файҙалана
напостовец булыу менән
Яҡшыраҡ атау өсөн
үҙҙәрен,
— Имеш, беҙ берҙән-бер,
беҙ пролетариаттыҡы.
Ә мин, һеҙҙеңсә,
валютчикмы — кем?
Мин асылда
һөнәрсе, туғандар,
Мин был
күңелһеҙ фәлсәфәне
яратмайым улай.
Ендәрҙе һыҙғанам
эшләргәме,
һуғышырғамы?
Рәхим ит,
йә, давай!
Беҙҙең алда бик ҙур
эштәр бар,

Шиғырсылыҡ кәрәк
              һәр кемгә,
Әйҙәгеҙ
              тиргә батҡансы
                        эшләргә,
Сифатты яҡшыртыу
              һанды күтәреү өҫтөндә.
Мин шиғыр сорттарын
              коммуна менән
                        үлсәйем,
Шуға ла
              коммунаны
                        һөйә йөрәк,
Сөнки коммуна,
              минеңсә, сикһеҙ бейеклек,
Сөнки коммуна,
              минеңсә,
                        иң тәрән тәрәнлек.
Ә поэзияла
              юҡ
              дуҫ та, туған да.
Протекция менән
              бәйләнмәҫ
                        рифма ебе,
Ҡалдырайыҡ орден һәм награда бүлеүҙе,
Ташлайыҡ, иптәштәр,
              ярлыҡ сәпәүҙе
Теләмәйем
              маҡтанырға,
                        әйтеп яңы фекер,
Минеңсә —
              авторса һауаланмай әйтәм —
Коммуна —
              шул,
              ҡайҙа чиновниктар бөтөр,
Һәм ҡайҙа,
              күп булыр
                        йыр һәм шиғыр.
Етә иҫ китеү
              бер пар рифмаға —
Беҙ хөрмәтләйбеҙ:
              был шағир — гений.

Береһен атайҙар
ҡыҙыл Байрон, тип,
Икенсеһен —
ҡып-ҡыҙыл Гейне.
Бер нәмәнән ҡурҡам
һеҙҙең өсөн мин дә —
Күңелдәр беҙҙең
ваҡланмаһын,
Күтәрмәйек беҙ
коммунизм бейеклегенә,
Раешник яҫылығын
һәм частушка сафсатаһын.
Күңелдәр бар беҙҙең,
үҙегеҙ аңлайһығыҙ:
Йөрәк һыҙығында
юҡ бүленеш,
Әгәр һеҙ беҙҙең өсөн,
ә беҙ
һеҙҙең менән булмаһаҡ,
Шайтанымамы ни
беҙгә ул эш!
Ә әгәр мин
бер саҡ
һеҙҙе һүкһәм,
Һәм һеҙгә
һелтәнһә перо-ҡулым,
Уны мин, билдәле,
ҡан менән яуланым,
Мин һеҙҙән күп
рифма юндым.
Иптәштәр,
ташлайыҡ
торгаш ҡылығын,
— Минең, имеш, поэзия
минең лапаҫ,
Мин нәмә эшләнем —
бөтәһе һеҙҙеке —
Рифмалар,
темалар,
дикция,
бас!

Дандан капризлыраҡ,
көлләрәк
нимә бар?
Аламмы ни уны
үлгәс табутка?
Төкөрәм мин, иптәштәр,
һуңғы сиктә,
Аҡсаға, шөһрәткә
һәм башҡа ҡалдыҡ-боҫтоҡҡа!
Ниңә беҙгә
бүлергә
поэтик власты?
Йыяйыҡ
һүҙҙәрҙең
ҡамсылыһын һәм нескәһен.
Әйҙәгеҙ,
көнсөлөкһөҙ
һәм фамилияһыҙ
Коммуна төҙөлөшөнә һалабыҙ
һүҙҙәр кирбесен.
Әйҙәгеҙ,
иптәштәр,
тигеҙ атлайыҡ,
Кәрәкмәй беҙгә
сыңлаусы
пеләш париктар.
Ә һүгешергә теләһәк —
дошмандар күп
Ҡыҙыл баррикаданың
теге яғында.

*1926*

**БЛЭК ЭНД УАЙТ**

Әгәр
Гаванаға
күҙ ташлаһаң —
Ожмах – ил,
иҫ китер иленә:
Фламинголар —
пальмалар төбөндә.

Ведадо
        күмелгән
                Гавана гөләнә.
Гаванала
        бөтәһе
                теүәл бүленгән:
Аҡтарҙа — долларҙар,
        ҡаранын — юҡ бында.
Шуға бит
        һепертке тотоп,
                тора ла Вилли
«Энри Клей энд Бок, лимитейд»
        янында.
Ғүмерендә
        Вилли
                бик күп һеперҙе,
Өйгәндә
        үҙе бер тау булыр
                сан ғына.
Шуға бит
        Виллиҙең
                арҡа ла бөкрө,
Шуға бит
        Виллиҙең
                сәстәр ҙә сал ғына.
Тар унын шатлыктар спекторы.
Алты сәғәт йоҡлай ул ҡакта.
Негрға
        ҡараҡ,
                порт инспекторы,
Ташлап китә
        бер цент
                ҡай саҡта.
Был сыраҡтан
        ҡотолоу мөмкинме? —
                һис түгел.
Баштары менән
        йөрөһәләр генә инде.
Улай ҙа
        былай сыраҡ ташырҙар
                улар гел:

Сәстәр бит мендәрсә,
ә аяҡ тик ике.
Йәнәшәлә
матур
Прадо урамы.
Джаз сыңлай,
йә балҡый шул яҡта.
Ысындан Гавана
әүәлге ожмахтың
Тап үҙе шикелле
күренер ахмаҡҡа.
Виллиҙең мейеһендә
аҙ ғына һыр заты.
Фекерҙәр күп түгел
Виллиҙең башында,
Бер генә нәмәне
ятлаған
бик ҡаты
Шундағы
ташылай:
«Аҡтар ашайҙар
өлгөргән ананас.
Ҡараға — серектән
бер өлөш.
Аҡ эште эшләйҙәр
тик аҡтар.
Ҡаралар эшләйҙәр
ҡара эш».
Виллиҙә һорауҙар
күп түгел, аҙ ғына.
Башына һыя алмай
һорауҙың тик береһе.
Шул һорауҙар
Виллиҙең
баҫҡанда алдына,
Төшөп тә китә
ҡулынан
һепертке.
Була бит, булғас эш
Энри Клейгә,
Болоттан ағыраҡ,
дәһшәттән-дәһшәтле

Бер шәкәр короле
кунаҡҡа килгәйне.
Һәм негр
килә лә
ошо аҡ түшкәгә,
Әйтә ул:
«Ай бег ер пардон»,
мистр Брэгг!
Ни өсөн,
әйтегеҙ,
аҡтан-аҡ бит шәкәр —
Ә уны
яһай
ҡап-ҡара шул негр?
Һеҙгә был сигара
килешмәй һис бер.
Ул ҡара,
негрға ҡалайыраҡ килешер,
Кофены яратып,
шәкәрләп эсһәгеҙ,
Һәйбәтләп,
шәкәрҙе үҙегеҙ эшләгеҙ».
Былдайыраҡ һорауҙар
үтмәйҙәр буш ҡына.
Аҡ король
һарғайҙы,
аҙаҡтан ҡыҙарҙы.
Әйләнеп негрға,
киҙәнеп һуҡты ла,
Перчаткаһын ташлап,
китеп үк барҙы.
Тирә-яҡ
иҫ киткес,
бөтә ер сәскә ата.
Банандар үрелгән
баҡсалар дан ине.

Һөрттө негр
аҡ салбарға
ҡулын шул саҡта,
Ә ҡулда
танауҙан буялған ҡан ине.

Тарткылап негр
        емерек танауын,
Катты ла калды
        баҫкан ерендә.
Белмәй шул
        ошондай һорауҙы
Мәскәүгә,
        Коминтернгә бирергә.

*1925*

## ҺЕҘҘЕ КӨТӘБЕҘ, ИПТӘШ КОШСОК, НИҢӘ КИЛМӘНЕГЕҘ ОСОП?

Килә шат тауыш
        бөтә яктан, —
                тарала тауыш
                        бөтә якка.
— Яҙ килде, яҙ!
Әҙерлә оя!
Әйҙә, хуш килдең,
        сыйырсыккай.
Иң якшы урмандың
Иң якшы ерендә,
        тармаклы
                ботакта,
Өй әҙер һеҙгә,
        ҙур аппетитлы
Бәләкәй кошсок.
Әҙер —
        аҙык өсөн
                һәм себен.
Диңгеҙ артынан,
        урман артынан
Сыйырсык
        килмәҫ
                элгәре
Пионерҙар
        кайын һырттарына
                менделәр үҙҙәре.

Берәү,
танауға
труба ҡуйып,
Ултырҙы
ботаҡтың башына уҡ.
«Осорға ине
ҡаршылап,
Телмәр менән ҡотлап».
Тик бер тотҡарлыҡ
Һыртта ҡанат юҡ.
Күк күкрәтә
труба
һәм
Тынғыһыҙ барабан
Үкерәләр,
аҡыралар,
сыйылдайҙар,
ҡағалар —
— Хуш килдегеҙ,
сыйырсыҡтар!
Ҡатыраҡ һуғалар
барабандар —
Сыйырсыҡтар яҙҙы
Урман артында
көтөп алғандар, —
тынғыһыҙ көтөүсе
Балалар
оя һалып
үҙҙәре тараалалар.
Осоп килә
сыйырсыҡ
һуҙып морон,
Әйтергә тура килә:
— Юҡ урын.
Теләйем
был тауыш
башҡа тауыштар өҫтөнән
шаулаһын:
«Иптәш,
ҡош артынан йөрөп
Пионер эше
онотолмаһын».

*1927*

## 1 МАЙ

Иҫке
1-се Майҙы хәтерләйем.
Мин ситтәге өйҙәргә
йәшеренә инем.
Күҙ ҡырыйы менән
ҡарайым:
ҡайҙа ҡасаҡ,
ҡайҙа жандарм?
Кепкалы
эшсе,
пероһы — ҡулда.
Йыйылабыҙ —
паролде әйтешеп,
китәбеҙ алға.
Сокольники артына,
ҡараҡ
шайкаһы булып,
Йәшеренәбеҙ
иң тыныс
уйһыуға сумып,
Ышаныслыраҡты
дозорға ҡуябыҙ
ашығыс.
Телмәр һөйләйбеҙ
бик ҡыҫҡа
һәм тыныс.
Ҡыҙыл байраҡты
ҡуйындан
сығарып,
Киләләр беҙҙең арттан
блузалар йыйналып.
Ат тояғы аҫтында
ҡыуаҡтар шартлаһа:
— Төрмәгә!
Ҡылыс аҫтында!
Нагайка һыҙғырыуы аша —
Ләкин беҙҙе
өмөтһөҙлөк
борсоманы,

Без бeлə инек —
беҙҙең артта
завод донъяһы.
Беҙ белә инек
бөтә донъя
хеҙмәтсәндәренең
Был хәл иткес
минуты
ҡыҙып килгәнен.
Һәм белде
байраҡ йөрөтөүсе,
һиҙгер
ҡылыс яраһын.
Үҙенең ҡаны
ергә иң яҡшы
орлоҡ булаһын.
Бер саҡ —
килеүселәр көрәшкә
һанһыҙ артыр —
Ҡыҙыл байраҡтар
миллионлап балҡыр.
Быуаттар
һәм эралар
атакаһына сығыр
Иҫәпһеҙ көс менән
Эс-эс-эс-эр.

*1925*

## Украин совет шағирҙарынан

### *Павло Тычина*

#### БЕРҘӘМ ҒАИЛӘ ТОЙҒОҺО

Һайыҡманым. Милли һайлыҡтарҙы,
Һаҙлыҡтарҙы ситләп уҙамын,
Милләттәрҙән милләттәргә төбәп,
Балҡып торған йәйғор һуҙамын.

Ниәттәрем асыҡ. Ҡаҡшамаҫлыҡ
Маҡсатымдың мең-мең тәрәге.
Йөрәгемә йәшен ҡағылып үтһә,
Күкрәп китә тауҙар күкрәге.

Алыҫтарҙа йәнә, йәнә күкрәү.
Был — тәүгегә яуап тауышы.
Йәйғор инде ҡорос күпер. Унда
Халыҡ менән халыҡ ҡауышты.

Һин үҙең дә бер йәшенләп алғас,
Аңың балҡый-балҡый, үҫерһең,
Гүйә, һыуһап, дала шишмәһенең
Шифаһы саф һыуын эсерһең.

Эй, эсерһең... Эскәс, һыпырырһың
Иреңеңдәге тамсы бөртөгөн.
Шул саҡ рухың төптәнерәк аңлар
Ете ят тигәндең тел төбөн.

Телгә бер ҡағылһаң, ул йомшара,
Ул бирелә, сере асылып,
Һүҙе бүтән, өнө бүтән, әммә
Нәҡ беҙҙеңсә ҡала асылы.

Башта шулай: усыңдағы дағаа
Аҡрын-аҡрын ғына бөгөлә.
Ҡапыл ят һүҙ туған булып китә!
Өңдәр ағыла, өңдәр түгелә.

Сөнки был бит өн, һүҙ генә түгел,
Түгел һалҡын лөғәт теҙмәһе.
Берҙәм ғаиләнең тойғоһо был —
Уның ғәме, ҡаны, хеҙмәте.

Унда урман шаулай, гөлдәр бәүелә,
Халыҡтар ҡыуанысы артыла,
Уртаҡ тарих ебе үткәндәрҙән
Беҙ йәшәгән көнгә тартыла.

Сит һүҙҙәрҙе алып үҙ итәһең,
Бай телеңдең арта биҙәге.
Пролетариаттың ғәйрәт-ҡеүәтендә
Берҙәм ғаиләнең үҙәге.

*1936*

## *Максим Рыльский*

* * *

Ҡырҙар ҡараялар. Бейек күктә
Ағыла шат болоттар төркөмө.
Тәүге гөлдәр байрам итә.
О ер,
Ниндәй йылы һинең һәр көнөң!

Офоҡ сигенә. Йылға зәңгәрләнә,
Көлә йылға, һыйынып шат ярға...
Кем шул тиклем өмөт өрә йәнгә?
Йөрәк тора бына шартларға!

*1916*

* * *

Бары һиңә генә йырҙар яҙҙым,
Миллион тапҡыр яҙҙым, «аҙ» тимә,
Күңелемдә нимә ҡалһа, шунын
Бары һиңә генә, бер һиңә.

Унда әле аҙмы һаҡланғандар
Япраҡ шауы, үлән еҫтәре,
Туғайҙағы ысыҡ бөртөктәре,
Офоҡтағы алтын төҫтәре.

Сал сәсемде һыйпай арыу-талыу,
Һалҡын елдәр өрә артымда,
Алда мине хәтәр көндәр көтә...
Күңелдәге барлыҡ алтындар.

Һиңә генә... Ҡулың йылыһынан,
Йөрәгеңдән һинең көс алам.
Ә йөрәгең әйтә: «Йәшәр, йәшә,
Ижад ит!..» — ти. Уға ышанам.

*1938*

* * *

Ҡарлуғастар оса — ҡанат сыҡҡан.
Ә Ганнуся ғашиҡ — дәрт кергән...
Яҙғы кейем кейгән Батый тауы*
Йәшел тулҡын булып күпергән.

Талдар бөгөлә, нескә талдар бөгөлә,
Аҡ күгәрсен айҡай болотто...
Бына-бына беҙ ҙә зәңгәр күккә
Оса алмабыҙ ҡоштар булыпмы?

Ер әйләнһен, әйҙә, зыр әйләнһен,
Яҙ ҡаршында йыһан баш эйгән...
Ҡарлуғастар оса — ҡанат сыҡҡан,
Ә Ганнуся илай — йәр һөйгән...

*1925*

## *Богдан Чалый*

### ХУШ КИЛДЕГЕҘ!

*поэма*

I

Байрам алды мәлендә,
Самолеттың шәбендә,
Атаһы менән бергә
Осто Славик көньяҡҡа —
Дуҫ Бакуға ҡунаҡҡа.

Бориславтың үҙенән,
Ауылдар һәм ҡалалар,
Киң далалар өҫтөнән,
Ерҙән алмай ҡарашын,
Оса Слава — яҡташым.

Кемдер ҡапыл өндәште:
— Аҫта Кавказ, туғандар!
Уның ҡарлы түбәһе
Ҡалҡып сыҡты томандан.

Сәләм, Кавказ, сал түбә,
Карпаттан сәләм һиңә!
Шул саҡ Каспий диңгеҙе
Асты үҙенең киңлеген.

Минең яҡташ күҙҙәрен
Бер аса ла йома бер,
Төшөнә алмай тиҙ генә:
Ҡояш йөҙә диңгеҙҙә,
Ҡайҙа күк? Ә ҡайҙа ер?

Әзербайжан ҡырҙары
Шул саҡ йәйҙе ҡосағын.
Һағынып көткән, күрәһең,
Бориславтан ҡунағын.

Диңгеҙ тағы көмөштәй
Ялтыраны һул яҡта,
Мотор шымды шул саҡта:
— Аэродром, ҡунаҡтар!

11 – 1.0142.11

II

Ҡаршы алды
Ағай Мехти:
— Хуш килдегеҙ!
Хәл нисек? — ти, —

Өшөмәнегеҙме һуң? — ти, —
Юлығыҙ бик бейек бит, — ти.
Нурлы —
Ағайҙың
Шат ҡараштары.
Күҙҙәр өҫтөндә —
Ҡара ҡаштары.

Ҡосаҡлай атай
Таныш кешене,
Үҙе кеүек үк
Нефтсе эшсене.

Был һис тә түгел
Әкиәт иле,
Хәс тә Славаның
Был тыуған өйө.

Мехти ағайҙың
Фуат исемле
Улы бар икән.
Ҡунаҡ ҡаршылай
Фуат та килгән.

Малайҙар үтә
Тиҙ дуҫлаштылар.
Әйтерһең инде
Иҫке таныштар.

Һәм бүләк итә
Ҡайыған түбәтәй
Фуат дуҫына.
Слава бәкеһе —
Фуат усында.

Әңгәмә ҡыҙҙы,
Һүҙҙән һүҙ китте.
Һиҙмәнеләр ҙә —
«Победа», выжлап,
Бакуға етте.

III

Мехти ағай өйөндә
Һәйбәтләп һыйландылар:
Тәмле былау ашанылар,
Серем итеп алдылар.

Ҙурҙар китте эш менән,
Сығып ҡала буйына.
Ә малайҙар тотондо
Бик мәрәкә уйынға.

Фуат әйтә дуҫына:
— Тороп тор һин саҡ ҡына.
Күршеләрҙән килтерәм
Бер ҡыҙыҡ китап ҡына,
Унда донъя һүрәттәр!
Үҙе сығып йүгерә.
Славаға күңелһеҙ,
Яңғыҙ булғанға күрә.

— Ҡарап керәйемсе, — ти, —
Урамда һуң ниҙәр бар,
Күренмәйме диңгеҙҙә
Яңы килгән караптар?

Урам аша — пристань.
Һис нәмәгә ҡарамай,
Ҡарар итә Слава:
— Барып күрмәй ярамай!

Өйҙән пристангәсә
Алыҫ түгел бит ара.
Баҡса аша анау юл
Туп-тура шунда бара.

11*

Славканың өҫтөндә
Сиккән матур күлдәге.
Сәләм бирә кешеләр,
Ҡунаҡ күреп, билдәле.

Туҡтап ҡалды аптырап:
— Пароходтар ни саҡлы!
Ҡармаҡ тотҡан малайҙар
Килеп сыҡты шул саҡта.

Көндә янған, ҡарайған
Бына тигән егеттәр:
— Украинанан килдеңме?
Рәхим ит! Сәләм! — тиҙәр.

Гасан һәм Мамед менән
Ҡул ҡыҫышып күрешкәс,
Уйлап ала Слава:
— Ҡайтып китеү килешмәҫ.

Ҡармаҡ сырнай малайҙар:
— Балыҡ ҡасмаҫ диңгеҙҙән.
— Исемең нисек?
— Слава.
— Тороп ҡалма һин беҙҙән.

Күмәкләшеп малайҙар
Китте ҡыҙырып ҡаланы.
Һорашалар: — Бориславта
Машина йорт һаламы?

Иҫе китеп, Слава
Ҡарап бара ян-яҡҡа,
Ҡала үтә оҡшаны
Ситтән килгән ҡунаҡҡа.

— Ап-аҡ таштан һалынған
Шундай бейек кем өйө?
Яуап бирә хужалар:
— Был — Низами музейы.

Бөйөк шағир Низами
Хеҙмәт халҡын йырлаған,
Шуға күрә шағирҙы
Халыҡ үҙе ҙурлаған.

Шунан һуң малайҙар
Баҡсаға инделәр,
Ундағы туғандар
Ҡәберенә килделәр.

Егерме алты комиссар
Бер ергә күмелгән —
Уларҙы дошмандар
Язалап үлтергән.

— Егерме алты комиссар! —
Слава, яҡташым,
Борислав сәләмен
Уларға һин тапшыр!
— Йоҡлағыҙ, туғандар.
Баш осоғоҙҙа
Мәңгелек дандар!

Баҡсанан сыҡҡас,
Урамдар буйлап
Китте малайҙар,
Ҙур уйҙар уйлап.

— Туҡта! — Слава тертләп китте. —
Нисек өйгә ҡайтам?
Көтәлер бит Фуат дуҫым,
Киткәнемә байтаҡ.

— Йорт һаны нисәнсе һуң?
Ә урамы ниндәй?
Ләкин уны өс малайҙың
Береһе лә белмәй.

— Туҡта әле! — ти Гасан,
Улай ҡапыл көймә,
Һин ул йорттоң билдәләрен
Берәм-берәм һөйлә.

— Йорто йәтеш инде уның,
Әллә йөҙләп тәҙрә,
Ишектәр күп.
— Тағы нәмә?
Билдәләр шул әҙерәк.

— Иҫкә төштө! Ҡапҡаһына
Һуҙып буйҙан-буйға:
«Хуш килдегеҙ!» — тип русса
Кемдер яҙып ҡуйған.

Мамед көлөп үк ебәрҙе:
— Мин ул йортто беләм!
Яп-яҡын ғына ул бынан,
Әйҙәгеҙ, минең менән!

Уңға киттеләр малайҙар,
Һәм һулға киттеләр,
Бына ғына икән ул йорт —
Килеп тә еттеләр.

Слава шатлана шул саҡ,
Малайҙар шатлана:
«Хуш килдегеҙ!» — тип ҙур итеп
Яҙылған ҡапҡаға.

— Бына мин ҡайтып еттем,
Әйҙәгеҙ, керегеҙ!
Минең иң яҡын дуҫымды —
Фуатты күрегеҙ.

Слава, саҡ-саҡ үрелеп,
Звонокка баҫа.
Сәсенә ал таҫма үргән
Бер ҡыҙ ишек аса.

Ҡулында энәһе уның,
Бармағында — уймаҡ,
Үҙе һөйкөмле, ә үҙе
Хәйләкәр ҙә һымаҡ.

— Рәхим итегеҙ!
Сәләм! — ти,

Шундай асыҡ күңел.
Төшөнөп ала малайҙар:
Был бит Фуат түгел.

— Түрҙән уҙығыҙ! Әйҙәгеҙ,
Ҡунаҡ булырһығыҙ.
Ысын күңелдән саҡыра
Ишекте асҡан ҡыҙ.

Һөйләп бирҙеләр ҡунаҡтар
Эҙләүҙәрен кемде.
Хәлде төшөнгәс, кескәй ҡыҙ
Рәхәтләнеп көлдө.

— Һис тә бошонма, Слава,
Мин ул йортто беләм, —
Толомон артҡа ташланы.
Әйҙәгеҙ, минең менән!

Уңға киттеләр күмәкләп
Һәм һулға киттеләр.
Бына ғына икән ул йорт —
Килеп тә еттеләр.

Слава шатлана шул саҡ,
Дуҫтары шатлана!
«Хуш килдегеҙ!» — тип ҙур итеп
Яҙылған ҡапҡаға.

Ҡапҡанан ингәс, Слава
Звонокка үрелде.
Ишек асылды. Ғәләмәт
Дәү әҙәм күренде.

Ашыҡмай ғына сыҡты ул,
Эйелеп һаҡ ҡына,
Шундай бейек, киң ишеккә
Һыя бит саҡ ҡына.

— Бар икән, әй,
ағайҙар! — тип,
Малайҙар шаҡ ҡатты.

Яурыны бер ҡолас,
Күкрәге тау саҡлы.

Етер ине ошо көстөң
Беҙгә өстән бере!
Баһадир уларға әйтә:
— Әйҙә, өйгә керең!

Таныш булайыҡ. Мин шатмын.
Сәләм, дуҫтар, һеҙгә!
Яҡшы белегеҙ, хәҙер һеҙ
Тап үҙ өйөгөҙҙә.

Инегеҙ. Тәүҙә күрһәтәм
Бер мәрәкә уйын.
Ә унан былау бешерәм —
Ошо булыр һыйым.

Кеше һайын берәр биҙрә
Әҙ булмаҫтыр инде.
Слава өндәште: — Беҙгә бит
Фуат кәрәк ине!

Малайҙар аңлатты хәлде
Әҙәп һаҡлап ҡына.
Ирмәккә һанап был эште,
Ағай көлөргә кереште,
Тәҙрәләр, сыңлап, ватылмай
Ҡалды саҡ-саҡ ҡына.

Көлөп туйғас, әйтте ағай:
— Мин ул йортто беләм. —
Түбәтәйен кейеп алды. —
Әйҙәгеҙ, минең менән!

Һеҙҙең өсөн ылау ҙа бар,
Йәгеҙ, кемдәр теләй? —
Юлсыларҙың дүртеһен дә
Иңбашына тейәй.

Слава әйтә: — Һеҙ, ағай,
Моғайын, көрәшсе!

— Пароходҡа күмер яғам,
Мин кочегар кеше.

Уңға киттеләр бишәүләп
Һәм һулға киттеләр,
Бына ғына икән ул йорт —
Килеп тә еттеләр.

Слава шатлана сикһеҙ,
Дуҫтар шатлана:
«Хуш килдегеҙ!» — тип, ҙур итеп
Яҙылған ҡапҡаға.

Звонок бирәләр. Һаҡ ҡына
Кемдер ишек аса.
Былар ҡаршыһына
Ҡарт бер
Әбей сығып баҫа.

Кочегар өндәшә ҡапыл:
— Күп һүҙҙә юҡ файҙа.
Әбей, тиҙерәк күрһәтегеҙ,
Беҙҙең Фуат ҡайҙа?

Әбей шат: — Күрергә килеп,
Шәп иттегеҙ ҡалай:
Ҡарап туя алмаҫһығыҙ —
Бына тигән малай.

Туп кеүек тупылдап тора,
Шундай матур, зирәк,
Үҙе һис тә илаҡ түгел,
Ундай егет һирәк!

Инәләр. Ә бүлмәләре
Йыйнаҡ, иркен, яҡты.
Унда бер апай йыр йырлап,
Бәүетә Фуатты.

Бәпестең йоҡо, моғайын,
Уйында ла юҡтыр —
Тыпырсынып дулап ята,
Күрәһең, бик шуҡтыр.

Йылмайып әйтә Слава:
— Был Фуат шул башҡа.
Төшөндөрөп бирә былар
Хәлде һөйләп баштан.

Апай көлөп үк ебәрҙе:
— Мин ул йортто беләм!
Әбей ҙә ҡатаһын кейҙе:
— Әйҙәгеҙ, беҙҙең менән!

Фуат апайҙың ҡулында,
Бер туҡтауһыҙ көлә.
Ул да, ахыры, ил гиҙеүҙең
Рәхәтлеген белә.

Ҡояш байый, офоҡтарҙы
Буяп алтынға.
Тулҡынлана сикһеҙ диңгеҙ
Баҡса артында.

Баралар. Аяҡтар ерҙе
Тап та топ тапай.
Слава менән кочегар,
Әбей һәм апай,
Гасан, Мамед һәм теге ҡыҙ
Баралар алдан,
Әллә күпме бала-саға
Эйәреп алған.

Килеп баҫты Слава атайҙың
Ҡаршыһына тап,
Уның менән Мехти ағай
Һәм ысын Фуат.

Килеп сыҡты улар өсәү
Ҡаршы урамдан,
Милицияға барышлай
Һорарға ярҙам.

Ҡысҡырып ебәрҙе атай:
— И, ҡасҡын малай!
Әйтерһең, шулай юғалып
Йөрөргә ярай.

Ә Мехти ағай ҡасҡынды
Ҡосаҡлап алды:
– Тағы ҡасмаһын! Тотоғоҙ! –
Тип һөрән һалды.

Ҡапыл ғына һүҙ таба алмай
Торғас бер килке,
Башланды ҡыҙыҡ әңгәмә,
Башланды көлкө.

Бик оҙаҡ яңы таныштар
Ҡул ҡыҫыштылар.
Мехти әйтә: – Миңә киттек
Ҡунаҡҡа, дуҫтар!

Киттеләр. Аяҡтар ерҙе
Тап та топ тапай.
Слава менән кочегар,
Әбей һәм апай,
Гасан, Мамед һәм теге ҡыҙ
Баралар алдан.
Әллә күпме кеше тағы
Эйәреп алған.

Атай менән Славаға
Барыһы тиңдәштәр,
Барыһы ҡунаҡсыл хужа,
Барыһы дуҫ-иштәр.

Ҡайҙа барма, ҡайҙа йөрөмә –
Дуҫтарың бергә.
Туғандар ҡосаҡлап ала
Һине һәр ерҙә.

Ниндәй иркен, ниндәй
татыу
Беҙҙең илебеҙ.
Украинаға ҡунаҡҡа,
Дуҫтар, килегеҙ!
Бөтә республикаларҙан
Рәхим итегеҙ!

## Венгр шағирҙарынан

### *Дьюла Ийеш*

### ҺАБАН КИЛӘ

Һабан килә, бураҙналар
Тигеҙ һыҙыла,
Әйтерһең, һабан артында
Китап яҙыла.

Ғүмер буйы тартҡан кеше
Михнәттең йөгөн,
Бәхеттең китабын яҙа
Иркенләп бөгөн.

Һабан килә — яңы юлдар
Артҡандан-арта,
Шул юлдарҙы уҡып бара
Бер кеше артта.

Күрәм, күҙҙәре намыҫлы,
Ҡеүәт — ҡулында.
Тәүге тапҡыр үҙе өсөн
Эшләй ул бында.

Ихлас килә ике һыйыр,
Һабанды тартып,
Бара һабан, һаруттарҙың
Тамырын аҡтарып.

Янған танкыларҙы һабан
Уратып үтә —
Улар, һүрәт булып, биткә
Инеп тә китә.

Һабан килә, һабансының
Оҫта ҡулдары
Һаман яҙа был китаптың
Яңы юлдарын.

Һөргән ер, гүйә, тын ала,
Һауа тап-таҙа...
Мадъярҙар үҙ тарихтарын
Тап шулай яҙа.

## *Золтан Зелк*

* * *

Йөҙө алһыу, ап-аҡ кейем кейгән,
Шәфҡәт нуры яна күҙендә –
Шундай бер фәрештә осоп йөрөнө
Минең балалығым күгендә.

Һәм мин үҫтем. Күкте ялҡын япты,
Төтөн ҡатыш елдәр өрҙөләр,
Күктә түгел, миңә ер өҫтөндә
Фәрештәләр сәләм бирҙеләр.

Изге ҡарсыҡтарым! Россияның
Алыҫтағы ауыл өйҙәре!
Һеҙҙә йылы тапты һалҡындарҙа
Уҙғынсының туҙған йөрәге.

Һәм мин, гүйә, ҡанлы ер өҫтөндә
Фәрештәләр йырын ишеттем.
Ҡара болот ярылып, күк йөҙҙәре
Асылды, тип, шул саҡ хис иттем.

Изге ҡарсыҡ, минең әсәм кеүек
Йылыттың һин боҙло ҡулымды.
Еңеләйттең һин әсе буран аша
Бара торған ауыр юлымды.

Һалҡын үҙе өйҙән сығып ҡасты
Рус мейесе янған сағында,
Боҫон бөркөп торған майлы бутҡа
Сүлмәк менән килде табынға.

Мейес башынан миңә урын һалды...
Ҡарсыҡ үҙе, ярты төн еткәс,
Көрттәр яра-яра ашығып китте,
Алыҫ поезд тауышын ишеткәс.

Рельстәрҙе шпалдарҙан һүтте
Бала һөйгән әсә ҡулдары,

Һәм дошмандың поезы ҡолап төштө,
Тик сыралар осто юғары.

...Өшөгәндә шулай йылыталар
Мейес янында күпме әсәйҙәр.
Мин аңланым, зәңгәр күктә түгел,
Фәрештәләр ерҙә йәшәйҙәр.

## КИЛСЕ, ҠУНАҠ, КИЛСЕ...

Беҙҙең ҡулдар ҡалтырамай инде
Кеше килеп ишек ҡаҡҡанда,
Һәм ҡараштар, ҡурҡаҡ ҡуян
кеүек,
Ситкә ҡасмай дуҫҡа баҡҡанда.

Инсе өйгә, ин, ҡәҙерле ҡунаҡ!
Элек бында аһ-зар, бәлә ине,
Суйын аҙым менән ингән ҡайғы
Көҙгөләргә ҡарап көлә ине.

Инсе, ҡунаҡ! Беҙҙә иркен хәҙер,
Менеп ултыр түргә, тартынма,
Тыңла, йөҙөнсө ҡат һөйләйбеҙ беҙ
Азат йәшәүебеҙ хаҡында.

Киң асырбыҙ ишек, тәҙрәләрҙе,
Саф һауалар инһен ел менән.
Ярғанаттай ҡайғы осмай инде,
Әсә булып, йылмая ҙур бәхет,
Уйҙар азат, йөҙҙәр яҡты инде!

## ҺӨЙЛӘШЕҮ

— Булырмы икән тағы һуғыш?
— Илде төҙө. Ҡайнай тормош.
Ватан көтә, эштәр бик күп,
Гөлдәр ултырт, сүптәрҙе түк.

Күрсе, ерҙә күпме бала —
Яңғырай көләү тауыштары.
Шулай шаулай тын тулҡындар
Һәм шишмәнең ағыштары...
Әйҙә, ҡушыл балаларға!
Шат һуҡмаҡтарҙан киттек бергә.
Күрәһеңме, бейеклектәр
Саҡыралар: «Кил!», — тип беҙгә.

Тар булһа ла ошо һуҡмаҡ
Тауҙарҙың иң бейегенә,
Аҡ болоттар ҡунған ергә
Кешеләрҙе алып менә.
Һикергәләп таштан-ташҡа
Бер кәзәкәй үтте алға.

Аяҡ баҫҡан — ер беҙҙеке,
Баш өҫтөндә зәңгәр һауа.
Йәшел ебәк туғайҙарҙа
Йәш килендәр һыйыр һауа.
Күнәктәргә һөттәр аға,
Әйтерһең дә, көмөш яуа.

Ҡойолғандай көмөш тамсы
Ни сыңлай ул, ҡолаҡ һалсы!
Төндәр килә бик алыҫтан
Нәҡ ярғанат һүрәтендә.
Ләкин тағы нурын сәсеп
Ерҙә тыуа өр-яңы таң.

Ә ярғанат шунда уҡ үлә,
Һәм яҡтылыҡ еңеп, көлә.
Шат ағалар, күрсе, көндәр
Көн юлында ҡарҙар, гөлдәр!

Һәр миҙгеле матур йылдың!
Илде төҙө! Ул ныҡ булһын!
Һаҡла тыныс һәр бер таңды,
Һаҡла, иптәш, һин Ватанды!

Ныҡлы булһын һәм сыныҡһын,
Аҡылың һәм ҡулың талмаҫ —
Шунда ғына ул йыртҡыстар
Сылбырҙарҙан ысҡына алмаҫ!

## *Дьюла Тот*

### ЭШСЕЛӘР

Улар һалдаттарса атлап килә,
Ҡояш кеүек балҡый йөҙҙәре.
Алға, алға! Ваҡыт түгел ялға,
Киләсәккә ҡарай күҙҙәре!

Елбер-елбер килгән байраҡтарҙың
Тәҙрәләргә төшә нурҙары.
Майҙандарҙа йорттар теҙеләләр,
Таштан тыуа хеҙмәт йырҙары.

Бөгөнгө һәр аҙым – беҙҙең еңеү,
Һәр бер төҙөлөш – һуғыш майҙаны.
Еңелеп ҡаса бынан иҫке тормош,
Яңылыҡтың яңғырай ҙур даны.

Ураҡ-сүкеш – ике туған улар!
Хеҙмәт! Бында һинең батырҙар!
Игенсе һәм эшсе бергә килә
Ныҡ баҫыла ҡорос аҙымдар.

Азат, бай һәм яҡты яңы донъя,
Беҙгә асыҡ бөтә юлдарың,
Ғорур һалдаттарса атлап килгән,
Венгрия, был һинең улдарың!

### КҮК САЛТ АЯҘ...

Йәйге көн. Күк түбәһенең
Салт аяҙ сағы.
Йомшаҡ елдә бәүелеп ала
Уҫаҡ япрағы.
Дунай аға. Аҡ күбектәр
Һикерә ярҙан.
Будапештың бер сигендә
Мин шиғыр яҙам.

Аҡ, әйҙә, һыу! Геүлә, Чепель,
Шауың таралһын!
Домнаң уты рифмаларҙы
Һуғарып алһын!

Йылы бүҫтау туҡый миңә
Туҡыусы ҡыҙҙар.
Ҡағыҙ – ҡыр. Унда өлгөрә
Минең шиғырҙар.

Был ҡырға мин саҡырырмын
Бөтә халыҡты:
– Бына уңыш. Йый, ҡалдырма
Ошо байлыҡты!

Йырым менән йылытырмын
Күк йондоҙҙарын,
Һипһен улар кешеләргә
Яҡты нурҙарын!

*Иожеф Фодор*

## ҠЫҘЫЛ ҠӘБЕР ТАШТАРЫ

*(Рус һалдаттарының ҡәберҙәре янында)*

Туғандарҙың ҡәбере янында
Мадъяр йүкәләре үҫәләр.
— Йоҡлағыҙ һеҙ тыныс!
Һалдат данығыҙ
Үлемһеҙ, тип елдәр иҫәләр.

Ут уйнатып, Волганан, Дондан
Ҡырлы далаларҙы уҙҙығыҙ.
Ҡыҙыл йондоҙло был ҡәбергәсә
Ҙур һәм ауыр булды юлығыҙ.
Уларға ял бир һин, мадъяр ере!
Һеҙ, йүкәләр, һаҡсы булығыҙ!

Ят тупраҡтар ҡабул итте ул саҡ
Совет һалдатының ҡандарын,
Үҙ Ватаны өсөн һуғышҡандай
Бында бирҙе улар йәндәрен.

Тыуған ерем минең, мадъяр ере,
Әсә бул һин һәр бер батырға,
Улар йоҡлай. Ә дандары йәшәй,
Ул дан хаҡлы мәңге балҡырға!

## *Петер Куцка*

### ДОНЪЯ

Күр, ҡыҙым,
Кеҫәрткеләргә ҡара,
Ә тегендә тулҡын ярып
Пароход йөҙөп бара.

— Быныһы ҡая була, ҡыҙым,
Тегеһе кеҫәртке, ҡара,
Ә йылғала тулҡын йәйеп
Пароход йөҙөп бара,
Арғы яҡта заводтарҙың
Төтөндәре ҡабара.

Был яҡта Көнсығыш, ҡыҙым,
Бында Көнбайыш була,
Дунай буйы киңлегендә
Беҙҙең Ватан һуҙыла.
...Шулай донъя күрһәтәм мин
Ике йәшлек ҡыҙыма.

## Вьетнам шағирҙарынан

### *То Хыу*

### ВЬЕТНАМДА ЯҘ

Ел ҡотора ер өҫтөндә. Күк ситендә ҡара томан.
Юл буйында йәшел үлән ҡара көйгән яу утынан.
Ә шулай ҙа күңел һиҙә алыҫтарҙан яҙ килгәнен, —
Әлегәсә күрелмәгән, яңы, матур яҙ көлгәнен.

Ерҙе йәп-йәшел үлән япҡан, тәнде ҡутыр, шешек баҫҡан.
Сәскә эсендә мәйет ятҡан, сәскәләргә ҡандар аҡҡан,
Етемдәрҙең йөҙҙәренә ҡайғы менән ҡояш баҡҡан.
Яҙ түгел был. Бүтән яҙ был. Килә беҙгә бүтән яҡтан.

Ул яңы яҙ етер тиҙҙән. Сәләмләйбеҙ бар йөрәктән,
Ун быуаттың яҙы уны тыуҡыған саф мөхәббәттән.
Күк аяҙыр. Гөлдәр еҫе солғап алыр ерҙең өҫтөн,
Ул яҙ аҡлар тир, ҡан түккән кешеләрҙең бар өмөтөн.

Халыҡтар уға шундай гүзәл маҡтау йыры сығарғандар,
Ошо йырҙа мөхәббәт тә, көс-ҡеүәт тә, илһам да бар.
Саф моңдары ерҙе гиҙә, даръя үтә, күккә менә, —
Дөрөҫлөктөң юлдары күп кешеләрҙең йөрәгенә.

Оҙаҡ көттөк беҙ һине, яҙ! Кил тиҙерәк, кил тиҙерәк!
Балҡып торған ҡояшындың кешеләргә нуры кәрәк.
Беҙ самаһыҙ ҡан-йәш түктек. Етер инде зар иларға,
Беҙ көтәбеҙ, кил, яҡты яҙ! Сыҡтыҡ һине ҡаршыларға.

## *Нгон Тюен*

### БУЙВОЛ МЕНӘН ҺӨЙЛӘШЕҮ

Мөңөрәмә, буйволым, көймә һин,
Мә, үлән шәлкеме, көйшә һин,
Һыуһаһаң, тилмертмәм мин һыуға,
Тик сыға күрмә һин баҫыуға.
Шып-шым тор ҡыуаҡта, ошонда,
«Ҡоҙғондар» йөнтәҫ баш осонда,
Көн буйы тик беҙҙе һағалай
Һәм «суҡып» китергә самалай!
Самолет (сыҡты тиһәң ҡыуаҡтан)
Оҙатыр тамуҡҡа ҡунаҡҡа.
Был заман буйволһыҙ көн итеү —
Барыбер ул ҡулһыҙ йөн тетеү.
Һинһеҙ кем йәм бирер был ҡырға
Шәфҡәтле ер ҡалыр ҡыҫырға,
Аслыҡтан балалар йәш түгер,
Һинһеҙ мин үҙем дә — мин түгел.
Йә инде, дуҫҡайым, баҡырма,
Түҙем бул ер-әсә хаҡына.
Дошман ул уҫал һәм хәйләкәр,
Беҙҙә лә етерлек хәйләләр.
Әйҙә ул ыжғырһын көн буйы,
Беҙ һабан һөрөрбөҙ төн буйы,
Беҙ тик алданып бармабыҙ
Һин барҙа — беҙ ас уҡ ҡалмабыҙ.

## *Нгуэн Дык Куй*

### ҠАЯЛА УЙЛАНЫУҘАР

Үлән һирәк үҫә был ҡаяла,
Тик ҡаҡ таштар ғына тирә-яҡта,
Ҡарап торам, тыуған ерем, һиңә
Эсем бошоп, ҡояш батҡан саҡта.

Мин һөйләшер инем тауың менән,
Тып-тын тора һаман тау, өндәшмәй,
Һүҙ ҡушмаҡсы булып һыуға киләм,
Өнһөҙ ағып ята һыу, һөйләшмәй.

Ташҡа уйылған бөйөк шиғырҙарҙы
Заман саңы баҫҡан, мүк ҡаплаған.
Был боронғо, йыйырсыҡлы ҡая
Ямғыр, ҡояш эҙен күп һаҡлаған.

Тауҙан, һыуҙан, тимәк, Ватанымдан
Һорайым мин шул саҡ: «Хужаң кем?» — тим.
Оҙаҡ яуап көтәм. Ә яуап юҡ.
Ниңә өндәшмәйһең, Ватаным, һин?

### ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫ

1

Вьетнам — бер ағас. Ботаҡтары —
Көньяғы һәм уның Төньяғы.
Көньяҡ менән Төньяҡ — бер кешенең
Ике ҡулы, ике аяғы.

2

Күрешкәндә эшләпәмде
Егетемә бүләк иттем.
«Ел осороп китте шул!» — тип,
Әсәйемә ҡайтып әйттем.

— Әсәй, башың сайҡап торма,
Ҡыуып ет тә елдән һора.

Күрешкәндә йөҙөгөмдө
Егетемә бүләк иттем.
«Ағын һыуға төшөрҙөм!» — тип,
Әсәйемә ҡайтып әйттем.
— Әсәй, башың сайҡап торма,
Ҡыуып ет тә, һыуҙан һора.

3

Күпме һөйләшһәк тә, йөрәгемдә
Әйтер һүҙем бөтмәç һин дуҫҡа.
Тау артынан ана ай ҙа ҡалҡа,
Хушлашырға ваҡыт. Төн ҡыҫҡа.

4

Бер ярға ла ҡағылмайса
Кәмә йөҙә йылға буйлап,
Туйға тиклем ҡыҙ бала ла
Тормош буйлап йөҙә уйнап.
Ярға туҡтар бер саҡ кәмә —
Булһам ине мин иркәмә.

## *Рәсүл Рзанан*

### ҺОРА

Ут ни күргән, шуларҙы һин
Көлдән һора,
Баш ни күргән, шуларҙы һин
Телдән һора.

Эш һағынған кеше хәлен
Ҡулдан һора,
Көй һағынған саздың хәлен
Ҡылдан һора.

Ошо ерҙән кем уҙғанды
Юлдан һора,
Көн кисергән яфаларҙы
Йылдан һора.

Бөтмәҫ төндөң фажиғәһен
Әйтер һуҡыр,
Аҡ моңдарға ҡара моңдар
Ләғнәт уҡыр.

Оҙон шәүлә һуҙылмаған
Кис күрмәнем,
Ил зарынан әсерәк зар
Һис күрмәнем.

Ике күҙем йомоп ҡына
Астым бары —
Шул мәлдә гүр алды күпме
Дуҫтарымды.
Юлдар оҙон, үрҙәр нескә,
Маҡсат көтә.
Юл таштары табандарҙы
Тишеп үтә.

Кем һынауға, кем михнәткә
Түҙә булыр,
Шуның ғына яулағаны —
Түбә булыр,

Тик шул етер моратының
Аҙағына,
Көсөн, аңын, йәнен арнап
Заманына.

Ут ни күргән, шуларҙы һин
Көлдән һора.
Ниндәй һүҙем ҡалыр,
Быны
Илдән һора.

## *Рәсүл Ғамзатовтан*

### ЙЫР

*(«Тыуған йылым» поэмаһынан)*

Төнөн дулай ел-дауыл.
Тәҙрә ҡаҡҡан кем һуң ул?
Был ямғыр шул, һин түгел.

Шығырлатып ҡапҡаны
Кем асты ла япманы?
Төнгө ел шул, һин түгел.

Бер ҡош ҡайтты ҡағынып,
Балаларын һағынып.
Был шоңҡар шул, һин түгел.

Тауға аҡбур һибелде,
Аҡ тун кейгән ҡарт килде.
Был һыуыҡ шул, һин түгел.

Көн-төн елберләп,
Һыбайлы гел бер егет.
Был ваҡыт шул, һин түгел.

Күктән ҡояш китмәне,
Тик күҙ йәше кипмәне,
Киптерерһең һин генә.

Килде яҙ. Нур йымылдай,
Ләкин йөрәк йылынмай.
Йылытырһың һин генә.

### ЙӘШ ШАҒИРҒА

Мин өгөтсөң түгел, йәш ҡәләмдәш,
Ә шулай ҙа әйтер һүҙем бар —
Ҡайғы менән шатлыҡ ҡауышҡанға,
Ғазап аша тыуа шиғырҙар.

Данлайһыңмы йәки ҡарғайһыңмы,
Үҙ-үҙеңә тоғро ҡал мәгәр,
Кәфенде һәм никах күлдәген, бел,
Бер үк энә менән тегәләр.

Бәхет хаҡында яҙ, тик шулай яҙ,
Һағыш сиртеп үтһен күңелде,
Тау йылғаларына ғүмер биргән
Шул ҡар менән ҡояш түгелме?

Мөхәббәтте йырла, ярһып йырла,
Тик онотма шуны ғүмергә:
Ысын һалдат йөрәгендә һөйөү
Нәфрәт менән йәшәр гел бергә.

Ҡабаландырма һин ҡәләмеңде,
Сабырлыҡта данға ирешһен,
Алма бешмәҫ борон кем ҡул һуҙһын?
Әсемәгән балды кем эсһен?

Оҫта аусылай бул, әгәр ҙә ул
Сыға ҡала икән һунарға,
Ҡуян ҡыуып ғүмер әрәм итмәҫ,
Ҡапҡан һалыр ҡуңыр һуҫарға.

* * *

...Юртаҡ инде, шашып, үрә тормай,
Ауыҙлығын ярһып сәйнәмәй...
Аҡ тештәре менән йылмайҙы ла
Башын эйҙе, һис ни шәйләмәй.

Ерән ялы уның ергә тейгән,
Аҡ ҡашҡаһы ваҡ-ваҡ һипкелле,
Мин уйланым башта:
бына ғәжәп,
Ат та көлә кеше шикелле.
Мин аптырап юртаҡ ҡаршыһына
Тубыҡландым килеп тын ғына.
Баҡһам, —
көлмәй,
Башын түбән эйеп,
Ирҙәр кеүек илай шым ғына.

Япраҡ төҫлө ике күҙ төбөндә
Ике бөртөк ысыҡ күренә...
Мин көлгәндә, йәнем,
яҡын килеп,
Текләберәк ҡара күҙемә.

## ӘТӘСТӘР

Мине әтәстәр уятты,
Төн таңға түнә ине,
Көлдәге саткылар төҫлө,
Йондоҙҙар һүнә ине.

Күҙем асып йылмайҙым мин,
Йоҡом осто, ҡош булып,
Тау йылғаһы уянды ла
Ташты миндә урғылып.

Ауылымда йырлай әсә
Күҙен алмай бишектән,
Ағамды йыҡҡан пуляның
Һыҙғырыуын ишетәм.

Монар аша күрәмен мин —
Ҙур текә ҡая тора,
Көлөү менән Илау шунда
Ҡосаҡлашып ултыра.

Бик алыҫ Кубала мине
Ят әтәстәр уятты,
Йырҙарымды тоҡандырып,
Йәндә йәшен уйнатты.

Дөрөҫлөк, ысын бейеклек
Алдында тик бәндә мин,
Дан, мәшәҡәт йоҡоһонан
Айныным был мәлдә мин.

Диңгеҙҙә тулҡын йымылдап
Хәбәрләй төн уҙғанын.
Йәнә яҡшылыҡҡа өндәй
Таң уятҡан выжданым.

Дағстанда, беләм, күптәр
Ташлап китте тауҙарҙы,
Һеҙ, әтәстәр, берәй таңда
Уятығыҙ шуларҙы.

Юҡ, ҡыҙрастар түгел улар,
Тик үҙгәртте холоҡто,
Минең кеүек ер һөрөүҙе,
Ат егеүҙе онотто.

Әй, ҡысҡырығыҙ, әтәстәр,
Бөткәнсе сыҙамығыҙ,
Кабинеттарҙан уларҙы
Быжғытып сығарығыҙ.

Түбәләргә үрләһендәр,
Һулышҡа иркен унда,
Йондоҙҙар томаланмайҙар
Фонарҙәр яҡтыһында.

Тормош тыныс, ябай унда,
Батырлыҡҡа баһа ҙур,
Үткер һүҙгә тап та төшмәй,
Тапҡыр аҡыл — баһадир.

Йәшлекте хәтерләп, улар
Алышһындар тау менән,
Зинһар, әтәстәр, шуларҙы
Уятығыҙ таң менән.

* * *

Һүнмәҫ шәм, һүнмәҫ, өрһәң дә
Талсыҡҡансы урттарың,
Ҡурҡам һине уйларға ла,
Онторға ла ҡурҡамын.

Аң менән тойғо тартыша,
Мин битараф — уртамын,
Ҡурҡам һине осратмам тип,
Осрашырға ҡурҡамын.

Ҡулыңды оҙаҡ ҡыҫырға
Ҡурҡам, һин ҡул биргәндә,
Тиҙ ебәрергә ҡурҡамын,
«Китәм инде» тигәндә.

Гүйә, сайҡалам диңгеҙҙә,
Тулҡындар араһында.
Ҡурҡам моңһоу күҙҙәреңдән,
Ҡурҡам шат ҡарашыңдан.

Ҡурҡам, бөтә кис буйына
Япа-яңғыҙ ултырһаң,
Бүтән егет менән күрһәм,
Тоғро түгел, тип ҡурҡам.

Ҡурҡам – үтә ялҡынлы һин,
Ҡурҡам – үтә сабырһың,
Ҡурҡам – кейәүгә сығырһың,
Ҡурҡам – сыҡмай ҡалырһың.

Исемеңде лә әйтергә
Ҡурҡамын мин – бисара,
Ә исемһеҙ тороп ҡалһаң, –
Ул сағында ни сара?

Яраланы йөрәгемде
Мәжнүнгә тейгән ҡылыс,
Һинең менән хәтәр миңә,
Ә һинһеҙ бик ҡурҡыныс.

### ТӨРЛӨ ЯҘЫУҘАР

*Ҡапҡаларҙағы һәм ишектәрҙәге яҙыуҙар*

Эй, уҙғынсы! Ҡапҡамды һин үтмә урап,
Шаҡымай ин. Кемлегеңде тормам һорап.

* * *

Килеп еткәс, ишегемә ҡарап ҡатма,
Йә өйгә ин, йә булмаһа ары атла.

* * *

Яҡшы ниәт менән килһәң, әйҙә, түрҙән!
Яман булһаң, юлың үтһен бүтән ерҙән.

* * *

Егет кеше! Ололай бел хужа хаҡын,
Хөрмәт күрәм тиһәң, маҡта уның атын.

* * *

Һәр ваҡыт кил, иртә тимә йә һуң тимә,
Ишегемдең шығырлауы йырҙай миңә.
Килмәҫ булһаң, беҙ уйларбыҙ һинең хаҡта:
Был кеше бит беҙ барыуҙан ҡурҡып ята.

*Сәңгелдәктәге яҙыуҙар*

Бала йоҡлай бит –
Ирҙәр, шауламағыҙ;
Юҡ-барҙан ғына
Дошманлашмағыҙ.

* * *

Һин дә, аҡһаҡал, бер саҡта
Елдең бит ошо юртаҡта.

* * *

Бында йоҡлаусыға тәмле төштәр керһен,
Төштәгеһен йәнә өнөндә лә күрһен.

* * *

Балаң бик тынғыһыҙ,
Ала бит маҙаңды.

Үҙеңә оҡшаған,
Әрләмә балаңды.

Сәсән дә түгел, батыр ҙа түгел,
Беҙҙең ише ине.
Үткән сағыңда сәләм биреп үт:
Ул кеше ине.

* * *

Тере саҡта һин теләһә нишлә,
Теләһәң ни уйла.

Тик ошо ташҡа ҡараштырырға
Онотоп ҡуйма.

* * *

Ялғанлыҡ менән алышты егет
Тере заманда.
Егет ята. Ә ялғанлыҡ иһә
Йөрөй һаман да.

* * *

«Батыр үлде, батыр күмелде» — тип,
Шатланма, ҡурҡаҡ!
Ул ҡалдырған мылтыҡ, ҡылыс, хәнйәр
Кем менән уртаҡ?

* * *

Малы ла юҡ ине, мөлкәте лә
Был тупраҡта ятҡан ярлының.
Йыр йырлайҙар уның тураһында,
Һәм йырлайҙар уның зар-моңон.

* * *

— Ҡарт кейәүме, һалҡын ҡәберме? —
— Һайла! — тигән яҙмыш бер саҡта.
— Бына кәләш ята ҡосаҡта.

12 – 1.0142.11

* * *

Кеше!
Яҙмышыңды һүкһәң, самала:
Минең хәл бит бигерәк алама.

*Эйәрҙәрҙәге яҙыуҙар*

Ултыр эйәрҙә, ҡартлыҡ баҫҡансы
Йәки атыңдан ҡолап ятҡансы.

* * *

Батыр йөрөй йә эйәрҙә,
Йәки ята ҡара ерҙә.

* * *

Егет, тыңла Хоҙай хаҡына,
Мине һалма кеше атына.

*Ҡаяларҙағы яҙыуҙар*

Ҡайғы күрһәң, ила, батыр,
Ғәйеп итмәҫ һине кем дә,
Хатта йәнһеҙ ҡаялар ҙа
Өнһөҙ илай йонсоу көндә.

* * *

Ярайыҙ һис булмаҫ батыр,
Биҙәй уны яра.
Ҡаяла һуң күпме йөй бар, —
Ыһ та итмәй баҫып тора.

* * *

Ғашиҡ егет, ҡыйыу бөркөт — һәр саҡ
шулай —
«Бейек микән был ҡая?» — тип һорап
тормай.

*Семен Даниловтан*

## ОЛОНХО ТЫҢЛАҒАНДАН ҺУҢ

Олонхосут тынды. Олонхоның
Һибелеп һүнде һуңғы моңдары.
Матур төштән йәнә өнгә ҡайттыҡ,
Юҡҡа сыҡты тарих монары.

Баһадирҙар, гүйә, ергә һеңде,
Кешнәүенән аттар туҡтаны.
Ҡылыс сыңы тынды.
Диңгеҙ аша
Зыңлап осмай инде уҡтары.

Кире ҡайтты тормош, ғүмер һөрмөш,
Хайран ҡалмыш һөнәр, әмәлгә.
Олонхонан хәтәрерәк бында. —
Ах, батырлыҡ кәрәк әҙәмгә!

Сабырлыҡтар кәрәк. Әле беҙҙе
Ситләп үтмәй йәбер, яфалар.
Замананың бөтә йәшендәре
Йөрәктәргә тоҫҡап аталар.

Замандашым! Һинең күкрәгеңдә
Ер һулышы, ваҡыт ағышы,
Ахмаҡлыҡҡа ҡаршы аҡыл яуы,
Ысын менән ялған алышы,
Мәкерҙәрҙән көслө аҡ мөхәббәт,
Ғәйбәттәрҙән өҫтөн тоғролоҡ... —
Бөтәһе лә күкрәгеңдең күрке.
Еңеүҙәрең, яраларың күпме? —
Бер артыңа ҡара боролоп!

Юҡ билеңдә ҡылыс, ҡулда — һөңгөң,
Йөрәгеңде ҡалҡан ҡапламай.
Ләкин һинең батырлыҡтан башҡа
Тарих үҙе аяҡ атламай.

Йыры бөткәс, олонхосут тынды,
Ҡаушырҙы ла арыҡ ҡулдарын.
...Асыҡ тәҙрәләрҙән бәреп инде.
Бөгөнгөнөң ярһыу моңдары.

# Аңлатмалар

## МОСТАЙ КӘРИМ: ШИҒРИӘТ, ИЖАД ЮЛЫНЫҢ ИКЕНСЕ ЯРТЫҺЫ

Тәнҡитселәр, теге йәки был әҙиптең ижадын күҙәтеүе еңел булһын өсөн, уның мираҫын бер нисә осорға бүлергә әүәҫ. Ләкин Мостай Кәримдең ижады шул тиклем берҙәм, тәбиғи – бәғзе бер ҙур булмаған шиғыры күп тауышлы һәм сағыу, уны хатта ниндәйҙер осорҙарға бүлеү еңелдән түгел. Шунлыҡтан был һайланма әҫәрҙәрҙе нәшергә әҙерләүсе төҙөүселәр хронологик принципты һайлап, шиғриәтен ике томға бүлгәндәр.

Тәүге томға Мостай Кәрим тарафынан 50 йәшкә тиклем ижад ителгән әҫәрҙәре инһә, икенсеһенә унан һуңғы йылдарҙа яҙылғандары тупланған. Өҫтәүенә, әҙиптең 50 йәше ижади тормошоноң ҡап уртаһына тура килә – 86 йыллыҡ тормош юлының 70 йылы ижадта үткән.

Мостай Кәримдең тәүге шиғыры 1934 йылдың декабрендә, 15 йәше тулыр-тулмаҫ сағында донъя күрһә, һуңғыһы 2005 йылда, вафат булырына бер нисә ай ҡалғас, баҫылып сыға.

Шулай ҙа күләме буйынса бер иш томдар әҙерләп булманы, икенсеһе тәүгеһенән күпкә йоҡараҡ килеп сыҡты. Әҙип тормошоноң икенсе яртыһына тура килгән ижад юлында бер поэма яҙылмай, ул тәржемә эшенә тотонмай ҙа тиерлек, оҙон шиғырҙар ҙа әллә ни күп түгел... Бер шиғыр юлы ла яҙылмаған йылдар ҙа осраны. Ҡайһы бер шиғырҙар, үҙенән һуң эйәрәсәк башҡа шиғырҙарҙың берәй журналға тупланма итеп ебәрерлек йыйылыуын көтөп, өҫтәл тартмаһында ятты. Әлбиттә, көтөүҙәр оҙаҡҡа һуҙылған мәлдәр ҙә булғылаңы...

Әйткәндәй, әҙиптең ижади яныуы һүрелгән мәлдәрен уның икенсе етди жанрҙарға күсеүе менән аңлатырға кәрәктер. Йылдар ҡырыҫ прозаға тарта, тиҙәрме әле... Хәйер, шиғриәтһеҙ ҙә булмай — «Салауат» (1971), «Ташлама утты, Прометей!» (1975) трагедиялары, «Әтәс мажаралары» (1940) ҡурсаҡ пьесаһы, «Гөлзифа» (1965) опера либреттоһы шиғри юлдарға һалынған.

Илле йәштә, тәү ҡарамаҡҡа, ир уртаһына еткән кеше тормошонда һиллек урынлаша. Һыҙланыуҙар баҫылған, сирҙәр сигенгән, ҡайғы-хәсрәттәр артта ҡалған кеүек. Һәр бер көнө үлем менән тамамланырға мөмкин булған һуғыш; оҙайлы айырылышыуҙар, өҙөлөп-өҙөлөп көтөүҙәр мәле, ҡатмарлы операциялар; Рауза эләккән хәтәр автокатастрофа – барыһы-барыһы ла артта ҡалды түгелме һуң? Балалар үҫте, хәҙер инде ейәндәр быуын нығыта – Илгиздең балалары Айгөл һәм Нияз, Әлфиәнең улы Тимербулат.

1972 йылда Мостай Кәрим «Йылғалар һөйләшә» шиғри йыйынтығы өсөн СССР-ҙың Дәүләт премияһына лайыҡ була, ә 1979 йылда Социалистик Хеҙмәт Геройы маҡтаулы исеме менән наградлана; 1984 йылда «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесы һәм «Ташлама утты, Прометей!» трагедияһы өсөн илдең ижади хеҙмәтте баһалаусы иң юғары дәрәжә — Ленин премияһы лауреаты була.

Ләкин иң мөһиме – халыҡ яратыуы. Йылдар үтеү менән Мостай Кәримдең ижады тамырҙары менән тәрәнгә, милли мәҙәниәтебеҙгә барып тоташты. Ҡасандыр, таулы райондарҙың береһендә, башҡорт ҡарты былай тигән: «Мин үҙем яңәлиф буйынса уҡыным, ә бына минең улым хәрефтәрҙе «Әлифба»ла баҫылған һинең шиғырҙарың буйынса өйрәнде, һуңынан ейәнем, бүләм дә шиғырҙарыңды яттан һөйләне, Хоҙай насип итһә – бүләсәрем дә ятлаясаҡ!» Эйе, шағир Бөйөк Ватан һуғышы башланмаҫ элек үк, егерме йәше саҡ тулғанда, шиғырҙарының мәктәп программаһына индерелеүе менән ғорурлана ала ине. Уның исеме халыҡ хәтеренә тап шул ваҡыттарҙан уйылып ҡалған.

Ҡарттың һүҙҙәренә Мостай шаярыу ҡатыш яуап бирә: «Алла бирһә, бүләсәрҙәреңде лә көтөп алырһың әле! Ә бына шиғырҙарымды ятларға теләрҙәрме-юҡмы – күҙ күрер...»

Ошо ваҡиғанан һуң Мостай Кәримдең «Тәңребеҙ төшөмә керҙе...» шиғыры донъя күрә:

*...Һин бит теге...*
*Яуҙар сапҡан Туҡтамыш...*
*— Тәңрем, мин бит Мостай Кәри-им.*
*(Имеш, кертәм төҙәтмә.)*
*— Мостай Кәрим? Әлегә һин*
*Тыуматанһың. Йөҙәтмә!*

(Ҡартлыҡ мәле яҡынлашҡанда «Тыумағанһың» тиеү ҡайҙа инде?..)

Автор шиғриәткә һирәгерәк мөрәжәғәт итһә лә, ул үҫешеүен дауам итте, икенсе төҫ алды, шиғыр үҙе торған һайын күрерәк һәм хис үткерлеге яғынан баҙығыраҡ, арбаусаныраҡ була барҙы. Әгәр ҙә ул элегерәк «Европа һәм Азия», «Ҡара һыуҙар», «Торналар ҡайтҡанда» поэтик әҫәрҙәрендә, йәмғиәттең мәңгелек көрәше һәм ҡаҙаныштары тураһында бәйән ҡылып, уратып алған донъяны киң ҡарашы менән ялмап алһа, хәҙер инде үткер ҡарашы менән кешенең эске донъяһы төпкөлдәренә үтеп инергә ынтыла.

Ҡасандыр Европанан Азияға ауыр йөгөн һөйрәп китеп барған кескәй ҡырмыҫҡаны шәйләһә, был юлы шағир һаман да шул уҡ үткер осло ҡарашы менән кеше йөрәгенең һәр бер хәрәкәтен күҙәтә. Иң көслө хәрәкәт — ул мөхәббәт, ҡайнар, хисле һөйөү тиеү генә аҙ, хәсрәтләнгән, һыҙланған йөрәктең мөхәббәте. Һәм Мостай Кәрим тап ошо мәлдә үҙенең тапҡыр, көтөлмәгән һүҙҙәрен әйтеп ыҫҡындыра:

*Һин тотаһың beләгемдән,*
*Инде тайҙым тигәндә,*
*Һин тыяһың күҙ йәшемде,*
*Инде тамды тигәндә.*

*Яндыраһың танһыгымды*
*Инде ҡанды тигәндә,*
*Терелтәһең йөрәгемде*
*Көлгә ҡалды тигәндә.*

Ваҡыты-ваҡыты менән уның шиғыр юлдарында бығаса осрамаған хис-тойғолар — борсолоу, хатта өмөттән яҙыуҙар күренеп ҡала.

*Һин киттең. Мин яныл ҡалдым.*
*Ҡуләгәңә бер ҡара.*

*Мин янамын. Шуға һинең*
*Күләгәң алдан бара.*

Әлбиттә, Мостай Кәримдең тотош шиғриәте үҙ тойғоларын, эске кисерештәрен һүрәтләүҙе генә аңлатмай. Уның шиғырҙарында элекке үткерлек кәмей төшә.

*Бөтә донъя аллы-гөллө*
*Ә шулай ҙа күңелем һағышлы... —*

ти автор һәм үҙен шундуҡ төҙәтеп ҡуя:

*Юғал, һағыш. Беҙ бит әле Ерҙәбеҙ.*
*Тирбәләбеҙ бер бишектә беҙ.*

Әҙиптең шиғриәте әленән-әле йәмғиәт һәм йәшәү, кеше йөрәге менән бәйле ҡапма-ҡаршылыҡтарға барып тоташа...

1975 йылда Мостай Кәрим дөйөм кешелек һәм йәмғиәт проблемаһын үҙәккә ҡуйған «Ташлама утты, Прометей!» исемле шиғри трагедияһын ижад итте. Әҫәрҙә барыһы ла әйтелеп бөтөлгән һымаҡ. Унда иһә ҡот осҡос бәлә ябырылып килеүе тойомланһа ла, өмөткә буш урын ҡала. Трагедия аҙағында Прометей былай тип әйтә: бына нимә ти:

*...йыһан имен,*
*Йыһан бөтөн булһа...*
*Мин ҡайтырмын һеҙгә, кешеләр.*

Биш йылдан һуң, трагедияла әйтелеп бөтөлмәгән һүҙәр ҡалғанын тойоп, әҙип «Прометей монологтары» тигән циклын яҙа. Шиғриәтенең көсөргәнеше артҡандан-арта, кешелек донъяһы (бөтә кешелек, «Европа — Азия»лағы кеүек уның бер өлөшө түгел) тәрән кризис кисерә.

Беренсе томды төҙөүселәр тарафынан яҙылған «Мостай Кәрим: шиғриәт, юлдың тәүге өлөшө» мәҡәләһе ошондай һүҙәр менән тамамлана: «Ләкин шағирҙың иң бейек осоштары һәм иң тәрән төңөлөүҙәре алда әле».

Эйе, әҙип өсөн юғары осоштар ижад менән бәйле булды. Тормош юлының икенсе яртыһында ла, 50 йәшенән һуң, ижад эше икенсе һулыш алып, юғарыға күтәрелде — проза, драматургия, шиғриәткә тартылды.

Ә төңөлөүҙәре...

«Мин ҡайтырмын һеҙгә, кешеләр», — ти Прометей Мостай Кәрим трагедияһында.

Ләкин Прометейға әйләнеп ҡайтырлыҡ урын... юҡ икәнлеге асыҡлана.

Һәр ваҡыттағыса, беҙҙә бәләләр «яҡшы ниәт»тән тыуа. Үҙгәртеп ҡороу заманы килә. Тиҙ арала барыһы ла шағирҙың һүҙҙәре хаҡ икәнлегенә шаһит була. Әҙип нимәнән шөбһәләнгән, ҡурҡҡан, нимәне тойомлаған — барыһы ла алдына килә. «Бар матурлығында», тиҙәр быңдай осраҡта. Артабан барыһы ла билдәле: кәрәкле һәм көтөлгән үҙгәртеп ҡороуҙар ҡуйылған маҡсаттарға ирешә алмай, сөнки

*...әҙәм затын аңдып тора*
*Шул уҡ михнәт, мәкер,*
*Аңдып тора ҡара томаналыҡ,*
*Үс алыусы хәтер.*

Һанап кителгән бына шул төшөнсәләр рухи тормошто емереп, аллаларҙы алмаштырып, илде ҡаҡшаттылар. Мостай әйтмешләй:

*Илебеҙҙе фаш иттек,*
*Ҡойроҡтарҙы баш иттек,*
*Аҡты маңып ҡарага,*
*Тоҙ һибәбеҙ ярага.*

Кем эшләне һуң быны? Бөтә зат-зәүере Мостай Кәрим ижадын белеүе менән ҡәнәғәт сал сәсле башҡортмо? Юҡ, уларҙы заманында Пушкин, Лермонтов «ҡара ялпы»лар, Мостай уларҙы «баш булып киткән ҡойроҡтар» тип атай. «Ҡара ялпы»лар һәммәһен үҙ юғарылығынан сығып фашланы һәм ғәйепһеҙгә хөкөм итте. Шағир өйөндә һүгенеүле аноним шылтыратыуҙар яңғыраны, ниндәйҙер «рекетирҙар» янап, аҡса талап итте. Бәғзе берәүҙәр китапханаларҙа Мостай Кәрим портретын стеналарҙан ҡуптара, китаптарын йәшерәләр. Яҙыусылар кәңәшмәһендә элекке кумирҙарҙы «йығып һалдылар», бер һиммәтле очерксы, кисәге «обком һандуғасы», күҙлеге аша зәһәр осҡондар сәсеп, йоҙроҡ төйҙө: «Ыбыр-сыбыр менән булышыу нимәгә! «Баш»тан башларға кәрәк, «баш»тан». Кем баш икәнлеге аңлашылалыр. Бер нәмә аңлашылмай — нимәне «башларға» һуң? Дүрт быуын башҡорт уҡыусылары тәрбиәләнгән шиғри-

этте алып ташларғамы? Йәки тағы ла ҡурҡынысыраҡ нәмә уйлап табырғалыр?

Мостай Кәрим күп кенә ҡыйынлыҡтар кисерҙе, яҡты донъяла аҙ йәшәмәне, һәм тормоштан нимә көтөргә кәрәклеген, ә нимәнеңдер күптән уҙып киткәнен белә ине. Ләкин ул бындай күңел тетрәнеүҙәренә әҙер түгел ине. Баҡтиһәң, төп бәлә һуғыш яланында пуля ярсығы ярып ингән күкрәген тотоп ҡолағанда, йәки бер нисә йылдан ауыр сихуттан сәсәп ауғанда түгел, ана шул «ҡара ялпы»лар шашҡанда барлыҡҡа килгән икән.

*Сәбәпле лә, сәбәпһеҙ ҙә*
*Йөрәгем яна.*
*Бар өмөтөм һиндә, заман,*
*Ярамды яма.*
*Юҡ, ямама. Бит барыбер*
*Ҡаласаҡ йөйө.*
*Үҙ юлымды уҙайым*
*Яралы көйө.*

*Пуляларҙан ауманым мин —*
*Шулай мәсьәлә.*
*Аяҡтан ғына йыҡмаһын*
*Мыҫҡыл... мәсхәрә...*

Ләкин был да иң оло ҡаза булмай әле. Мостай Кәрим ил емерелеүен, рухи ҡиммәттәрҙең үҙгәреүен үтә ауыр кисерә.

*Тәхеттә ултырған көйө*
*Аҙаша батшалар.*
*Көн-төн һәрмәнеп тә, һуҡмаҡ тапмай,*
*Аҙаша баш ҡала.*

Башҡа хәсрәттәре лә етерлек ине шағирҙың. Бер-бер артлы дуҫтары баҡый донъяға күсә: 1985 йылда Ҡайсын Кулиев, 1995 йылда — Михаил Дудин, 2004 йылда — Рәсүл Ғамзатов. Иң ауыр юғалтыу 2002 йылға тура килә — алтмыш йылдан ашыу бергә йәшәгән Раузаһы вафат була. Быларҙың барыһы ла аҡтыҡ көстө һура. Ләкин нәҡ шул йылдарҙа, ҡартлыҡ килеп, яҡын кешеләр мәрхүм булғанда, уның ҙур Тыуған иле юҡҡа сығып (юғалтыу тойғоһо йыш ҡына шәхескә табыштарға ҡарағанда ла ныҡыраҡ тәьҫир итеп, уны юғары ижади үрҙәргә сойорғота),

«ҡара ялпы»ның ташланыуҙарына бирешмәй ныҡ тора, аллалар алмашынып, үҙенең элекке идеалдарына тоғро ҡалғанда, һәм үҙенең дә яҡты донъяны тиҙҙән ташлап китәсәген тойғанда, Мостай Кәрим ижады оторо баҙыҡланып, әҙәбиәт донъяһында уны шағир булараҡ нығытып ҡуйҙы. Хәҙер инде шағир:

*Күрҙем, ялҡын — яныу ҡыуанысы.*
*Белдем, төтөн — яныу ғазабы, —*

тип сатнатып әйтә ала ине.

Мостай Кәрим 2005 йылдың 21 сентябрендә, 86 йәше тулыуға бер ай ҡалғас, вафат булды. Шағир үҙенең һуңғы әҫәрендә һүҙҙең шиғри көсө хаҡында түбәндәгесә яҙа:

*...Уны тыңлай һәммә ғаләм*
*Хайран ҡалып:*
*Һауала — ҡош, тауҙа — йәнлек,*
*Һыуҙа — балыҡ.*

Тимәк, ул үҙе лә, ижад кешеһе булараҡ, мәңгелек көскә эйә.

## ТӨҘӨҮСЕЛӘРҘӘН

*Беҙҙең комментарийҙарҙа тәүҙә әҫәрҙең яҙылыу датаһы ҡуйыла. Автор үҙе ҡуйған булһа, ул тырнаҡтар эсенә алына, төҙөүселәр ҡуйған дата тырнаҡтарһыҙ бирелә. Бының артынан әҫәр тәү тапҡыр баҫылған газета йәки журнал номеры бирелә. Әгәр газета, журнал һандары юҡ икән, тимәк, әҫәр ваҡытлы матбуғатта донъя күрмәгән йәки төҙөүселәр таба алмаған. Аҙаҡ был шиғыр беренсе тапҡыр баҫылған китаптың исеме бирелә.*

## ҠЫҪҠАРТЫУҘАР:

**Яҙғы тауыштар** – 41 – «Мостай Кәрим. Яҙғы тауыштар (шиғырҙар). Өфө, Башгосиздат – 1941». Яуаплы мөхәррире Ш. Килдейәров.

**Әҫәрҙәр** – 71 – «Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. II том. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте – 1971». Мөхәррире М. Игебаева.

**Шигырьләр һәм поэмалар** – 77 – «Мостай Кәрим. Шигырьләр һәм поэмалар. Казан, Татарстан китап нәшрияты – 1977». Мөхәррире Я. Халитов.

**Мөхәббәттең дүрт мизгеле** – 78 – «Мостай Кәрим. Мөхәббәттең дүрт мизгеле – 78. Шиғырҙар. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте – 1978». Мөхәррире Р. Шаммасов.

**Заманалар** – 82 – «Мостай Кәрим. Шиғырҙар, поэмалар, пьесалар. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте – 1982». Мөхәррире М. Игебаева.

**Шиғырҙар, поэмалар** – 85 – «Мостай Кәрим. Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте – 1985». Мөхәррире И. Әхтәмйәнов.

**Әҫәрҙәр** – 87 – «Мостай Кәрим. I том. Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте – 1987». Мөхәррире М. Игебаева.

**Әҫәрҙәр** – 95 – «Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. I том. Шиғырҙар һәм поэмалар. Өфө, «Китап» – 1995». Мөхәррире М. Игебаева.

**«Ғүмер мизгелдәре»** – Мостай Кәрим. Ғүмер мизгелдәре. Өфө, «Китап» – 2002». Мөхәррире Ф. Ноғоманова.

**«Оҙон юл»** – «Мостай Кәрим. Оҙон юл. Шиғырҙар. Өфө, «Китап» – 2004». Мөхәррире З. Ҡарабаева.

## ВАҠЫТЛЫ МАТБУҒАТТА:

**«Ағиҙел»** – (1949 йылға тиклем – «Октябрь», 1960 йылға тиклем «Әҙәби Башҡортостан») – Башҡортостан Яҙыусылар союзының айлыҡ журналы.

**«Һәнәк»** – республика айлыҡ сатира һәм юмор журналы.

**«Башҡортостан ҡыҙы»** – республика айлыҡ ижтимағи-сәйәси журналы.

**«Башҡортостан»** – (1924 йылдың августынан – «Башҡортостан», 1937 йылдан алып – «Ҡыҙыл Башҡортостан», 1951 йылдан алып – «Совет Башҡортостаны», 1990 йылдан алып хәҙерге исемдә) – республика ижтимағи-сәйәси газетаһы.

**«Ҡыҙыл таң»** – республика ижтимағи-сәйәси һәм мәҙәни газетаһы.

**«Ленинсы»** – (1923 йылдан алып – «Йәш юҡһыл», 1930 йылдан алып – «Йәш коммунар», 1990 йылдан алып – «Йәшлек») – республика йәштәр газетаһы.

**«Йәш төҙөүсе»** – (1959 йылдан алып «Башҡортостан пионеры», 1991 йылдан алып – «Йәншишмә») – республика балалар һәм үҫмерҙәр газетаһы.

### Сигеү сигә ҡыҙҙар

«Ағиҙел», 1970, № 11. «Әҫәрҙәр» – 71.

Был әҫәр шағирҙың «Ғүмер миҙгелдәре» китабына ингән «Ашҡаҙар» новеллаһы менән ауаздаш.

### «Еңеүҙәрем, уңыштарым булды...»

«Ағиҙел», 1970, № 11. «Әҫәрҙәр» – 71.

### «Ейән – йәш арыҫлан. Бар ҡеүәте...»

«Ағиҙел», 1970, № 11. «Әҫәрҙәр» – 71.

### «Аҡыллыға серем систем...»

«Ағиҙел», 1970, № 11. «Әҫәрҙәр» – 71.

### «– Талпынаһың, ашҡынаһың...»

«Ағиҙел», 1970, № 11. «Әҫәрҙәр» – 71.

Журналда шиғырҙың тәүге юлы: *«Табандарың ергә теймәй...»*

### Бүләктәр

«25.VII.70. Таллин». «Ҡыҙыл таң», 1970, 25 сентябрь. «Әҫәрҙәр» – 71.

### Һағыныу

«26.VII.70. Таллин. «Гостиница «Кунгла». «Совет Башҡортостаны», 1970, 9 сентябрь. «Әҫәрҙәр» – 71.

*Ак томанлы Акманайҙы,*

*Ак ҡайынлы Сагылымды* – Аҡманай һәм Сағыл – шағирҙың тыуған ауылы Келәш янындағы ҡүл һәм ҡалҡыулыҡ.

### «Тәбиғәттә шундай миҙгел бар...»

«Ағиҙел», 1970, № 11. «Әҫәрҙәр» – 71.

### Ҡоштар осорам

«Ленинсы», 1970, 8 сентябрь. «Әҫәрҙәр» – 71.

**«Мин киткәндә: «Етем ҡалдырма!» – тип...»**

«Ағиҙел», 1970, № 11. «Әҫәрҙәр» – 71.

**Экспромттар**

Шағир архивынан.

**«Был юлы һин диңгеҙ буйлап килдең...»**

«Ағиҙел», 1972, № 4. «Шигырьләр һәм поэмалар» (Казан) – 77.

**«Яҙғы гөрләүектәр гөрләп аҡҡан...»**

«Ағиҙел», 1972, № 4. «Шигырьләр һәм поэмалар» (Казан) – 77.

**«Осраштыҡ беҙ ниңә һинең менән...»**

«Ағиҙел», 1972, № 4. «Шигырьләр һәм поэмалар» (Казан) – 77.

Журналда «Салауаттың Ануға әйткәне» исеме менән бирелгән. Салауат, Ану – «Салауат» трагедияһының төп геройҙары.

**«Ғүмерем минең сәйер уйын булды...»**

«Ағиҙел», 1972, № 4. «Шигырьләр һәм поэмалар» (Казан) – 77.

Сыңғыҙ Тореҡол улы Айытматов (1928 – 2008) – Ҡырғыҙстандың халыҡ яҙыусыһы.

**«Ялтырап тормайым. Донъя...»**

«Ағиҙел», 1972, № 4. «Шигырьләр һәм поэмалар» (Казан) – 77.

**«Кистән дауыл ҡупты. Ярға һуғылып...»**

«Ағиҙел», 1972, № 4. «Шигырьләр һәм поэмалар» (Казан) – 77.

**«Һин йоҡлайһың. Йоҡоң шундай тыныс...»**

«2.II.72». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» – 78.

**«Ашҡынамын, һәр саҡ ашығамын...»**

«2.VII.72». Шағир архивынан.

*Ҡара йылға* — 1848 йылда А. С. Пушкин дуэлдә һәләк булған урын.

1841 йылда *Машуктау* эргәһендә М. Ю. Лермонтов дуэлдә һәләкәткә осрай.

**«Ҡартая йөҙөм, ҡулдарым...»**

«28.VII.72». Шағир архивынан.

**Үткәндәргә салауат!**

«Ағиҙел», 1974, № 3. «Шигырьләр һәм поэмалар» (Казан) — 77.

**Диңгеҙ зары**

«Ағиҙел», 1974, № 3. «Шигырьләр һәм поэмалар» (Казан) — 77.

**Хәбәрҙәр яҙ**

«Ағиҙел», 1974, № 3. «Шигырьләр һәм поэмалар» (Казан) — 77.

**Көҙгө Дим ярында**

«Совет Башҡортостаны», 1974, 11 ғинуар. «Шигырьләр һәм поэмалар» (Казан) — 77.

**«Шуны беләм: донъяға мин...»**

«Ағиҙел», 1974, № 3. «Шигырьләр һәм поэмалар» (Казан) — 77.

**Ҡайһыбыҙ илағыраҡ?**

«Ағиҙел», 1974, № 3. «Шигырьләр һәм поэмалар» (Казан) — 77.

**«О мөхәббәт! Күпме йыуаштарҙы...»**

«15.X.73». «Гостиница «Россия». «Ағиҙел», 1974, № 3. «Шигырьләр һәм поэмалар» (Казан) — 77.

### «Төнгө Рига. Төнгө тын баҡса...»

«Ағиҙел», 1974, № 3. «Шиғырьләр һәм поэмалар» (Казан) — 77.

### «Тәбиғәттең байтаҡ серен беләм...»

«Ағиҙел», 1974, № 3. «Шиғырьләр һәм поэмалар» (Казан) — 77.

### «Ас кешегә аҫыл таш һонғандай...»

«8.II.74». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78. Ҡулъяҙма вариантта «Тик матур ғына ҡатынға» тип билдәләнгән.

### Ике бөркөт

«24.I.75». Шағир архивынан.

Советтар Союзы Геройҙары Александр Матвеевич Матросов (Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов (1924 — 1943), Миңлеғәли Хәбибулла улы Ғөбәйҙуллинға (1923 — 1944) арналған.

Әҫәргә мәшһүр композитор Заһир Ғарип улы Исмәғилев (1917 — 2003) кантата яҙған.

### «Һин тотаһың беләгемдән...»

«4.II.75». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

### «Эшләнмәгән эштәр ҡала...»

«9.IV.75». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

### «Беҙ өсәү был таңда...»

«13–14.I.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

### Ашыҡма килергә, ҡартлығым

«14.I.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

**Кис киләә**

«15–16.I.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» – 78.

**«Бөгөн төн мин һинең янда ҡалам...»**

«17.I.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» – 78.

**«Мөхәббәтем һәләк булыр тип гел ҡурҡам...»**

«18.I.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» – 78.

**«Быйылғы көҙ шундай сыуаҡ килде...»**

«19.I.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» – 78.

**«Эй, мөхәббәт! Тилерткес бер яҙҙа...»**

«28.I.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» – 78.

**9 май**

«29–30.I.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» – 78.

Эпиграф Геродоттың «Тарих» хеҙмәтенән алынған.

Геродот (490 – 480 йй. арауығында тыуған, б. э. т. яҡынса 425 й. вафат булған) – боронғо грек тарихсыһы.

**«Күгем тәпәш, офоҡ яҡын...»**

«31.I.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» – 78.

Михаил Александрович Дудин (1916–1993) – бөйөк рус яҙыусыһы.

**«Бүлеүсе йәннәткә инмәç...»**

«1.II.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» – 78.

**«Ғашиҡтар, һеҙгә өндәшәм...»**

«1.II.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

**Миҙгелдәр**

«5–7.II.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

**«Намыҫ менән беҙҙең ара сәйер...»**

«8–9.II.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

**«Истамбулда киске аҙан...»**

«13.II.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

Әҫәр шағирҙың Төркиәгә сәфәренән һуң, 1965 йылда яҙыла башлаған. 1977 йылда осланып ҡуйылған.

**«Яҙылмаған, һыҙылмаған...»**

«13.II.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

**«Имеш, һине Хоҙай яратҡан, ти...»**

«14.II.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

**«Донъяның йөҙө күренмәй...»**

«15.II.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

**«Кешеләр төнгә уҙалар...»**

«18.II.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

### Һоро турғай

«23.II.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

Китапҡа инмәгән строфа (ҡулъяҙмала):

*Яҙмыш икмәгенән өлөш төшә*
*Кемгә бөтөн, кемгә ҡыйырсыҡ.*
*Кәпәс сөйә-сөйә, тәбрикләнек,*
*Әҙер яҙҙа килгән сыйырсыҡ.*

### «Өс мөғжизә мине әсир алды...»

«25.II.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

### «Өй(ө)рөлә ап-аҡ өйөрмәләр...»

«28.II.77». «Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

### «— Һөйөү нимә? — тинем ир кешегә...»

«Ағиҙел», 1977, № 8. «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» — 78.

### «Һин киттең. Мин яңып ҡалдым...»

«14.I.78». «Башҡортостан ҡыҙы», 1978, № 11. «Шиғырҙар, поэмалар» — 85.

### «Киске ҡыҙғылт ағын һыу өҫтөндә...»

«1978 йыл, 2 февраль». «Ағиҙел», 1979, № 10. «Шиғырҙар, поэмалар» — 85.

Эпиграф күренекле инглиз яҙыусыһы, Нобель премияһы лауреаты Редъярд Киплингтың (1865—1936) «Боливар» хаҡында хикәйәт»енән алынған.

### Моңһоу йыр

«6.II.78. Малеевка». «Башҡортостан ҡыҙы», 1978, № 11. «Шиғырҙар, поэмалар» — 85.

### «Зәңгәр күктә ап-аҡ бураҙналар...»

«8.II.78. Малеевка». Шағир архивынан.

### Ялбарыу йыры

«8.II.78. Малеевка». «Совет Башҡортостаны», 1978, 23 сентябрь. «Шиғырҙар, поэмалар» — 85.

### Рәхмәт йыры

«10.II.78. Малеевка». «Башҡортостан ҡыҙы» (1978, № 11) журналында исемләнмәгән. «Шиғырҙар, поэмалар» — 85.

### Усаҡ йыры

«12.III.78. Малеевка». «Башҡортостан ҡыҙы» (1978, № 11) журналында исемләнмәгән. «Шиғырҙар, поэмалар» — 85.

### «Яҙмыштарҙан уҙмыш бар» спектакленә яҙылған йырҙар

Ҡулһыҙ Насип йыры. — «1978 йыл, 3–8 декабрь».
Һыу юлы. — «1978 йыл, 4 декабрь».
Мәрәһим йыры. — «1978 йыл, 5 декабрь».
Сәңгелдәк йыры. — «1978 йыл, 8 декабрь».
«Ағиҙел», 1979, № 10. «Шиғырҙар, поэмалар» — 85.

«Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» әҫәре буйынса эшләнгән «Яҙмыштарҙан уҙмыш бар» спектакленә яҙылған йырҙар. Композитор Рим Мәхмүт улы Хәсәнов (1947) көйҙәре.

### «Һуғыш яраларым сир килтерҙе...»

«1979 йыл, 28 ғинуар». «Ағиҙел», 1979, № 10. «Кызыл таң», 1999, 20 октябрь. «Шиғырҙар, поэмалар» — 85.

### «Был донъяның һәр төбәге...»

«3.III.79». «Көндәлектәр». — «Ағиҙел», 2006, № 10.

### «Һауаларҙа, бейектәрҙә...»

«1979 йыл, 4 февраль». «Ағиҙел», 1979, № 10. «Шиғырҙар, поэмалар» — 85.

### «Ап-аҡ урман аша килдең миңә...»

«1979 йыл, 22 февраль». «Совет Башҡортостаны», 1979, 26 октябрь. «Шиғырҙар, поэмалар» – 85.

### «Янамағыҙ миңә һеҙ, бәләләр...»

«1979 йыл, 10 март». «Совет Башҡортостаны, 1979, 26 октябрь.

«Шиғырҙар, поэмалар» – 85.

### Прометей монологтары

Оран – «9.I.80. Дубулты».

Мөхәббәт сәғәте – «6.I.80. Дубулты».

Бошонғанда – «5.I.80. Дубулты».

Агазия янғас – «4.I.80. Дубулты».

Үткәндәр көтөп тора – «16.I.80. Дубулты».

Ваҡыт туҡталмаһын! – «26.III.81».

*Агазия* – «Ташлама утты, Прометей!» драмаһы героиняһы.

Эпиграф И. В. Гётеның «Фауст» әҫәренән алынған.

Гёте Иоганн Вольфганг (1749–1832) – бөйөк немец шағиры.

«Ағиҙел», 1981, № 8. «Шиғырҙар, поэмалар» – 85.

«Прометей монологтары» яҙылыуы хаҡында автор үҙенең ҡулъяҙмаһында һәм тәүге баҫмала («Ағиҙел»дә) түбәндәгесә белдерә: «Бер нисә йыл әүәл мин «Ташлама утты, Прометей!» тигән трагедия яҙғайным. Ошонан һуң уйым менән йыш ҡына Прометей образына әйләнеп ҡайттым. «Прометей монологтары» тигән шиғырҙар циклы яҙырға булдым. Шуларҙың бер өлөшөн тәҡдим итәм».

### Легенда

«18.I.80. Дубулты». «Ағиҙел», 1981, № 9. «Шиғырҙар, поэмалар» – 85.

### Йырланасаҡ йырым – Ҡаҙағстан

«15.XI.80». «Ағиҙел», 1981, № 9. «Шиғырҙар, поэмалар» – 85.

*Әүәзовты алған кәшәнә* — Мөхтәр Омархан улы Әүәзов (1897 — 1961) — мәшһүр ҡаҙаҡ яҙыусыһы, ғалим.

### «Бер башымда мең ғәмем бар...»

«14.II.81. Малеевка». «Көндәлектәр» — «Ағиҙел», 2006, № 10.

### «Иҫке һүҙҙәр иҫкермәһен өсөн...»

«24.III.81. Малеевка». «Ағиҙел», 1981, № 9. «Шиғырҙар, поэмалар» — 85.

### «Томан төйөп тултырылған...»

«27.III.81». «Ағиҙел», 1981, № 9. «Шиғырҙар, поэмалар» — 85.

### Юҡһыныу

«12.IX.82». «Ағиҙел», 1983, № 1. «Шиғырҙар, поэмалар» — 85. Ҡулъяҙмала һәм «Ағиҙел» журналында әҫәр «Бошоноу» тип исемләнгән. Ҡулъяҙмала: «1905 йылдың ун туғыҙынсы ғинуары — Сәғит Агиштың тыуған көнө. 1909 йылдың ун туғыҙынсы ғинуары — Баязит Бикбай тыуған көн. Ошо уҡ йылдың туғыҙынсы феврале — Рәшит Ниғмәти тыуған көн. Был шиғыр улар иҫтәлегенә арналған моңһоу бер ауаз».

### «Был ғүмерем йондоҙ микән?..»

«2.XI.82-се йылғы яҙманан».
«Көндәлектәр» — «Ағиҙел», 2006, № 10.

### Илешкә йыр

«1983 йыл, июль, Илеш». «Шиғырҙар, поэмалар» — 85.
*Ул, могайын, Базы буйы* — Базы — Башҡортостандағы йылға.

### Ун өс быуат үтеп...

«1.VIII.83. Горно-Алтайск». «Шиғырҙар, поэмалар» — 85.

Ошо йылдарҙа Таулы Алтайҙа башҡорт әҙәбиәте көндәре булып үткән.

### Тәгәрәп китте йөрәгем

«Ағиҙел», 1988, № 6. «Әҫәрҙәр» — 95.

### «Быуат ярым инде хөкөм бара...»

«24.X.84». «Көндәлектәр» — «Ағиҙел», 2006, № 10.

Ҡулъяҙмала «Йәнәһе бер шаярыу» тип ҡуйылған.

*Анна Керн хөкөм аҫтында* — Анна Петровна Керн (1800 — 1879).

А. С. Пушкиндың уға бағышланған шиғыры — «Я помню чудное мгновенье».

### Беренсе көн

«01.01.1985. Малеевка». «Ағиҙел», 1985, № 5. «Әҫәрҙәр» — 87.

### «Ҡышын диңгеҙ ярҙан айырылды...»

«21.01.1985. Малеевка». «Ағиҙел», 1985, № 5. «Әҫәрҙәр» — 87.

### «Мөхәббәт йырын һипләмә...»

«25.01. 1985. Малеевка». «Ағиҙел», 1985, № 5. «Әҫәрҙәр» — 87.

### «Тағы ла яҙ. Тағы эсмәй иҫерҙем...»

«26.01.1985. Малеевка». «Ағиҙел», 1985, № 5. «Әҫәрҙәр» — 87.

### «Аяғыма кейеп ҡара...»

«27.01.1985. Малеевка». «Ағиҙел», 1985, № 5. «Әҫәрҙәр» — 87.

### Ҡояшлы ямғыр

«21.IX.85. Дача». Шағир архивынан.

Кулъяҙмалағы яҙыу: «Өс таған» повесы буйынса Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры ҡуйған спектаклдә кескәй героиня Гөлнур йырлай».

**«Был донъяны күреп ҡыуандым...»**

«24.I.87. Малеевка». «Көндәлектәр» – «Ағиҙел», 2006, № 11.

Кулъяҙмала: «Алама төш күрҙем. Иртәнсәк ошо юлдар килде – М. К.»

**«Төнгә кергәс, төштәремдә күргән...»**

«28.I.87. Малеевка». «Көндәлектәр» – «Ағиҙел», 2006, № 11

Кулъяҙмала: «Назар Нәжмиҙән хат алғас, яҙып ҡуйҙым».

Назар Нәжми (1918 – 1999) – Башҡортостандың халыҡ шағиры.

**«Йырҙарымды һауаларға ашырҙым...»**

«28.VI.87. Йоматау». «Ағиҙел», 1988, № 6. «Әҫәрҙәр» – 95.

**Яуап заманы**

«1.VII.87. Йоматау». Шағир архивынан.

**«Һорайҙар: «Бәхетлеһеңме?»**

«Совет Башҡортостаны», 1987 йыл, 1 ноябрь. «Оҙон юл» – 2004.

**Кеше**

«2.II.88. Малеевка». «Ағиҙел», 1988, № 6. «Әҫәрҙәр» – 95. «Башҡортостан», 2009, 20 октябрь.

**«Был мәңгелек түңәрәк ер...»**

«5.II.88». «Совет Башҡортостаны», 1990 йыл, 12 июль. «Әҫәрҙәр» – 95.

**Ҡартлыҡҡа инеү**

«14.II.88. Мәскәү». «Ағиҙел», 1988, № 6. «Әҫәрҙәр» — 95.

**«Уҙған төн төшөмдә һалдылар мине...»**

«21.II.88. Өфө». «Ағиҙел», 1988, № 6. «Әҫәрҙәр» — 95.

Роберт Бернс (1759 — 1796) — бөйөк шотланд шағиры.

**«О, йәшлек, зарланма...»**

«14.III.88». «Ағиҙел», 1988, № 6. «Әҫәрҙәр» — 95.

**Өфө иҫтәлеге**

«3.IV.88». Шағир архивынан. Ғүмәр Усмановҡа арналған.

1988 йылдың майында Өфөлә Татар әҙәбиәте һәм сәнғәте көндәре уҙғарыла.

Ғүмәр Исмәғил улы Усманов (1932) — шул ваҡыттарҙа Татарстан Республикаһының дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре.

**«Мейес башында ултырған...»**

«13.X. 88. Дауахана». «Ағиҙел», 1991, № 1. «Әҫәрҙәр» — 95. Ҡулъяҙмалағы вариант:

* * *

*Мейес башында ултырам.*
*Олатайым зарлана:*
*«И, замана, замана...*
*Хур иттеләр иманды,*
*Таптанылар әҙәпте.*
*Бүре быуман бүрене,*
*Әҙәм ашай әҙәмде .*
*Төп башына ултырып,*
*Хәҙер үҙем зарланам:*
*«И, заманам, заманам...*
*Ҡутыр баҫты ер йөҙөн,*
*Һыуҙы ағыу үлтерә.*

*Йырмыслайҙар күк күҙен .*
*Йәйҙә йәшел үлән юҡ,*
*Ҡыштың ап-аҡ ҡары юҡ.*
*Шашып бейей ейәндәр;*
*Ейәндәрҙең зары юҡ.*

**«Уйҙарымдың йомғағы һин...»**

«Ағиҙел», 1991, № 1. «Әҫәрҙәр» – 95.

**Япраҡ яуғанда**

«Ағиҙел», 1988, № 6. «Әҫәрҙәр» – 95.

**«Урмандарға сыҡһам, урмандар тын...»**

«Совет Башҡортостаны» (1990, 12 июль) газетаһында *«Моңайыу»* тип исемләнгән. «Әҫәрҙәр» – 95.

**«Көнгә сыҡһам, өрә-өрә...»**

«12.III.89. Магнитогорск». «Ағиҙел», 1991, № 1. «Әҫәрҙәр» – 95.

**«Батҡан ҡояшҡа ҡыҙынып ултырам...»**

«23.VIII.89. Йоматау». «Әҫәрҙәр» – 95.

**Тимербулатҡа өгөт**

«27.VIII. 89. Йоматау». «Ағиҙел», 1991, № 1. «Әҫәрҙәр» – 95.

Тимербулат Олег улы Кәримов (1974) – шағирҙың ейәне.

**Имән**

«19.IX.89. Йоматау». «Совет Башҡортостаны», 1989 йыл, 24 сентябрь. Әҫәрҙәр» – 95.

**Бикбулатҡа йыр**

«Башҡортостан», 1995, 27 июнь. «Әҫәрҙәр» – 95.

*Бикбулат* — Башҡортостандың Күгәрсен районындағы ауыл.

### Юлдыбайға йыр

«Башҡортостан», 1995, 27 июнь. «Әҫәрҙәр» — 95.

*Юлдыбай* — Башҡортостандың Йылайыр районындағы ауыл.

Ҡулъяҙмала: «Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле туғандар, яҡташтар! «Яҡташтар» тиергә хаҡым бар минең. Сөнки бына 28 йыл инде Юлдыбай ауылының гражданины булып йөрөйөм. Үҙең хаҡында «Почетлы» һүҙен әйтергә тел барып тора. Өфөлә рәнйетә башлаһалар, һыйыныр төйәгем бар минең. Бында килгәс, ошо тупраҡҡа аяҡ баҫҡас, ошондай шиғри юлдар телгә килде...»

### «Йөҙҙө уҙып киткән анама...»

«Әҫәрҙәр» — 95.

### «Яҙам шиғыр, бәйет-фәлән яҙам...»

«02.V.90». «Совет Башҡортостаны», 1990 йыл, 12 июль. «Әҫәрҙәр» — 95.

### «Отош уйындары уйнаманым...»

«26.V.90». «Совет Башҡортостаны», 1990 йыл, 12 июль. «Әҫәрҙәр» — 95.

### «Был донъяла мин аҙаштым, буғай...»

«27.V.90». «Ағиҙел», 1991, № 1. «Әҫәрҙәр» — 95.

### «Барыр юлдарым йыраҡ...»

«30.V.90». «Ағиҙел», 1991, № 1. «Әҫәрҙәр» — 95.

### «И, шағирым...»

«30.V.90. Йоматау». «Ағиҙел», 1991, № 1. «Әҫәрҙәр» — 95.

### Коштар эйәһенең әйткәне

«30.V.90. Йоматау». «Ағиҙел», 1991, № 1. «Әҫәрҙәр» — 95.

**«Сая бейенең һин, менеп бер саҡ...»**

«9.VI.90. Йоматау». «Совет Башҡортостаны», 1990 йыл, 12 июль. «Әҫәрҙәр» — 95.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа (1938) арналған.

**«— Тағы килдем, зыярат ҡылайым, тип...»**

«14.VI.90. Келәш». «Ағиҙел», 1991, № 1. «Әҫәрҙәр» — 95.

**Быуат**

«Ағиҙел», 1991, № 1. «Әҫәрҙәр» — 95.

Беренсе бүлек: «13. VI. 90. Йоматау»; икенсе бүлек: «19—20. VI. Йоматау».

*Мин дә бөгөн шул һорауҙы бирәм:*

*— Ниндәй быуат хәҙер урамда?* — Борис Пастернактың «Сестра моя — жизнь» (1917) китабына ингән түбәндәге шиғыр юлдары күҙ уңында тотола:

*В кашне, ладонью заслонясь,*
*Сквозь фортку крикну детворе:*
*— Какое, милые, у нас*
*Тысячелетие на дворе?*

Борис Леонидович Пастернак (1890 — 1960) — бөйөк рус шағиры, Нобель премияһы лауреаты (1958).

**Беҙ кем?**

«8.VII.90. Йоматау». «Совет Башҡортостаны», 1990 йыл, 12 июль. «Әҫәрҙәр» — 95.

**«Хаҡлыҡ юллап, инде арып-талып...»**

«Совет Башҡортостаны», 1990 йыл, 12 июль. «Әҫәрҙәр» — 95.

**«Төн ҡыҫҡартып, көндәремде оҙайттым...»**

«Әҫәрҙәр» — 95.

**«Булды ҡотло көндәр...»**

«Ағиҙел»,1991, № 3. «Әҫәрҙәр» – 95.

**Ҡурҡам**

«Ағиҙел», 1991, № 3. «Оҙон юл» – 2004.

**«Ул киткәндән бирле...»**

«Ғүмер миҙгелдәре». Өфө, «Китап» – 2002.

Көндәлектәге яҙыу: «Уҙған йәй Ырымбурға барышлай Юшатыр йылғаһын аша сыҡҡанда, йөрәгемде ҡапыл сәнсеү алды. Сәбәбе бар. Баязит Бикбайҙың тәү эскән, тәү йөҙгән һыуы ул – Юшатыр. Хәтер тертләп уянды, һағыш яңырҙы. Көтөлмәгән шиғри юлдар уйға килде».

**Илгизгә**

«Ағиҙел», 1991, № 3. «Әҫәрҙәр» – 95.

Илгиз Кәримов (1942) – шағирҙың улы, яҙыусы һәм тәржемәсе.

Эпиграф «Томан» халыҡ йырынан алынған.

**«Көҙҙө оҙаҡ көҙән йыйырҙы...»**

«Ағиҙел», 1991, № 3. «Әҫәрҙәр» – 95.

**«Ергә һыға йәйге хәтәр дауыл...»**

«Ағиҙел», 1991, № 3. «Әҫәрҙәр» – 95.

**Перестройка бәйете**

«Һәнәк» (1991, № 5) журналында «Замана бәйете» тип исемләнгән. Йәйәләр эсендә – «Йәрми Сәйетенсәрәк». Йәрми Сәйете (Сәйет Әхмәт улы Исмәғилев (1884 – 1970) – Башҡортостандың халыҡ сәсәне). «Әҫәрҙәр» – 95.

«Һәнәк»тәге вариант:

*Елдәр ҡуҙҙы көйрәтте,*
*Йылдар һүҙҙе һөйләтте.*
*Көйрәтте лә, һөйләтте лә,*
*Тик нәмәгә өйрәтте?*
*Күп нәмәгә өйрәтте.*

*Ҡыҙыл ҡатыш ҡарабыҙ,*
*Тамаҡтарҙы ярабыҙ.*
*Ҡул ҡаушырып тормайбыҙ,*
*Барабандар ҡағабыҙ,*
*Йылға булып ағабыҙ.*

*Илебеҙҙе фаш иттек,*
*Ҡойроҡтарҙы баш иттек.*
*Аҡты манып ҡараға,*
*Тоҙ һибәбеҙ яраға.*
*Яңырттыҡ бар сабаны,*
*Әммә арба барманы.*
*Ҡышын ектек арбаны,*
*Әммә эштәр барманы.*
*Ҡысҡырҙыҡ бар көс-хәлгә:*
*– Әй, хәлүә, хәлүә, хәлүә!*
*Һөрән һалдыҡ нахаҡҡа –*
*Хәйер, ғәм юҡ икмәктә,*
*Бөтә ҡайғы ирмәктә.*
*Сыҙаманы оҙаҡҡа*
*Һоро ҡуян тиреһе.*
*Эй ынтылдыҡ тик алға.*
*Әллә Хо[illegible] «ултыртты»,*
*Әллә [illegible] котортто.*

*Көс-хәлдәрем ҡалманы*
*Был бәйетте яҙырға,*
*Китәмен тел һатырға,*
*Китәмен ер һатырға,*
*Китәмен ил һатырға*
*Рыночный баҙарға.*

**«Ер йөҙөндә һап-һары көҙ...»**

«II.91. Переделкино». «Ағиҙел», 1993, № 1. «Әҫәрҙәр» – 95.

Дағстандың халыҡ шағиры Рәсүл Ғамзатовҡа (1923 – 2003) арналған.

**Өс толпар**

«12.V.91». «Әҫәрҙәр» – 95.
*Татар Туҡай, татар Таҡташ.*
*Татар Туфан. Тамаша!*

Ғабдулла Туҡай (1886 – 1913), Һаҙый Таҡташ (1900–1931), Хәсән Туфан (1900 – 1981) – бөйөк татар шағирҙары.

**«Ер ҡорғаҡһып янып көйгәндә...»**

«5.VI.91. Йоматау». «Көндәлектәр» – «Ағиҙел», 2006, № 11.

**«Йәнә һиңә, тәҡдирем, баш эйәмен...»**

«5.VI.91. Йоматау». «Көндәлектәр» – «Ағиҙел», 2006, № 11.

**«Күҙ теймәһен Фәүзиәгә...»**

«20.XII.91». «Ғүмер миҙгелдәре», Өфө, 2002.

Фәүзиә Абдулла ҡыҙы Рәхимғолова (1921 – 1995) – күренекле балалар яҙыусыһы.

Китапта: «...Етмеш йәштән үткәс, дуҫыма, замандашыма, ҡәләмдәшемә, серҙәшемә ошо һүҙҙәрҙе әйтә алыуыма ифрат шатмын. Һүҙемде таҡмаҡ әйтеп тамамларға теләйем».

**«Замананың хаҡһыҙ яҙаһына...»**

«18.II.92. Переделкино». «Ағиҙел», 1993, № 1. «Әҫәрҙәр» – 95.

**Хәүефле уйҙар**

«21.II.92. Переделкино». Ҡулъяҙмала һәм «Ағиҙел» (1993, № 1) журналында «Ҡыҫыр уйҙар» тип исемләнгән. «Әҫәрҙәр» – 95.

**«Ирҙәр йөрөр юлға оҙатҡанда...»**

«22.II.92». «Ағиҙел», 1993, № 1. «Әҫәрҙәр» – 95.

**«Уны алмаһаң, и, Хоҙайым...»**

«X.1992». «Ғүмер миҙгелдәре» – 2004.

Шағирә Зарема Әхмәтйәноваға (1945 – 1992) арналған. Уның хаҡында Мостай Кәрим көндәлегендә былай тип яҙа: «Быйыл яҙ миңә Зареманың һуңғы йыйынтығының ҡулъяҙмаһы менән танышырға тура килде. Был китап мине айырыуса шатландырҙы ла, шомландырҙы ла. Унда шағирәнең таланты оторо тәрәнерәк асыла. Бында уйҙар урғылыуы ла – бөтәһе лә бар. Шиғырҙарҙы

уҡып сыҡҡас, күңелде билдәһеҙ борсолоу ҙа солғап алды. Ул әйтер һүҙен әйтеп өлгөрөргә, асыр серҙәрен асып бөтөрөргә, үҙ рухын шиктәрҙән һәм ғазаптарҙан бушатырға, азат итергә шундай ашыға... Ошо борсолоу миңә әле түгел, әйткәнемсә, теге саҡта уҡ килеп ҡағылды. Яңы китап миңә ниндәйҙер бәлә, фажиғә килеүен хәбәр итте һымаҡ».

**«Бешеп еткәс кенә, дауыл йыға...»**

«Ағиҙел», 1993, № 1. «Әҫәрҙәр» — 95.

**«Шаһ затынан, моғайын, һин, Санабархон...»**

«25.X.92. Ташкент».

Ҡулъяҙмала: «Үзбәк ҡыҙы Санабархон альбомына яҙылған шиғыр».

**Тәүге ҡар**

«1.XII.92». «Көндәлектәр» — «Ағиҙел», 2006, № 11.

**«Илдең ҡото киткән был көндәрҙә...»**

«24.12.92. Переделкино». «Көндәлектәр» — «Ағиҙел», 2006, № 11.

**«Был донъяны бик күп гиҙҙем...»**

«1992». «Ағиҙел», 1993, № 1. «Әҫәрҙәр» — 95.

**«Илар инем, тыуған өйөм...»**

«Ағиҙел», 1993, № 1. «Әҫәрҙәр» — 95.

**«Ут менән һыу ҡушылып аға хәҙер...»**

«24.I.93. Переделкино». «Әҫәрҙәр» — 95.

**Шаярыу**

«7.IV.93». «Көндәлектәр» — «Ағиҙел», 2007, № 10.

**Яңауылға йыр**

«29.V.93». «Башҡортостан», 1995 йыл, 27 июнь. «Әҫәрҙәр» — 95.

«Көндәлектәр»ҙә «Яңауыл әтәстәре» тип исемләнгән; тәүге ике строфа башлап яҙылған.

**«Был донъяла бер ожмахта булдым...»**

«16.X.93». «Көндәлектәр» — «Ағиҙел», 2007, № 10.

### Шишмә моңдары

«23.II.93». «Башкортостан», 1995, 27 июнь. «Әҫәрҙәр» – 95.

Тәлғәт Муса улы Шәрипов (1928) – башкорт композиторы.

Ҡулъяҙмалағы әҫәрҙең өсөнсө юлы: *«Һин юлымдың башы»*.

### Ауаз менән бәхәс

«8.X.93». «Кызыл таң», 1994, 25 октябрь. «Әҫәрҙәр» – 95.

### «Шатлыктарым шөйлә иҫкерәләр...»

«13.II.93». «Ағиҙел», 1993, № 1. «Әҫәрҙәр» – 95.

### «Донъя сирле. Кемдер унан...»

«27.I.94. Переделкино». «Ағиҙел», 1994, № 7. «Әҫәрҙәр» – 95.

### «Октябрҙә йондоҙҙар төҫ ташлай...»

«3.II.94. Переделкино». «Ағиҙел», 1994, № 7. «Әҫәрҙәр» – 95.

### Ай саҡырҙы

«10.II.94. Переделкино». «Ағиҙел», 1994, № 7. «Әҫәрҙәр» – 95.

